*Беҙҙең менән һоҡланған кешеләрҙе беҙ һәр ваҡыт яратабыҙ, ә бына үҙебеҙ һоҡланған кешеләрҙе һәр ваҡыт та яратып етмәйбеҙ.*
*(Франсуа де Ларошфуко).*

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

4 - 10 СЕНТЯБРЬ (ҺАРЫСАЙ) 2010 ЙЫЛ

www.kiskeufa.ru    2002 йылдан башлап сыға    Һатыуҙа хаҡы ирекле    №36 (402)

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Киләһе быуындарға...**

ни рәүешле тапшырырбыҙ Ирәмәлебеҙҙе?



3

**Президент кубогын кем яулар?**



4

**Рәсәйҙә ҡайҙа йәшәүе еңелерәк...**

ауылдамы, ҡаламы?



5

**Ер аҫтында үтеп китте,**

минең ярты ғүмерем...



12-13

14 ТВ-программа

# ТАРИХЫҢДЫ ТАНЫТ, БАШҠОРТ-ҠАЛА!

## Ул карталарҙа Башкырд, Башгирд, Паскерти, Pascerty, Имәнҡала, Баскирь, хәҙер иһә Өфө - Уфа тип билдәләнә



Был шатлыклы хәбәрҙе күптән көткәйнек: Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов 3 августа "Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте һәм ЮНЕСКО араһында үҙ-ара хеҙмәттәшлек тураһында Килешеүҙе - Коммюникены тормошҡа ашырыу саралары планы" тураһындағы ҡарарға ҡул ҡуйҙы. Был ҡарарҙағы саралар араһында башҡорт халҡының, ғөмүмән, Башҡортостан Республикаһы халыҡтарының бай тарихын тикшереү, рухи донъяһын барлау, пропагандалау һәм үҫтереү өлкәһендә күптән көтөлгән пункттар бар:

1. "Башҡорт ҡалаһы" тарихи, фәнни-мәҙәни һәм туристик үҙәген булдырыу өсөн Рәсәй, Европа һәм башҡа фәнни үҙәктәрҙән, ЮНЕСКО белгестәре һәм эксперттарын йәлеп итеп, "Өфө-II ҡаласығы" археологик ҡомарткы объектын фәнни өйрәнеүҙе дауам итергә".

2."Башҡорт " ҡалаһына нигеҙ һалыныу ваҡытын һәм уның үҫеш этаптарын билдәләү буйынса халыҡ-ара фәнни конференция үткәрергә".

"Өфө-II ҡаласығы" археологик ҡомарткыһы баш ҡаланың уртаһында, Пушкин урамы участкаһында, Ново-Мостовой менән Воровский урамдары араһында урынлашҡан. Ул беҙҙең эраның баштарында барлыҡҡа килә һәм XV - XVI быуаттарға саҡлы йәшәй. Был археологик ҡомарткы хаҡында "Киске Өфө" әленән-әле яҙып торҙо. Ошо яңы барлыҡҡа килгән һәм Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов ҡул ҡуйған документтың ни тиклем дәрәжәлә әһәмиәтле булыуын тағы ла бер тапҡыр һыҙыҡ өҫтөнә алыу өсөн һүҙҙе үҙебеҙҙең авторҙарға - тарихсы-ғалимдарыбыҙға бирәйек.

(Дауамы 8-9-сы биттәрҙә).

ИШАРА

**Быйылғы ҡот осҡос ҡоролоҡто Хоҙайҙың кешеләрҙе ахырызаман яҡынлашыуы менән иҫкәртеүе тип аңларға ла кәрәктер. Өләсәйем бәләкәй саҡта беҙгә: "Балалар, һыуҙың ҡәҙерен белегеҙ, юҡҡа тәләфләмәгеҙ",- тиһә, беҙ унын ейән-ейәнсәрҙәре аптырай торғайныҡ. "Нисек инде ул һыуҙы йәлләп тотонорға була? Донъяла һыуҙан күп нәмә юҡ. Ана бит, йылға бер туҡтауһыҙ ағып ята. Инйәр йылғаһы тәрән һәм киң, етмәһә, көнө-төнө аҡһа ла, һыуы бөтмәй ҙә бөтмәй...", тигәнебеҙгә өләсәйем: "Килер бер көн, балалар, алтын өҫтөндә йөрөрһөгөҙ, кеше алтынға әйләнеп тә ҡарамаҫ, бер тамсы һыуға зар-интизар булыр", - тине. Быйылғы эҫелектә бер тамсы һыуға зар-интизар булмаһаҡ та, былдай ҡоролоҡ йылдан-йыл ҡабатлана ҡалһа, өләсәйем әйткәндәренең раҫҡа сығырын күҙ алдына килтереп була. Йәй көнө беҙҙең ауыл тирәһендә генә бер нисә ваҡ шишмә-сығанаҡтар ҡороно ла инде...**

# НИҢӘ ФӘҠӘТ УРМАНДАР ЯНДЫ?

## Олигархтар ҡулына ҡалмаҫ өсөн...

Йәйге эҫегә түҙә алмаған саҡта бер француз халыҡ әкиәте иҫкә килеп төштө. Бер бай хеҙмәтсеһенә баҡсалағы ҡайһы бер ағастарҙы ҡырҡырға ҡушып, ҡырҡылырға тейештәренә тамға һалып сыҡҡан. Хеҙмәтсе эшкә тотонған. Билдәләнгән ағастарҙы ҡырҡып бөтөп, билдәһе булмаған бер ҙур ағас янына килһә, ағас башында нимәлер ялтырай икән. Һәр ялтыраған әйберҙе алтын тип белгән ҡыҙыҡһыныусан хеҙмәтсе ағас башына менә башлаған. Ул юғарыға күтәрелгән һайын, теге ялтыр нәмә тағы ла өҫкәрәк күсә икән. Оторо сәмләнгән ялсы өҫкә менә лә менә. Бына бер мәл ағас болоттарға килеп етә. Шул саҡ хеҙмәтсе янына фәрештә осоп менә лә, былай тип өндәшә:

- Һеҙ ерҙә йәшәргә яратылған бәндәләр ниңә шулай үҙегеҙгә кәрәгенән артыҡ ҡыҙыҡһыныусан ул? Һин бит хужаң билдә һалған ағастарҙы ҡырҡып бөттөң, үҙ бурысыңды үтәнең, был бит һинең ағасың түгел. Йә, әйт әле, бында күктә һин нимә эшләй алаһың?

Хеҙмәтсе яуапһыҙ ҡала. Аҫҡа ҡараһа, ер күренмәй ҙә икән. Башы әйләнеп, йә өҫкә китергә йә аҫҡа төшөргә белмәй, ҡатып ҡалған. Уның бер ни тип яуап бирә алмаҫын аңлаған фәрештә:

- Ярар, мин һинең был ҡылығың өсөн яза бирәм. Балаңдың балаһы йөҙ йәшкә еткәс кенә үләсәкһең, - ти ҙә, хеҙмәтсене ергә төшөрә.

Хеҙмәтсе нисек итеп үлергә белмәй, ҡартлыҡтың, ерҙәге тормоштоң барлыҡ михнәт-яфаларын күреп, үкенеп йәшәй торғас, балаһының балаһы йөҙ йәшкә килеп етә. Шул саҡ ҡарт бар ауыл халҡын йыйып:

- Кешеләр, күпте эҙләмәгеҙ, бары менән ҡәнәғәт булып, Хоҙай ҡушыуы буйынса йәшәгеҙ. Бәхетле ҡартлыҡ тигәндәре алдыҡ ҡына икән, - ти ҙә иркен һулап йән бирә.

Быйыл бигерәк тә Европала ауылдары менән һыу аҫтында ҡалған, Рәсәйҙә ауылдары менән янған кешеләрҙе уйлаһам, күҙ алдыма кешеләрҙең битарафлығына, ҡомһоҙлоғона, яуызлығына түҙә алмай, әсе күҙ йәштәре ямғыр булып ергә яуған, әрнеүҙәре ерҙе яндырған күктәге Изгеләр килеп баҫа. Әгәр ҙә беҙ быларҙың барыһын Хоҙайҙан тип ҡабул итәбеҙ икән, был ғәмәлде башҡарыусылар ҙа шул уҡ изге йәнле бит.

Ә ут-ялҡынды, боҙ-һыуҙы ниңә ебәрә һуң Хаҡ Тәғәлә? Бәлки, кешеләр Ер-әсә, тәбиғәт менән үҙ-ара бәйләнеште, яҡшы, һаҡсыл мөнәсәбәтте юғалтҡан өсөндөр? Бәлки, ата-бабаларыбыҙҙың изге һөйәктәре ятҡан еребеҙгә төкөрөп ҡарағаныбыҙ, нәфсебеҙҙе тыя алмайынса, уны һатҡаныбыҙ өсөндөр?

Кешеләргә мөрәжәғәт итеп, Көмөшбикә өләсәйем мәрхүмәнең (йәне йәннәттә булһын) әйткән һүҙҙәрен иҫкә төшөрәм: "Балаҡайҙарым, беҙ был ергә ҡунаҡҡа ғына килгәнбеҙ. Хоҙай беҙҙе был ергә һынамаҡҡа ғына ебәргән. Кире үҙ янына алғас, Ул беҙҙән һорау аласаҡ. Хоҙайҙы юҡҡа ғына Хаҡ Тәғәлә тимәгәндәр, шуға күрә Уның алдында яуап тотҡанда һәр бер ғәмәлең өсөн генә түгел, әйткән һүҙең хатта уйың өсөн дә яуап бирергә тура киләсәк..."

**ЫСЫНЛАП ТА...**

**Рәсәй киңлектәрендә быйыл меңәр-меңәр гектар майҙанда урмандар янды. Әгәр ҙә беҙ был янғындарҙы Хаҡ Тәғәләнең ғәмәле тип ҡарайбыҙ икән, ни өсөн фәҡәт ошо матурлыҡты көлгә ҡалдыра һуң Ул? Үҙе бар иткәнде ниңә юҡ итә һуң Хаҡ Тәғәлә? Бында яуап та тик бер төрлө генә һәм аяуһыҙ яңғырай: нәҡ быйыл Рәсәйҙә "Ер кодексы"н тормошҡа ашырыу юҫығында илебеҙҙә әлегә һатылмай ҡалған берҙән-бер байлыҡ булған ерҙәрҙе, урман-тауҙарҙы, йылға-күлдәрҙе олигархтарға һата башланылар бит. Хоҙайҙың өлөшөнә инә башланылар...**

**Әнүзә ЙОМАҒОЛОВА.**

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ МИЛЛӘТТӘШЕБЕҘ!

**2011 йылдың беренсе ярты йыллығына гәзитебеҙгә яҙылыу башланды.**

**Индекстарыбыҙ:**
**50665 (хаҡы - 330 һум 24 тин),**
**50673 (хаҡы - 360 һум 24 тин).**

**Яҙылыу тураһындағы квитанцияларығыҙҙы бүләктәр отошонда ҡатнашыу өсөн редакцияға ебәрегеҙ. Йылдағыса, матур бүләктәр һәм 2011 йылға "Дини календарь" отторасаҡбыҙ.**

### "Киске Өфө" - бүләгем" акцияһы

Әйҙәгеҙ, ауылдарҙа йәшәүсе ата-әсәйҙәребеҙгә, туғандарыбыҙға, яҡындарыбыҙға, дуҫтарыбыҙға, туған мәктәбебеҙгә, мәсеттәргә "Киске Өфө" гәзитен бүләк итәйек. Алты ай буйы гәзит уҡып кинәнер һәм баҫманың һәр һанын алған һайын һеҙҙе хәтеренә төшөрөр яҡындарығыҙ һәм рәхмәт уҡыр.

### Тағы бер тәҡдим бар...

Кем тыуған көнө уңайы менән "Киске Өфө" гәзите биттәрендә ҡотланырға теләй? Шулар гәзиткә яҙылып, квитанцияһын редакцияға ебәрә, тыуған көнө датаһын хәбәр итә һәм ваҡыты еткәс, гәзит биттәрендә беҙҙең ҡотлауҙы уҡып, бәләкәй генә булһа ла шатлыҡ кисерә.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**



Өфө ҡалаһының башҡорт теле уҡытыусылары.

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓ Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов Рәсәй Федерацияһы Дәүләт Советының һәм Рәсәй Федерацияһы Президенты ҡарамағындағы Рәсәй иҡтисадын модернизациялау һәм технологик үҫтереү буйынса комиссияның берлектәге ултырышында ҡатнашты. Рәсәй Президенты Дмитрий Медведев рәйеслегендәге ултырышта илдә һөнәри белем биреүҙе үҫтереү мәсьәләләре ҡаралды.

✓ Мәскәүгә эш сәфәре сиктәрендә Рөстәм Хәмитов "Рәсәй нанотехнологиялары корпорацияһы" дәүләт корпорацияһының генераль директоры Анатолий Чубайс менән осрашты. Республика Президенты "Роснано" етәксеһенә әле Башҡортостанда Нанотехнологиялар үҙәген һәм ҙур күләмле наноструктур металл материалдар эшләү һәм ғәмәлгә индереү буйынса ғилми-технологик үҙәк ойоштороу проекттарын тормошҡа ашырыуға әҙерлек барыуы хаҡында хәбәр итте. Ултырышта шулай уҡ "Өфө моторҙар эшләү берекмәһе" асыҡ акционерҙар йәмғиәте менән "Роснано"ның берлектәге эше тикшерелде.

✓ Рәсәйҙең Тау саңғыһы спорты һәм сноуборд федерацияһы президенты Светлана Гладышева менән осрашыуҙа Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов сноуборд буйынса донъя кубогы этабын үткәреү хаҡында һөйләште һәм 2011-2012 йылдарҙағы миҙгелдә республикала параллель слаломда сноуборд буйынса донъя кубогы этаптарының береһен үткәрергә тәҡдим итте. Осрашыуҙа шулай уҡ республикалағы тау саңғыһы үҙәктәренә ярҙам итеү һәм уларҙы үҫтереү мәсьәләләре лә тикшерелде.

✓ Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәтендә вице-премьер Фидус Ямалетдинов рәйеслегендә һаулыҡ һаҡлау буйынса республика Советының 2010 йылдағы күсмә ултырышында капиталь төҙөлөш объекттарының әҙерлек мәсьәләләре буйынса кәңәшмә үткәрелде. Сираттағы медицина форумы быйыл Өфөлә үтәсәк, уға әҙерлек барышында баш ҡалала ҡайһы бер һаулыҡ һаҡлау объекттарын төҙөү, капиталь ремонтлау, уларҙы медицина ҡорамалдары менән йыһазландырыу, шулай уҡ юлдарҙы рәтләү һәм территорияларҙы төҙөкләндереү ҡаралған.

✓ *Ирәмәл тауында Тығын һәм Төлөк тип аталған һаҙлыҡтар бар. Ағиҙел йылғаһы үҙенең сығанағын тап ошо ике һаҙлыҡтан ала һәм улар ҡорой ҡалһа, ҙур йылғанан бәләкәй шишмә генә тороп ҡалыуы ихтимал.*



*ХУЖАҺЫ НИНДӘЙ...*

# КИЛӘҺЕ БЫУЫНДАРҒА...

## ни рәүешле тапшырырбыҙ Ирәмәлебеҙҙе?

**Кешеләрҙең экологик тәрбиәһеҙлеге һәм был юҫыҡтағы белеме бик һай булыуы арҡаһында тәбиғәт ҡомартҡыларыбыҙ ҙур зыян кисерә. Ә бит бары тик тәләфләнмәгән, боҙолмаған, ҡыйралмаған тәбиғәт менән аралашыу ғына беҙгә төрлө көсөргәнештән арыныу көсө бирә, ижадҡа рухландыра.**

Ирәмәл тауы тәбиғәт ҡомартҡылары араһында айырым урын биләй. Бәләкәй һәм Ҙур Ирәмәл тауҙарынан йәйен-ҡышын, көҙөн-яҙын кеше өҙөлмәй. Көньяҡ Уралдағы иң бейек тауҙар араһында икенсе урынды алып торған Ирәмәл ҡатмарлы рельефы, күп төрлө үсемлек һәм хайуандар донъяһы бик күптәрҙе үҙенә тарта. Бейек тауға менеү буйынса әҙерлеге булмаған кешеләрҙең дә, экологик этика хаҡында бер нәмә белмәгәндәрҙең дә Ирәмәлгә бер ауырлыҡһыҙ күтәрелеү мөмкинлеге ауыр эҙемтәләргә килтерә. "Ерҙең 200 хазинаһы" исемлегендә 86 урынды биләгән Көньяҡ Урал урмандары, Көньяҡ Американың тропик урмандары, Африка һәм Алтайҙың ҡурсаулыҡтары менән бер рәттән, кешелекте экологик һәләкәттән ҡотҡара алыусы сығанаҡ һанала. Ирәмәлдә Рәсәйҙең Ҡыҙыл китабына индерелгән 57 үсемлек үҫә, уларҙың 13-ө - бигерәк тә һирәк осрай торғандар. Улар араһында Ирәмәл радиолаһы, Урал лаготисы, ысыҡ үләне бар. Мәҫәлән, Ирәмәл радиолаһы (алтын тамыр) тауҙа бары тик бер нисә йөҙ төп кенә ҡалған, ғалимдар уның һәр бөртөгөн һанап һаҡларға тырыша. Ирәмәл тауында Тығын һәм Төлөк тип аталған тәбиғи структураһы боҙолмаған, донъяла ла бик һирәк осрай торған һаҙлыҡтар бар. Уларға йөҙәр мең йыл. Ағиҙел йылғаһы үҙенең сығанағын тап ошо ике һаҙлыҡтан ала һәм улар ҡорой ҡалһа, ҙур йылғанан бәләкәй шишмә генә тороп ҡалыуы ихтимал.

Ял көндәрендә Ирәмәлдең түбәһендә 200-ләп кеше йыйылған саҡтар була. Кемдер Ирәмәлгә аныҡ маҡсат менән, үҙ-үҙен камиллаштырыу, рухын нығытыу өсөн бара. Бында булып ҡайтҡандарҙың күбеһе үҙҙәрен икенсе төрлө кеше итеп тойоуы, фекер йөрөтөү, донъяға ҡараш үҙгәреүе, рухи күтәрелеш кисереүе хаҡында белдерә. Тау үренә менеп еткән кеше үҙендә ниндәйҙер яҡтырыу кисереүен йәшермәй. Ирәмәлгә йыл да йөрөгән танышым: "Ирәмәлгә бер килгән кеше тауҙың һынғай энергияһын тойоп, был изге урынға йыл да килергә тырыша. Тау башында алған позитив энергия, көс, дәрт теүәл бер йылға етә, һәм ошо ваҡыт үтә башлау менән үҙеңдән-үҙең бында атлығып тораһың", - ти. Был, ысынлап та, шулай. Изге маҡсат менән килгәндәр, әлбиттә, был урынға бар яуаплылыҡ, ихтирам һәм иғтибар менән ҡарай. Ә икенселәр иһә тауҙы бары тик ял итеү урыны булараҡ ҡына күрә. Бындайҙарҙың ҡарашы ла тап киреһенсә. Нәҡ уларҙың "тырышлығы" арҡаһында Ирәмәл тауы һуңғы йылдарҙа сүп-сар контейнерын хәтерләтә. Тауға күтәрелеү маршрутында быяла ярсыҡтары, консерва һәм полиэтилен һауыттар, тәмәке ҡаптары тулып ята. Ирәмәлдең башында ҡуйылған тәре, ҡыҙыл һәм йәшел мосолман байраҡтары, таштарға яҙылған яҙыуҙар, эшләнгән төрлө һүрәттәр күңелдә ҡыра. Ә ҡайһы берәүҙәр тауҙың иң бейек түбәһенә менеп еткәс, был "енеүҙе" спиртлы эсемлек менән "нығытып" ҡуйыуҙы үҙенең бурысы тип ҡарай һәм буш шешә, ашамлыҡ ҡалдыҡтарын аяҡ аҫтына ташлап китеүҙе бер ниндәй хилафлыҡҡа һанамай.

Күптән түгел Магнитогорск ҡалаһы "Леший" клубының "текә" егеттәре үҙҙәренең сайтында Ирәмәл тауына джиптарҙа ярыш ойошторорға уйлауы хаҡында мәғлүмәт еткерҙе, ләкин йәмәғәтселектең ризаһыҙлығы уларҙы был эштән кисектереп торорға мәжбүр итеүен итте. Ләкин был уйҙарынан бөтөнләй баш тартыуҙары икеле, улар бары тик стратегияларын үҙгәртеп, күп халыҡҡа белдермәй генә тау үренә күтәрелергә тырышасаҡ. Ғалимдар белдереүенсә, өҫтәренән тәгәрмәс тапап үткән ҡайһы бер үсемлектәр бер ҡасан да терелә алмай. Бында эш был егеттәрҙә генә лә тормай, сөнки күпме кеше төрлө транспортта йәмәғәтселеккә белдермәй тау түбәһенә күтәрелеп, тәбиғәткә ҙур зыян килтерә. Беҙ күтәрелгән саҡта ғына урманда тиҫтәләгән машина һананыҡ. Эш, әлеге лә баяғы, хужаһыҙлыҡта, битарафлыҡта. Ә хужа булған ерҙә... Беҙ, мәҫәлән, тау тирәләй һәм Ирәмәлгә күтәрелгән урында әле һанаған тәртипһеҙлектәр менән осрашып, әсендек. Тау итәге буйы һибелгән махсуслаштырылмаған туҡталҡалар тауҙың флора һәм фауна системаһына ҡыйралыш килтереүе көн кеүек асыҡ.

Бөгөнгө көндә Тирлән урман хужалығына ҡараған Ирәмәл тауы 1965 йылдан тәбиғәт һәйкәле статусына эйә. "Хәстәрле хужаһы булмаған ер - етем" тигән мәҡәл нәҡ Ирәмәл хаҡында әйтелгән кеүек, сөнки бөгөнгө көндә Ирәмәлдең тәгәйен һаҡсыһы ла, идара итеүсеһе лә юҡ. Ирәмәлде тәбиғәт паркы итеп үҙгәртеү тураһындағы генераль план 2004 йылдан БР Фәндәр академияһының геоботаника лабораторияһында ята. План алты йыл дауамында ҡуҙғалмай ятҡан осорҙа тауҙы күпме бысратырға һәм ҡыйларға өлгөрҙөләр. Башҡортостан Хөкүмәте тарафынан уны тәбиғәт паркы итеп үҙгәртеү эштәре ошо йылдың аҙағына тамамланырға тейеш. Был, үҙ сиратында, халыҡ ағымын бөтөнләй туҡтатмаһа ла, уларҙы күпкә әҙәйтәсәк һәм Ирәмәлдең уникаль тәбиғәтен һаҡлауҙа ҙур көс буласаҡ.

Башҡортта изгене - изге, олоно - оло, кесене кесе итә белеү элек-электән килгән матур йола. Йола ғына ла түгел, яҙылмаған ҡанун. Беҙҙең бурыс - бары тик үҙ ҡаҙаныбыҙҙа ҡайнамай, башҡаларҙы ла үҙебеҙ өсөн изге булған йола-ҡағиҙәләрҙе ихтирам итергә өйрәтеү. Изге урын һаналған Ирәмәлебеҙ өсөн үҙебеҙҙең йөрәк әрнемәһә, уны һаҡлауҙы төп бурысыбыҙ итеп күрмәһәк, башҡаларҙан быны көтәһе түгел. Ә киләһе быуын алдында ситтәр түгел, бары тик беҙ генә яуап тотасағыбыҙ көн кеүек асыҡ.

**Гөлназ САФУАНОВА әҙерләне.**





## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Быйыл Башҡортостанда 230 км автомобиль юлын төҙәкләндереү ҡуҙаллаған. Әлегә ошо арауыҡтың 188 саҡрымында эштәр башҡарылған. Юл төҙәкләндереүгә бүленгән 1,234 миллиард һум аҡсаның 920370,6 мең һумы үҙләштерелгән.

✓Рәсәйҙә балалар, үҫмерҙәр һәм уларҙың ата-әсәләре өсөн берҙәм ышаныс телефоны эшләй башланы. 8-800-2000-122 телефоны буйынса шылтыратыу илдең һәр кешеһе өсөн бушлай һәм аноним буласаҡ. Тәүҙә берҙәм ышаныс телефонына 20 төбәк тоташасаҡ, йыл аҙағына был хеҙмәт менән Рәсәйҙең һәр төбәгендә ҡуллана аласаҡтар.

✓Республикала "әсәлек капиталы"на дәүләт сертификаты алыусылар һаны 85 мendән ашыу. Пенсия фондынан хәбәр итеүҙәренсә, 1 сентябргә "әсәлек капиталы"ның суммаһы 343 мең 378 һум 80 тин тәшкил итә. Әле бер тапҡыр бирелә торған түләүҙе алыу өсөн республика ҡала һәм районДарынан 5110 кеше ғариза яҙған. Рәсәй Пенсия фондының БР буйынса идаралығы етәксеһе Фоат Хантимеров әйтеүенсә, 8150 ғаилә капиталды торлаҡ алыуға йә төҙөүгә алынған кредитты ҡаплауға тотонған. Ошо маҡсатҡа 2 миллиард 218 миллион һум аҡса бүленгән.

✓З. Биишева исемендәге "Китап" нәшриәте электрон китаптар нәшер итә башланы. Интернет селтәрендәге тәүге китап - "Тыл геройҙары", уны бушлай күсереп алырға ла мөмкин. Нәшриәттең www.kitap-ufa.ru сайтында яңы китаптар, авторҙар тураһында мәғлүмәт, фотогалерея һәм баҫмаларҙың хаҡтары менән танышырға мөмкин.

✓Рәсәйҙең инновация инфраструктураһы үҫеше өсөн ҡаҙнанан субсидиялар алыуға конкурста еңгән 56 юғары уҡыу йорто исемлегендә Өфө дәүләт нефть-техник университеты ла бар. Еңеүселәрҙе вуздың фәнни, белем биреү һәм инновация потенциалын анализлау һөҙөмтәләре һәм улар нигеҙендә тәҡдим ителгән үҫеш программалары буйынса конкурс комиссияһы билдәләгән.

✓Рәсәйҙең Башҡортостан буйынса һалым хеҙмәте федераль идаралығы һәм хоҡуҡ һаҡлау органдары йылдың тәүге яртыһында 13 легаль булмаған уйын клубының эшмәкәрлеген туҡтатҡан. Тикшереү барышында 40 протокол һәм акт төҙөлгән, һалынған штраф күләме 623 мең һум тәшкил иткән.

✓ 4-5 сентябрҙә Орджоникидзе исемендәге мәҙәниәт йорто һәм Йәштәр һарайы (элекке "Юбилей" мәҙәниәт йорто) алдындағы майҙандарҙа үтәсәк бал йәрминкәләрендә балдың төрлө сорттарын һатып алып буласаҡ.



## ЕТЕ РАЙОН

**Совет.** Йылытыу миҙгеленә әҙерлек һәм уны үткәреү буйынса штабтың сираттағы кәңәшмәһендә ҡышҡа әҙерлек мәсьәләләре тикшерелде. Ҡышҡа әҙерлек - ул, тәү сиратта, кешеләр тураһында хәстәрлек. Тимәк, тротуарҙар һәм юлдарға ҡом һибелгән булырға, улар ваҡытында таҙартылырға, ҡыйыҡтарҙан боҙбармаҡтар төшөү хәүефе, ә трамвай юлдарын аша сығыу урындарында ҡар өйөмдәренән "тығын"дар булмаҫҡа тейеш.

**Орджоникидзе.** Йылдың тәүге яртыһында Халыҡты эш менән тәьмин итеү үҙәге ярҙамында районда 2208 кеше эш урыны тапҡан, 36-һы йәмәғәт эштәрендә ҡатнашҡан. 8 кеше үҙ кәсебен асҡан, улар 12 кешегә эш урыны булдырған.

**Дим.** Быйылғы йәй күптәргә әҫе булып хәтерҙәрендә ҡалһа, "Данко" үҫмерҙәр клубтары берләшмәһендәге балалар өсөн ул күңелле, сағыу булыуы һәм походтары менән иҫтәрендә һаҡланасаҡ. Ирәмәл тауына, Ғафури районындағы Боҙло мәмерйәгә поход - йәш туристарҙың яратҡан маршруты. Туҡталҡала балалар таҙалаҡ һәм тәртип һаҡлай, үҙҙәре артынан ғына түгел, кемдер ҡалдырып киткән сүп-сарҙы ла таҙарта. Экологик өмәләр - һәр походтың төп шарты.

**Калинин.** Августың һуңғы көндәрендә Бөйөк Ватан һуғышы ветерандарының 20 тол ҡатынына "торлаҡ сертификаттары" тапшырылды. Бөгөн районда 88 ветеран торлаҡ шарттарын яҡшыртырға мохтаждар исемлегендә тора, шуларҙың 66-һы таныtма алған, ә 16-һы улар буйынса торлаҡлы булған да инде.

**Киров.** Нефтекама ҡалаһында үткән республика йәйге спорт фестивалендә районды҅ң "Йәшлек" командаһы, бөтөн республика буйынса йыйылған 31 команда араһында программала ҡаралған 7 төр буйынса көс һынашып, икенсе урын яулаған.

**Октябрь.** Беренсе сентябрҙә районды҅ң 24 белем биреү усағында 20 меңдән ашыу уҡыусы парта артына ултырҙы. Тәү тапҡыр мәктәп ишеген 2000-дән ашыу бала асты. Ә 1281 11-се синыф уҡыусыһы өсөн уҡыу йылы оло тормош юлына баҫыу мәле буласаҡ.

**Ленин.** Район хакимиәтендә барлыҡ учреждениеларҙың етәкселәре ҡатнашлығында кәңәшмә үтте. Сара тауар алыу, хеҙмәт башҡарыу, хеҙмәт күрһәтеүгә заказдар биреүселәргә аңлатыу эштәре алып барыу маҡсатынан ойоштороолдо. Сөнки, 2011 йылдың 1 ғинуарынан заказдарҙы урынлаштырыу электрон формала асыҡ аукцион үткәреү юлы менән тормошҡа ашырыласаҡ. Аукциондар уҙғарылғанда мәғлүмәт һәм документтарҙы электрон канал аша ебәргәндә, уларҙы раҫлау өсөн мотлаҡ электрон цифрлы ҡултамға ҡулланылырға тейеш. Электрон ҡултамға өсөн сертификатты Федераль ҡаҙна бирә.

## ТӨРЛӨҺӨНӘН

### ВЕТЕРАНДАР ҺАУЛЫҒЫН НЫҒЫТА

**Башҡортостанда йылдың тәүге яртыһында 700-ҙән ашыу Бөйөк Ватан һуғышы ветераны һәм инвалиды санаторий һәм курорттарҙа ял иткән.**

Льготаға хоҡуҡлы граждандар категорияһын санаторий-курорт дауалау менән, шулай уҡ дауалау урынына бушлай барып ҡайтыуҙы тәьмин итеү бурысы 2005 йылдың 1 ғинуарынан РФ Социаль страховкалау фондына йөкмәтелгәйне. 2009 йылға тиклем социаль хеҙмәттәр тупланмаһы менән ҡулланыусы 73,3 мең кеше дауаланған да инде, путевкаларҙы түләү өсөн 975 млн һум аҡса тотонолған.

Төбәктең социаль страховкалау фонды хәбәр итеүенсә, Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыусылар, инвалидтар һәм уларға тиңләштерелгән кешеләр менән бер рәттән, санаторий-курорт дауаһына инвалид балалар ҙа мохтаж. Йыл башынан 520 бала республикала һәм сит өлкәләр дауаханаларында ял иткән. Быйыл льготалы граждандар категорияһын путевкалар менән тәьмин итеү өсөн 93,7 млн һум аҡса бүленгән, йыл аҙағына тиклем яҡынса 5100 путевка һатып алынасаҡ.

### ИҢ ЯҠШЫЛАР БИЛДӘЛӘНДЕ

**БР Президенты эргәһендәге Башҡорт дәүләт хеҙмәте һәм идара итеү академияһы ғилми эшмәкәрлекте әүҙем үҫтереүсе вуз тип табылды.**

"2009 йылдың иң яҡшы фәнни китабы Бөтә Рәсәй конкурсы" һөҙөмтәләре буйынса, дәүләт һәм муниципаль идара итеү кафедраһы доценты, педагогия фәндәре кандидаты Ғәлиә Мөхәмәтйәнова - еңеүсе, ә һөнәри коммуникация, документтар һәм архив эштәрен алып барыу кафедраһы етәксеһе, профессор Сергей Кабашов менән иҡтисади теория һәм иҡтисади сәйәсәт кафедраһы доценты Динара Пескова лауреат тип табылды.

Конкурсҡа психология, педагогика, уҡытыу методикаһы, гуманитар һәм ижтимағи фәндәр, юриспруденция, иҡтисад, менеджмент, маркетинг өлкәләрендә эшләүсе йәш ғалимдарҙың эштәре тәҡдим ителгәйне. Иң яҡшы ғилми эштәр Сочиҙа үтәсәк Бөтә Рәсәй вуз фәне аҙналағында презентацияланасаҡ.

### ИҪӘП АЛЫУҒА - ЯҢЫ ТАЛИСМАН МЕНӘН

**Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыуҙың үҙ талисманы барлыҡҡа килде.**



Бер ай дауамында илдең һәүәҫкәр рәссамдары һәм дизайнерҙары үҙ эшен тәҡдим итә. Конкурсҡа төрлө төбәктәрҙән 500 һүрәт килә, әммә уларҙың 126-һы ғына бәйгелә ҡатнашыу хоҡуғын ала. Шул иҫәптән Башҡортостандан да өс кеше бар ине.

Конкурста ҡатнашыусыларҙың фекеренсә, иҫәп алыуҙы сағылдырыусы иң уңышлы образдар булып ҡырмыҫҡалар, айыуҙар, бал ҡорттары һәм бесәйҙәр тора. Иң йыш әле генә йомортҡанан сыҡҡан себештәр һәм көҙән себештәрен барлаған тауыҡтар осрай.

Еңеүгә дәғүә итеүселәр күп булһа ла, "Комсомольская правда" гәзите ойоштарған Интернет тауыш биреү юлы менән асыҡланған еңеүсе берәү генә. Ул - Ярославлдән Ольга Беляева. Уның ҡул болғап торған көләкәс малайы мөһим сараның талисманы буласаҡ та инде.

Тиҙҙән талисманлы мәғлүмәт листовкалары Мәскәүҙә, Санкт-Петербургта, Түбәнге Тагилда, Өфөлә, Ҡаҙанда, Һамарҙа, Волгоградта һәм Дондағы Ростовта үтәсәк махсус акцияларҙа таратыласаҡ.

## ХОККЕЙ

# ПРЕЗИДЕНТ КУБОГЫН КЕМ ЯУЛАР?

**Башҡортостан Республикаһы Президенты кубогына хоккей турниры йылына бер тапҡыр континент хоккей лигаһы чемпионаты башланыр алдынан үткәрелә. Быйыл унда "Салауат Юлаев"тан башҡа өс команда ҡатнаша: Силәбе ҡалаһынан "Трактор", Ханты-Мансиҙан "Югра" һәм Карловы Вары ҡалаһынан (Чехия) "Энергия" командалары.**

Быйылғы ярыштарҙың ҙур бер үҙенсәлеге бар: ул халыҡ-ара турнир статусына эйә булды. Был Чехияның "Энергия" командаһы ҡатнашыуы менән аңлатыла.

Халыҡ-ара турнир Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитовтың ҡотлау хаты менән асылды. Унда "Салауат Юлаев" хоккей клубы - халыҡ командаһы, төбәгебеҙҙең спорт символы" тип әйтелә.

"Салауат Юлаев" беренсе көндө Ханты-Мансиҙың "Югра" командаһы менән көс һынашты. Юлаевсылар осрашыуҙы бик уңышлы башланы. Команданың яңы хоккейсыһы Якуб Клапиш тәүге минуттарҙа уҡ ҡунаҡтар ҡапҡаһына беренсе шайбаны сәпәне.

Икенсе осор башланыу менән Ярослав Блатяк "Югра" һаҡсыларын йырып үтеп, ҡунаҡтар ҡапҡаһы артында йәнә ҡыҙыл ут тоҡандырҙы. Иҫәп 2:0 булғас, майҙан хужалары ярайһы уҡ тынысланды. Ҡунаҡтар бынан бик оҫта файҙаланды, бер-бер артлы ике шайба индереп иҫәпте тигеҙләне. Өсөнсө осорҙа Кирилл Кольцов юлаевсыларҙы йәнә алға сығарҙы. "Салауат Юлаев" һуңғы сиктә ҡунаҡтарҙы 4:3 иҫәбе менән отто.

Силәбенең "Трактор"ы Ханты-Мансиҙың "Югра" командаһы менән уйнаны. Осрашыу тракторсыларҙың тулы оҫталығы менән үтте. Улар 3:0 иҫәбе менән еңде. Башҡортостан Республикаһы Президенты кубогын кем яулар? Кубок Өфөлә ҡалырмы, әллә ситкә китерме? Быны артабанғы уйындар асыҡлар.

**Юныс ӘХМӘҘИЕВ.**



## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Өфө ҡала округы хакимиәтенең ҡулланыусылар баҙары идаралығы мәғлүмәттәре буйынса, һуңғы осорҙа хаҡтар аҙыҡ-түлеккә - 5, йәмәғәт ту҅ҡланыуына 8,7 процентҡа артҡан. Кәбеҫтә йыл эсендә 2,5 тапҡырға, кишер - 2,2 тапҡырға, һуған - 10, картуф 70 процентҡа ҡиммәтләнгән.

✓Өфөлә хирург-гепатологтарҙың XVII халыҡ-ара конгресы үтәсәк. Еңеүҙең 65 йыллығына арналған сараға Рәсәй, Әзербайжан, Әрмәнстан, Ҡаҙағстан, Латвия һәм башҡа БДБ илдәренән 500-гә яҡын белгестең килеүе көтөлә. Медицина форумында ҡатнашыусылар бауыр, үт юлдары, ашҡаҙан аҫты биҙе сирҙәрен дауалау йүнәлештәре тураһында фекер алышасаҡ.

✓4-5 сентябрҙә Орджоникидзе исемендәге мәҙәниәт йорто һәм Йәштәр һарайы (элекке "Юбилей" мәҙәниәт йорто) алдындағы майҙандарҙа үтәсәк бал йәрминкәләрендә балдың төрлө сорттарын һатып алып буласаҡ. Йәрминкәлә Умартасылыҡ һәм апитерапия буйынса ғилми-тикшеренеү үҙәге бал һәм уның файҙалы үҙенсәлектәре буйынса консультациялар ҙа ойоштора. 25 сентябрҙән баш ҡаланың 18 майҙанында шәмбе һәм йәкшәмбе көндәрендә ауыл хужалығы тауарҙары йәрминкәләре лә эшен башлай. Республика етештереүселәре тауарҙарынан ойошторолған йәрминкәләр 31 октябргә тиклем дауам итәсәк.

✓"Берҙәм теркәү үҙәге" сервисында шылтыратыуҙарҙы ҡабул итеү үҙәген реструктуризациялау сиктәрендә быға тиклем эшләп килгән 246-46-46 номеры сентябрҙән мөрәжәғәттәрҙе ҡабул итмәйәсәк. Хәҙер табипҡа яҙылыу өсөн ҡыҫҡа 13-03 һәм 276-13-03 номерына шылтыратырға кәрәк.

✓Сентябрь аҙағында Өфөлә аквапарк төҙөү перспективаһы ҡараласаҡ. Комплекс проекты инглиз бюроһы тарафынан төҙөлгән, уның хаҡы 120 миллион доллар тәшкил итәсәк. Ҡоролманы "Ҡашҡаҙан" паркында төҙөргә йыйыналар. Беренсе ҡала аквапаркы элекке Сипайлово баҙары урынынында урынлашыуы ла ихтимал, тиҙҙән был майҙан һатыуға сығарыласаҡ.

ӘЙТ, АУЫЛЫМ...

# РӘСӘЙҘӘ ҠАЙҘА ЙӘШӘҮЕ ЕҢЕЛЕРӘК...

## ауылдамы, ҡалаламы?

**Ҡасандыр ауылдарҙың да гөрләп торған сағы бар ине. Бөгөн улар элекке ҡеүәтен юғалтты. Ата-әсәләр ҙә балаларын ауыл хужалығы белгеслегенә түгел, ә абруйлы тип һаналған уҡыу йорттарына индерергә тырыша. Бөгөн ауыл йәштәре ҙур һайлау алдында: ауылда ҡалырғамы, әллә инде яҙмышты мегаполис менән бәйләргәме?**



Социаль һорау алыуҙар күрһәтеүенсә, йәштәрҙең күпселеге, йәғни 48,8 проценты тормошон ауыл менән бәйләргә йыйынмай. Шул уҡ ваҡытта уларҙың 35,9 проценты, һөнәр һайлағас, үҙ еренә ҡайтыу тураһында хыяллана. Был мәсьәләнең тағы бер яғы бар: егеттәрҙең күпселеге ауылға тартылһа, ҡыҙҙарҙың 61,2 процентын ҡала үҙенә әйҙәй. Шунан килеп сыға ла инде демография өлкәһендә - ауылдарҙа өйләнмәгән егеттәрҙең күбәйеп, ҡалала кейәүгә сыҡмаған ҡыҙҙар проблемаһы. Ә бит ҡалала уларҙы ҡолас йәйеп ҡаршы алып тормайҙар. Тәү сиратта торлаҡ менән эш табыу мәсьәләһен хәл итергә кәрәк. Уларын хәл итеүгә инде пенсияға сығырға ла оҙаҡ ҡалмай...

Йәштәрҙең ҡалаға ынтылыуының иң киҫкен мәле булып 20-21 йәш тирәһе тора, сөнки тап шул ваҡытта улар төрлө уҡыу йорттарын тамамлап, һөнәри эшмәкәрлеген башларға тейеш. Әммә бында шуны ла иҫәпкә алырға кәрәк: эш биреүсе тәжрибәһе булмаған йәштәрҙе көтөп торамы? Мәҫәлән, бер танышым Башҡорт дәүләт университетының физика-математика факультетын ҡыҙыл дипломға тамамланы. Һайлаған һөнәре лә бөгөн ҙур һорау менән файҙаланылә кеүек - элемтә буйынса белгес ул. Шуға эш табыуы ла ауыр түгел кеүек, әммә эш хаҡы ғына ҡәнәғәтләндермәй - түңәрәкләп алғанда - биш мендән ашыу. Шул эш хаҡына бер ай йәшәргә, ятаҡҡа йәки фатирға түләргә, ашарға-кейенергә кәрәк. Икенсе яҡтан, шаулы ҡала тормошон, барлыҡ шарттарҙы, киләсәккә көткән перспективаны ташлап ҡайтҡы ла килмәй. Бөгөн юғары белеме тураһында дипломы булған әллә күпме йәш белгес эшһеҙ йөрөй йәки икенсе һөнәргә уҡый.

Ә ауылда ҡалған йәштәр? Уларҙы нимә бәйләп тора һуң? Тикшереүҙәр һөҙөмтәләре күрһәтеүенсә, ауылға, ергә бәйлелек һәм үҙеңдең бәләкәй тыуған иленә ватансылыҡ тойғоһо. Икенсе урында - ҡалаға күсеү өсөн матди мөмкинлек булмауы. Тимәк, йәштәр ауылда ҡалһын, ауылдарға киләсәктә "перспективаһыҙ ауыл", тигән мөһөр һуғылыу хәүефе янамаһын өсөн уның социаль-иҡтисади инфраструктураһын үҫтереү һәм ауылда йәшәү шарттарының сифатын күтәреү мәсьәләләрен хәл итергә, йәштәрҙә ауыл тормошоноң өҫтөнлөктәрен, ыңғай яҡтарын, ватансылыҡ тойғоһон формалаштырыу буйынса максатлы эш алып барырға кәрәк.

Ысынлап уйлап ҡараһаң, бөгөн ауыл айырым бер резервация кеүек. Халыҡты эшләмәй, тип тә әйтеп булмай. Ауыл һайын яңы йорттар ҡалҡа, мал-тыуар ишәйә, баҡса үҫтерелә, тик түккән көсөңдөң һөҙөмтәһен күрмәү генә бер аҙ кәйефте ҡыра. Бында рсепублика Хөкүмәтенә лә һәр төбәктә ауыл хужалығы продукцияһын эшкәртеү цехтары асыу тураһында уйланырға кәрәктер.

Ауылда яңы йорттар ҡалҡа, тиһәң дә, уны барыһы ла үҙ көсө менән йүнләй. Һорау алыуҙа ҡатнашыусы йәштәрҙең 80 проценты ауыл йәштәренә ярҙам итеү буйынса федераль һәм төбәк программалары эшләүе тураһында хәбәрҙар түгел. Уларҙың мәғлүмәт сығанаҡтарынан телевидение һәм Интернетҡа өҫтөнлөк биреүен иҫәпкә алып, ошо сығанаҡтар аша аңлатыу эштәрен киңерәк алып барырға кәрәк. Район хакимиәтенең йәштәр менән эшләү бүлеге лә мәғлүмәт йәйәтенән эшмәкәрлеген әүҙемләштерһен ине.

Рәсәйҙең туғыҙ төбәгендә, шул иҫәптән Башҡортостанда үткәрелгән социологик һорау алыуҙар күрһәтеүенсә, бөгөн ауыл йәштәре алты көнүҙәк мәсьәләне билдәләй. Уларҙың күпселеген эш урындары менән тәьмин итеү мәсьәләләре борсой. Икенсе урында - ял йәки буш ваҡытты үткәреү проблемаһы. Был мәсьәлә ирҙәргә ҡарағанда бигерәк тә ҡатынҡыҙҙы борсой. Өсөнсө урында белем биреү һәм тәрбиә мәсьәләләре тора. Дүртенсе урынды яман ғәҙәттәрҙең - наркоманлыҡ, алкоголизм, тәмәке тартыу һ. б. - таралыуы һәм йәштәрҙең уларҙың таралыуына юл ҡуймау өсөн көрәшеүе тора. Бишенсе урынды торлаҡ мәсьәләһе биләй. Был мәсьәлә мәктәп уҡыусыларын борсомай, ә йәш артҡан һайын уйландыра башлай. Алтынсы урында инде спорт менән шөғөлләнеү өсөн шарттар тыуҙырыу мәсьәләһе атала. Бында күпселекте ир-ат тәшкил итә.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Башҡортостанда ауылға эшкә ҡайтыусыларға матди ярҙам күрһәтеү буйынса эш башлап, был проблема бер аҙ хәл ителә башлағайны. Киләсәктә лә ул һүнеп ҡалмаҫ, тип ышанғы килә. Сөнки ауылда йәштәрҙең күпләп төпләнеүе - ул ҡаланың ғына түгел, тотош Рәсәйҙең киләсәге. Тап ауылда демография көрсөгө юҡ, тап ауылда балалар күберәк тыуа. Тимәк, ауылға ауыл хужалығы белгестәрен генә түгел, совет заманындағы кеүек, йүнәлтмә буйынса төрлө белгестәрҙе ҡайтарыу, унда тормошто ҡабаттан гөрләтеү зарур. Ошо тура ауыл йәштәре үҙҙәре ни уйлай икән - хаттар көтәбеҙ.**

Шәрифә САЛАУАТОВА.

ҺОРАУ-ЯУАП

### РИЗАЛЫҒЫ КӘРӘК

**Ирем менән бергә йәшәгән саҡта алынған күсемһеҙ милекте уның ризалығынан тыш һатып буламы?**

- РФ Граждандыҡ кодексының 256-сы статьяһы 1-се пунктына ярашлы никах ваҡытында алынған милек, әгәр ир менән ҡатын араһында килешеү була ҡалып, мәсьәлә башҡаса төрлө ҡуйылмаған хәлдә, уларҙың дөйөм милке булып иҫәпләнә. Ир йә ҡатындың береһе ошо милек менән эш иткәндә фәҡәт ике яҡлы ризалыҡҡа ғына таяна ала. Милек менән эш итеүгә тотонорҙан алда ир йә ҡатындың нотариуста раҫлатылған ризалығы кәрәк. Был иһә күсемһеҙ милекте һатыу-һатып алыу буйынса килешеүҙе дәүләт теркәүе өсөн мотлаҡ шарттарҙың береһе булып тора.

### СУДҠА БИРЕГЕҘ

**Пенсионермын. Пенсия фондында, стажым хеҙмәт кенәгәмдә күренеп тороуға ҡарамаҫтан, өс йылымды иҫәпкә алманылар, ә бит мин эштән китмәнем! Сәбәбен, мин эшләгән предприятие ошо өс йыл буйына һалым түләмәүе менән аңлаттылар. Мин быны менән ризалашмайым, кемгә мөрәжәғәт итергә?**

- Хеҙмәт законы хеҙмәткәрҙең хоҡуҡтарын гарантиялай, йәғни ул үҙенә күпме эш хаҡы иҫәпләнгәнен, һалымдың күпме түләнеүен, эш хаҡынан тотоп ҡалыуҙар тураһында белергә хоҡуҡлы. Ойошмағыҙҙа эшләгән саҡта һеҙ иҫәп-хисап ҡағыҙы талап итә ала инегеҙ, ә инде эш биреүсе был талапҡа ҡолаҡ һалмаған осраҡта уны административ яуаплылыҡҡа тарттырыу ҡаралған. Һеҙҙең осраҡта Пенсия фонды ғәмәлен судҡа биреү урынлы булыр.

### ҮҘ АҠЫЛЫНДА БУЛМАҺА...

**20 йыл элек ҡыҙым баш мейеһе травмаһы алғайны, унан һуң һиҙелерлек үҙгәрештәр булды. Психоневрология диспансерында иҫәптә тормаһа ла, невропатологта дауалана. Әле ул енәйәт яуаплылығына тарттырылды. Һаулығы торошо буйынса ул суд процесынан һәм язаға тарттырылыуҙан азат ителә аламы?**

- Юҡ. Яҙыуығыҙға ҡарағанда, ул ниндәйҙер нигеҙҙә хоҡуҡи мөнәсәбәттәргә яраҡлы, тип табылған. Ындай ҡарар - хоҡуҡи мөнәсәбәттәргә яраҡлымы әллә уға опекун тәғәйенләргәме - фәҡәт суд тарафынан сығарыла. Судҡа һеҙ шулай уҡ ҡыҙығыҙҙы хоҡуҡи мөнәсәбәттәргә һәләтһеҙ тип таныуҙы һорап, уға махсус иҫәптә тороуы хаҡындағы бөтә медицина документтарын ҡушып ғариза яҙа алаһығыҙ. Аҙаҡ суд талабы буйынса уның сәләмәтлек торошона экспертиза үткәреләсәк. Судҡа айырым тәртип менән (һеҙҙән госпошлина алырға тейеш түгелдәр) ҡыҙығыҙҙың йәшәгән урыны буйынса мөрәжәғәт итегеҙ. Әгәр енәйәт ҡылынған осорҙа ҡыҙығыҙҙың үҙ иҫ-аҡылында булмауы асыҡланһа, енәйәт эше туҡтатыласаҡ.

Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА әҙерләне.

Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы

### Теш һыҙлаһа:



- Ауыртҡан тешкә ҡыҙыл сөгөлдөр телемен ҡуйырға;

- Тештә ҡыуышлыҡ булһа, уны таҙалап, бәләкәй генә киҫәк прополис ҡуйырға, һарымһаҡ телеме лә ярай;

-30 грамм тирәһе ваҡланған меңъяпраҡ үләненә 1 литр ҡайнар һыу ҡойоп, һүрән утта 10 минут ҡайнатырға, һөҙөргә һәм шул төнәтмә менән ауыҙҙы сайҡарға; 1-2 бүлем һарымһаҡты төйөп марляға урарға, һул яҡтағы теш һыҙлаһа - уң, уң яҡтағыһы һыҙлаһа - һул ҡулдағы пульсҡа бәйләргә һәм 10-20 минут торорға.

### Үгәй инә үләне

Ҡурылдай булғанда 200 мл һыуға 15 грамм үгәй инә үләне япрағын һалырға, 1 сәғәт төнәтергә, һөҙөргә. Ашағас, көнөнә 3-4 тапҡыр 2-шәр ҡалаҡ эсергә.

### Гемоглобин

Гемоглобин юғары булһа: 1 йыл буйы итле аш ашамаҫҡа, итте балыҡҡа алыштырырға кәрәк; еләк-емеш, лимон, тоҙло кәбеҫтә ашарға; ҡарабойҙай, һоло бутҡаһын даими ҡулланырға; ҡанды нормаға килтереү өсөн һөлөк һалдырырға.

### Туҡранбаш (клевер луговой)

С витаминына бай, башҡа матдәләре лә күп. Уны ябыҡҡанда, аҙ ҡанлылыҡтан эсәләр. Анемия, С витамины етмәгәндә 1-2 ҡалаҡ туҡранбаш сәскәһен 1 стакан һыуға сәй кеүек бешерәһең һәм көнөнә 2-3 мәртәбә икешәр ҡалаҡ эсәһең. Был төнәтмә хәтерҙе лә яҡшырта.

### Абрикос

Йөрәк-ҡан тамырҙары, бөйөр ауыртыуҙан, һимереүҙән ҡотолорға ярҙам итә; абрикоста баш мейеһе эшмәкәрлеген яҡшыртыусы, хәтерҙе ныҡытыусы матдәләр бар; кемдең гемоглобины түбән, уларға ла дауа булыр.

### Сөгөлдөр

Яңы һығылған сөгөлдөр һуты менән сайҡатыу шулай уҡ тамаҡ ауыртыуын тиҙерәк бөтөрөргә ярҙам итә.

Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.

✓ *Зиннәт һәм кейем тип ярышмағыҙ, ҡатындарығыҙҙы ла ярыштырмағыҙ, әгәр аҡсағыҙ ҡулланыуҙан артһа, аҙмы-күпме булһа ла ҡара көнгә һаҡлағыҙ.*






## ОЛОЛАР ӨСӨН НӘСИХӘТ

### Кәсеп әҙәбе

● Бер кешегә хеҙмәт итһәгеҙ, хеҙмәтегеҙҙе тоғро башҡарығыҙ. Дөрөҫ һүҙле, ихлас ғәмәлле һәм башлыҡтарығыҙға итәғәтле булығыҙ. Хыянат итмәгеҙ, выждан һәм хөрмәтегеҙгә ҡаршы эшләмәгеҙ.

● Башҡаларға хеҙмәт итһәгеҙ, кейем-һалымда улар менән бер тиң йөрөмәгеҙ. Ҡатындарығыҙҙы артыҡ кейендермәгеҙ. Донъяла ярышырлыҡ кеше бөтмәйәсәк булған өсөн, зиннәт һәм кейем тип ярышмағыҙ, ҡатындарығыҙҙы ла ярыштырмағыҙ, әгәр аҡсағыҙ ҡулланыуҙан артһа, аҙмы-күпме булһа ла ҡара көнгә һаҡлағыҙ. Ни ҡәҙәр бәхетле булһағыҙ ҙа, киләсәктә булыуы ихтимал ҡара көндәр өсөн әҙер булығыҙ.

### Иҡтисад (тота белеү)

● Аҡсаһы һәм дәүләте күп кеше бай түгел, иҡтисады булған кеше бай була. Шуның өсөн файҙаһыҙ ерҙәргә, харам урындарға сарыф итәсәк аҡсаларҙы янығыҙҙа һаҡлағыҙ, йыйығыҙ, киләсәктә зарары булмаҫ.

● Өй идараһында булған аҙ ғына бурыс та, кейемдәрҙә булған йыртыҡ кеүектер. Ваҡытында күрелеп ямалмаһа, һаман ҙурайыр. Шуның өсөн көтәсәккә нәмә алмағыҙ, әгәр зарур булып алынһа, аҡсаһын ашығып тапшырырға тырышығыҙ. Өҫтөгөҙгә бурыс өймәгеҙ. Әҙәм балаһын ваҡытһыҙ ҡартайтасаҡ нәмәләрҙең береһе - бурыс.

● Аҡсаның ҡиммәтен, нәмәнең хаҡын яҡшы белегеҙ. Һатыу-алыу ваҡытында алданмағыҙ. Кәрәк нәмәне, мөмкин булһа, үҙегеҙ ҡарап алығыҙ. Кәрәкмәгәндәрен арзанлығына ҡыҙығып йәки тик йыһаз булғаны һәм матурлығына ҡарап һатып алмағыҙ. Бындай әйберҙәрҙе алыу ни ҡәҙәре арзан хаҡлы булһа ла ҡиммәттер.

● Керем һәм сығымдарығыҙҙы бер дәфтәргә яҙығыҙ һәм һәр ваҡыт был дәфтәрҙе күҙ алдында тотоғоҙ. Бындай дәфтәрҙәр иҡтисад аршины һәм сара үлсәүе булыр. Сөнки кеҫәһенән сыҡҡан аҡсаларҙы күреп торғанда, кәрәкмәгән урындарға биреүҙән һәр кем һаҡланырға теләй.

● Сығымдарҙы килемдәрҙән артыҡ итмәгеҙ, ҡара көн өсөн һәр айҙа аҙмы-күпме булһа ла, кеҫәгеҙгә берлектерә барығыҙ. Был күңелгә рәхәтлек килтерер һәм тырышлыҡҡа сәбәп булыр. Сығым артыҡ булһа, күңелгә хәсрәт була һәм ҡанды боҙа.

● Зарур булмаһа, бурысҡа алмағыҙ. Мәжбүр булмаһа йәки яҡшы белмәгән кешеләргә бурыс бирмәгеҙ. Бигерәк тә халыҡ араһында кейенеп, күкрәк киреп йөрөүселәргә һәм ҡорһаҡтарын ҡунаҡ итеүселәргә, ҡатындарын дәрәжәләренән тыш кейендереүселәргә бер тин дә бирмәгеҙ.

● Вәғәҙәләшкән ваҡыт еткәс, аласағығыҙҙы уйнап-көлөп түгел, ысын һүрәттә һорағыҙ. Бирәсәгегеҙҙең ваҡыты етеп, бирергә көсөгөҙ булмаһа, матур итеп сәбәбен аңлатығыҙ, ғәфү үтенегеҙ.

### Тейешле сара

● Ваҡытты ҡуллана белгән кеше малды сарыф итә белә, йәғни бер минут ваҡытты ла бушҡа үткәрмәгән кеүек, бер тин аҡсаны ла урынһыҙ ергә ебәрмәй. Шуның өсөн ваҡытығыҙҙы һәм малығыҙҙы исраф итмәгеҙ, уйлап эшләгеҙ. Ахмаҡ кешеләр кеүек аҡсағыҙҙы һәм ваҡытығыҙҙы донъяла һәм әхирәттә файҙаһы булмаған нәмәләргә исраф итмәгеҙ.

● Мал ни ҡәҙәр күп булһа ла, ғүмер ни ҡәҙәр оҙон булһа ла, уйлап эшләмәһәң, яҙ көнөнөң ҡары кеүек иреп бөтөр, исеме лә, эҙе лә ҡалмаҫ. Тейешле сара күрелһә, аҙ ғына мал да бәрәкәтле, ҡыҫҡа ғына ғүмер ҙә файҙалы булыр. Ошоноң өсөн планлы донъя көтөгөҙ. Планлы йәшәгеҙ. План менән эш итегеҙ.

**(Дауамы бар).**

*БЕҘ - БАШҠОРТТАР!*

**Мин башҡорттоң тәбиғәт балаһы, тәбиғәтте йәндәй яҡын күреүе, уға һаҡсыл ҡарашы, һәр ҡыуаҡты ҡәҙерләүенә ғүмер буйы һоҡланып та, ғорурланып та йәшәйем. Мин был турала гәзит биттәрендә лә яҙып торам. Ә был юлы башҡорттоң икенсе бер һоҡланғыс сифаты тураһында һүҙ алып барасаҡмын. Ул да булһа, уның "һуңғы телем икмәген дә бүлешергә" әҙер йән булыуы, үҙе ниндәй генә ауыр хәлдә булһа ла, башҡаларға ярҙам ҡулы һуҙырға тырышыуы. Әммә уның был сифатынан элек тә, әле лә бик оҫта файҙалана ситтәр. Шундай ике осраҡ тураһында яҙып үтәм әле.**

# ҺУҢҒЫ ТЕЛЕМ ИКМӘКТЕ ЛӘ...

## башҡалар менән бүлешер ул

Үҙемдең һәм тормош иптәшемдең шәжәрәләрен өйрәнгәндә, ике ғәжәйеп тарихи миҫал менән танышырға тура килде. Был ике хәл икеһе берәр быуат ваҡыт арауығы менән һәм 200 км-ҙан ашыу юл аралығы менән айырылып тора, ә бына асылдары буйынса бер үк - ауыр хәлдә ҡалған һәр кешегә ярҙам итеү.

Ҡатынымдың ҡыҙ фамилияһы - Ҡормашева. Ул фамилия 1812 йылда Ватан һуғышында ҡатнашҡан Ҡормаш Юлъяҡшиндан килә. Ул һуғышта күрһәткән батырлығы һәм Парижды алыуҙа ҡатнашҡаны өсөн ике көмөш миҙал менән бүләкләнә. Был турала Ә. З. Әсфәндийәровтың китабында ла уҡырға мөмкин. Ә мин һөйләйәсәк хәл 1830 йылдарҙа була. Ҡормаш арбаһына 2 кубометрҙай таҡта тейәп, иң яҡшы пар атын егеп, Орск баҙарына китә. Таҡтаны һатып бөтөп, ҡайтыр юлға сыға. Юлда оҙон үргә күтәрелеп барғанда бер ағас аяҡлы ғәрип кеше осрай. Ул арыған да кеүек күренә. Ҡормаш уны ултыртып ала. Береһе ат ҡыуғанға, икенсеһе һүҙгә һаран булғанғамы, хәбәр бик үк ялғанмай. Ҡарт һалдат алда ат тотоп барған көйгә ярым йоҡомһораған хәленән ҡапыл уянып китә. Уның артында ултырып килгән ғәрип шикле күренә башлай. Ҡормаш һаға я һәм ниҙер һиҙенгәнен белдермәҫкә тырышып, күҙ ҡырыйы менән генә һирпелеп ҡарай ҙа, ғәриптең һаҡ ҡына ағас аяғын сисә башлағанын шәйләп ҡала. Бына ул ағас аяғын сисеп алып, уны суҡмар һымаҡ тотоп алып, Ҡормашҡа һуғырға әҙерләнә. Ә Ҡормаш уны үҙе ҙур ҡулдары менән арбанан һуғып төшөрә. Аттарын шәп итеп ҡыуып, сабып китә. Ә теге "ғәрип" тигәнең ике аяҡлы булып сыға, йүгереп, аттың артынан ҡыуып маташа, тик етә алмағас, тороп ҡала.

Көн дә кисләй. Ҡараңғылана. Ҡормаш аттарын ял иттереп, ашатып алырға тип, юл ситенә ебәрә. Теге кешенең арттан килеүен һиҙепме, үҙе арбаға ятмай, ә ҡыуаҡ артына боҫа, ә арбаға кеше йоҡлаған кеүек итеп әйберҙәр өйөп ҡуя. Үҙе ҡулына суҡмарын ала.

Ярты төн уҙғас, арбаға теге кеше яҡынлаша. Ҡулында бысаҡ ялтырай. Киҙәнеп, арбалағы "кешегә" сәнсеүе була, Ҡормаш уны арттан килеп, суҡмары менән иҫәнгерәтә һуға. Шунан йәһәт кенә аттарын егеп алып, ҡайтыу яғына елдерә. Яҡтырыуға ҡайтып етеп, аттарын тәрбиәләп, әйберҙәрен өйгә индерергә йыйынһа, арбала ағас аяҡ ятҡанын күреп ҡала. Тәүҙә уны утынлыҡҡа ырғытырға уйлай ҙа, аҙаҡ: "Мине үлтерергә өлгөрмәгән ҡорамалды йыйып ҡуяйым әле..." - тип, өйгә индереп, урындыҡтың иң төбөнә ырғыта. Шунда ята ул бер нисә йыл. Бер саҡ өйҙәгеләр ризаһыҙлыҡ белдергәс: "Инде, ысынлап та, ниңә һаҡларға әле? Утын итеп, сапҡыслап ташларға кәрәк!" - тип уйлап, бер сабыуы була, унан алтын, көмөш аҡсалар ҡойолоп китә. Ҡормаш шунда ғына был ағас аяҡ эйәһенең юлбаҫар булып сыҡҡанын, үҙенең изгелекле күңеле арҡаһында бәләгә тарый яҙғанын, ысын үлемдән ҡотолоп ҡалыуын аңлай һәм "Изгелек барыбер яуызлыҡты еңә!" тип, шөкөр итеп йәшәүен дауам итә...

Ә икенсе хәл 1920 йылдарҙа хәҙерге Ейәнсура районы II Назар ауылында йәшәгән минең атайҙың бер туған ағаһы Сәләхетдин олатай менән бәйле. НЭП башланғас, ул сауҙа эшенә ныҡлап тотона һәм, әйтергә кәрәк, бер 4-5 йыл эсендә II Назар ауылының иң бай кешеһе булып китә. Ырымбур ауылдан 70 км-ҙа ғына ятҡанлыҡтан, ул иртәнге ҡараңғынан өйҙән сығып китеп, киске ҡараңғыға өйөнә ҡайтып та етә торған булған. Ырымбур баҙарына бер барғанында ул һатыу эшен бөтөрөп, аттарын ҡалдырған урынға ыңғайлай. Баҙар майҙанынан сығып барғанда бер баланың яр һалып әсенеп илағанын ишетә. Әйләнеп ҡараһа, берәүҙең бер малайҙы баҫтырып, сыбыртҡы менән туҡмап йөрөгәнен күрә. Ир кешенең үҙ улын туҡмап йөрөүен аңлай олатай, шулай ҙа туҡтап, малайҙы тунының салғыйы эсенә һыйындыра. Атаһы килеп етеп, Сәләхетдин олатайҙы әрләй, асыулана, ә малай "дер ҡалтырап" олатайҙың ҡуйынына нығыраҡ һыйына, ә атаһы ҡул һелтәй ҙә халыҡ араһына инеп юғала.

Сәләхетдин олатай малайҙы тун эсенән сығарып, тундың тышҡы кеҫәһенән тинлек аҡса биреп, икенсе яҡҡа йүгерергә ҡушып, йыуатып ҡала. Малай йүгереп китә лә тиҙ генә юҡҡа сыға.

Сәләхетдин аттары янына барып еткәс, аҡсаларын төпкәрәк һалып ҡуйырға ниәтләнеп, кәзәки кеҫәһен ҡараһа, кеҫә теленгән, аҡсаларҙан ел иҫкән. Малайҙың атаһы башҡорттоң кеше күңелле булыуын иҫәпкә алып, юрый шулай ҡыланған икәненә төшөнә олатай. Шулай ҙа ул изгелек эшләүҙән туҡтамай йәшәгән, тип һөйләйҙәр. Үҙе һөргөнгә киткәнсе үк ике хеҙмәтсеһен дә өйләндереп, уларға өй һалдырып, мал бүлеп бирә. Ике хеҙмәтсеһе лә һөнәрле булып ҡала: береһе тимерсе һөнәрен үҙләштерә, икенсеһе мәктәпкә йөрөп, белем алып ҡала. Ул аҙаҡ ауылдың белемле кешеһе һаналып, хисапсы булып китә.

**Рәүеф БИКТАШЕВ.**
**Сибай ҡалаһы.**

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

# БАШҠОРТЛОҠ ХИСЕН...

## томалап булмай

**Ул саҡта Өфөлә 9-сы һанлы берҙән-бер башҡорт мәктәбендә уҡып, уны тамамлаусылар хәтерләйҙер. Мәктәптә ҙур плакат эленеп тора торғайны. "Понедельник, вторник, среда - день русского языка!" тип яҙылғайны унда.Мәктәптә лә, өйҙә лә рус телендә һөйләшергә тейешбеҙ, тимәк.**

Әлбиттә, үҙ телеңде лә, рус телен дә һәйбәт белеүеңдең бер зыяны ла юҡ. Радио аша башҡорт йырҙары бик һирәк тапшырыла торғайны. Уларының да күбеһе эстрада йырҙары. Беҙ рус йырҙарын йырлап үҫтек. Бер көн яңы йыр өйрәтергә йыйҙылар беҙҙе. "Мы за мир" тип атала ине ул йыр. Йырҙың һүҙҙәре яҙылған китапты уртала баҫып тороусылар уҡып йырлай, мин йырҙағы ниндәйҙер әле миңә таныш булмаған һүҙҙе аңлай алмай, артта ҡалам да ҡуям. Бына ҡыҫҡа ғына тәнәфес иғлан иттеләр. Минең янымда баҫып, тырышып йырлаған Фаҡиһанан: "Ошо урында ниндәй һүҙ әйтеп йырлайһың һин?" - тип һораным, ә ул: "Мин дә аңламайым, шуға "Извергли вергли" тип йырлайым"- тине. "Бик ҡыҙыҡ һүҙ", - тип көлөшкәйнек, бүтән балалар ҙа нимәгә көлөүебеҙ менән ҡыҙыҡһынды. Тәнәфес бөттө. Тағы ла ҡабатлап йырлағанда бөтәһе лә извергли-вергли тип йылмайышып йырлаһа ла, уҡытыусы быны һиҙмәне. Дәрес аҙағында Фаҡиһа менән был йыр китабын барып уҡып, был һүҙҙең "изверги" икәнен белдек.

Бына әле олоғайған көнөмдә телевизорҙан "Тылсымлы ҡурай", "Хазина" тапшырыуҙарын, "Оҙон көй" конкурстарын ҡарап, "Ниңә беҙҙе бала саҡта үҙ халҡыбыҙҙың боронғо моңдарынан мәхрүм иткәндәр икән?" - тигән үкенесле хистәр кисерәм. Халҡыбыҙҙың боронғо йырҙарын тыңлаһам, улар йөрәкте ярып инә лә, күҙҙәремә йәш алам һәм: "Юҡҡа ғына тырышҡандар беҙҙең күңелдәрҙән туған моңобоҙҙо юйырға, яҙыусы Фәрзәнә Аҡбулатова әйткәйне бит: "Башҡортлоҡ беҙҙең ҡаныбыҙҙа", - тип", - тип уйлайым. Эйе, башҡортлоҡ хисен бер нисек тә томалап булмай...

**Фәүзиә ЯХИНА.**

ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ

# ИВАН ЛЕПЕХИН СӘЙӘХӘТНАМӘҺЕ,

## йәки XVIII быуаттағы башҡорт донъяһына бер ҡараш




Мәжлестән һуң хәрби күнекмәләр күрһәтеү башланды. Улар уктан сәпкә генә түгел, сәп урынындағы башҡорттарға төбәп атты, ә улары, шул тиклем етеҙлек күрһәтеп, билдәле бер арала уҙҙәренә атылған уҡтан тайшана алды. Уларҙың ҡайһылары торған урынынан, иң мәргәндәре атта йән-фарман сабып килгән ыңғайға ҡуйылған сәпкә төбәп атты. Ошо күңел асыуҙа тик ирҙәр генә ҡатнашты, ә башҡорт ҡатындарына, бигерәк тә ситтән килгән кешеләр булғанда, күңел асыу мәжлестәрендә булыу рөхсәт ителмәй: улар, йыраҡтарынаҡ тороп булһа ла, ир-ат рыцарлығын тамаша ҡылыусы ғына булды. Башҡорттар мәжлестән ярайһы уҡ шау-гөр килеп таралышһа ла, аҙаҡтан улар араһында ниндәй ҙә булһа низағ-фәлән сығыуы ишетелмәне. Былай хәүефләнеү уларҙа бик һирәк мәжлестең һуғышмайынса үтеүе хаҡындағы хәбәрҙәр менән бәйле булғандыр. Нисек булһа ла, уларҙың күңел асыуы йәшәү рәүешенә бик оҡшаш икәне һәр кемгә мәғлүм.

Төркмән старшина йәйләүенән беҙ тура Ағиҙел йылғаһына табан боролдоҡ һәм Күркә Тау (автор "Кюрка Тау", тип яҙа, Күркәмтау булыуы ихтимал. - **Ред. иҫк.**) йылғасығы аша сыҡҡанда йылға ағымының һул яғынан бейек булмаған ҡалҡыулыҡта кварцта ҡарағусҡыл алтын билдәләрен күрҙек. Унан урманлы ерҙәр аша Урал һыртынан баш алып, Һаҡмар йылғаһына ҡойоусы Битрә йылғасығына тиклем барҙыҡ. Төркмән старшина йәйләүенән унда тиклем ара 40 саҡырым булыр. Ошо йылғасыҡ буйында беҙ ҡуна ҡалдыҡ, ә ярты юлда шулай уҡ Уралдан башланып, Һаҡмарға ҡойоусы Бишҡолон (Биш-Кулун) йылғасығы аша үттек.

Туғыҙынсы числола шулай уҡ урмандар буйлап 50 саҡырымда булған Келәнсе старшина тирмәләренә тиклем юлыбыҙҙы дауам иттек. Ошо юлыбыҙҙа егерме саҡырым ерҙә Яман Йылғаға (автор яҙғанса, худая речка - Еман Жилга. - **Ред. иҫк.**) ҡойоусы Яйыҡбай (богатая речка) йылғасығы башынан һәм Яйыҡбайҙан 10 саҡырымда ятҡан Ҡайҡабара йылғасығы үренән уҙҙыҡ. Уның ағымы оҙондан түгел. Ул Яман Йылғаға ҡоя, беҙ уны Келәнсе старшина кусенә килеп еткәнсе өс тапҡыр кисеп сыҡтыҡ; уның тирмәләре Яман Йылға баштарының береһе янында урынлашҡан: йылғасыҡтың унға яҡын сығанағы бар, улар бер ағым яһап ҡушылғас, һыуҙарын Ағиҙел йылғаһына ҡойоусы Үҙән йылғаһына илтә.

Унынсы числола беҙҙең юлыбыҙ тәүге көндәргә ҡарағанда күпкә ауырыраҡ булды. Ағиҙел йылғаһына яҡыная барған һайын, тауҙар бейегәйә барҙы. Төшкә табан беҙ ярайһы уҡ ҙур һәм шәп ағымлы Ҡағы йылғаһына килеп еттек: әммә уны бар ерҙә лә тип әйтерлек кисеп сығып була ине. Ике яҡтан да бейек кенә тауҙар булып, уларҙың араһында мул туғайлыҡтар ята. Бөтә тауҙар ҙа ҡуйы ҡыҙыл урман менән ҡапланған, унда ҡарағас бигерәк тә күп ине. Тауҙарҙа урман нисек бай булһа, унда үҫкән үләндәр ҙә шулай уҡ гүзәл булып, йыйғандарыбыҙҙың иң яҡшыһы ошо тауҙарҙан алынды.

Уҙған йәй был илдә булған ҡороллоҡ тау башҡорттарына ҙур ҡыйынлыҡтар тыуҙырған, улар, ҡарама ағасы аҙ булғанлыҡтан, малдарына ҡарағай ҡабығы ашатып, урманға байтаҡ зыян килтергән, малдарының да күп өлөшө ошо аҙыҡтан үлеп бөткән...

Белорет заводынан 15 саҡырымда башҡорттарҙың иң бай старшинаһы Байым Тархан тирмә ҡорған ине. Башҡа башҡорттар менән сағыштырғанда ниндәй ҙә булһа айырмаһы булыу-булмауын асыҡлау ниәте менән беҙ уны барып күрергә теләгәйнек, әммә башҡорт ҡайҙа ла башҡорт инде: бөтөн айырма уның бик ҙур йылҡы көтөүҙәре булыуы арҡаһында башҡа башҡорттарға ҡарағанда ҡымыҙ менән ныҡыраҡ һыйлана алыуынан ғибәрәт ине.

Белорет заводынан 50 саҡырымдарҙа Яман Тау (злая, худая гора) исемле тау бар, беҙ уны шулай уҡ барып күрҙек. Был тау Нуғай юлына ҡарай, иң бейек тау һырттарынан һанала, башы һәр саҡта ла ҡар менән ҡапланғанлыҡтан, башҡорттар тарафынан яман тип аталған. Ошо тауҙың бейек түбәһен һаҙлыҡ һәм ҙур күләүектәр тәшкил итә. Унан бәләкәйҙәрҙән булмаған биш Урал йылғаһы ағып сыға. Көнбайышҡа табан ағыусы Йүрүҙән һыуынан төшкөләккә ауышып, Өфө йылғаһы менән тоташа. Елдәк ҡәлғәһенән 30 саҡырым өҫтәрәк, көнбайыш һәм төшкөләк араһында ике - ҙур һәм кесе Йүрүҙән йылғалары бар (автор Үҙән исемле йылғаларҙы ла Йүрүҙән тип атай. - **Ред. иҫк.**), улар бергә ҡушылғандан һуң көнсығышҡа борола һәм Табынскиҙан 40 саҡырымдар тирәһендә Табынск менән Өфө араһында Ағиҙелгә ҡойоусы Эсем йылғаһына үҙенең һыуҙарын ҡоя.

29-сы числола, күреп-ҡарап сығыуға унайлыраҡ булһын өсөн, Ирәмәл Тау ҡаршыһында туҡталдыҡ: әммә башҡорттарҙың ығы-зығы килеүе беҙҙе ошо көндө ял итергә мәжбүр итте. Ул саҡта улар ҡайһы бер урындарҙа Яйыҡ линияһына үтеп инеүсе бунт күтәргән ҡырғыҙҙарға (ҡаҙаҡтарға. - **Ред. иҫк.**) ҡаршы сығырға йыйына ине. Ошо ваҡытта беҙ уларҙы үҙҙәренә хас булған яугир ҡиәфәтендә күрә алдыҡ. Уларҙың хәрби ополчениеһы бар яҡтан да казактарҙыҡына оҡшаш: кәрәк саҡта алыҫ юлға сығыр өсөн уларҙың һәр береһенең икешәр эйәрле аты һәм етерлек аҙыҡ запасы бар ине. Уларҙың төп ҡоралы - уҡ-һаҙаҡ һәм һөңгө; мылтыҡ һирәк кешелә генә була. Улар үҙ өйөрҙәрен тамғалар менән билдәләй һәм бөтөн эштәре казак уставы буйынса бүленә. Беҙгә уларҙың дошмандарына ҡаршы нисек теләп һәм ҡурҡыуһыҙ барыуын күреү бигерәк тә оҡшаны. Бөрйән бунты ваҡытында ҡырғыҙҙарҙан күргән яфалары арҡаһында уларға ҡарата тыуған нәфрәт уларҙың ҡанына һеңгән.

Үҙҙәренең эштәрен тамамлағас, 29-сы числола башҡорттар беҙҙе Ирәмәл Тауға алып китте. Ул беҙгә 6 саҡырымдан да алыҫыраҡ түгел кеүек тойолһа ла, беҙгә 28 саҡырым ерҙән урап барырға тура килде: тау бар яҡтан да һаҙлыҡтар менән уратып алынғанлыҡтан, уға бары тау һырттары һәм урмандар аша урап барырға ғына мөмкин ине. Төрлө өс тау ошо исем аҫтында йөрөһә лә, уларҙың урталағыһы ғына Ирәмәл Тауҙың үҙе була. Тауға уның ҙур булмаған, әммә ҡуйы урман менән ҡапланған көнсығыш тарафынан менеүе уңайлы һәм артыҡ ауыр ҙа түгел. Был арауыҡ 300 сажин самаһы булыр. Был юлда бар ерҙә лә һыуы үтә күренмәле шишмәләр шарлап аға, улар һуңынан, бергә ҡушылғас, 15 саҡырымлап үтеүгә Ағиҙелгә ҡойоусы, уғата тиҙ ағымлы һәм ярайһы уҡ киң Ағаҙыт һәм Әүнәт йылғасыҡтарын барлыҡҡа килтерә.

Ирәмәл Тау һырты киң һәм тигеҙ майҙан булып күренә: ул төшкөләк яҡтан яҡын килеүсе Йүрүҙән һыуҙары менән йыуыла; төньяҡ тарафтан Ирәмәлдең түбәһе тип иҫәпләргә мөмкин булған бейек кенә тау күтәрелә. Уның бейеклеге йөҙ сажин самаһы, ул емерелеп төшкән тау таштарынан хасил булған: бөтә ҡалҡыулыҡ төрлө ҙурлыҡтағы квадрат таштар менән тулған.Тау түбәһе яҫы, әммә еүеш һәм һаҙлыҡлы; бар ерҙә лә һыу менән тулы соҡор-саҡырҙар күренеп ята. Төшкөләк яғынан аҫҡа табан тау үҙенән махсус рәүештә айырып сығарған кеүек тойолған арҡыры вал ярты саҡырым тирәһендә ҡаршылағы Әүәләк тауы менән тоташа. Бөтә был арауыҡты батҡыл һаҙлыҡ биләй, уға ҡурҡмайынса аяҡ баҫырлыҡ та түгел, һәм был ян Ағиҙел йылғаһының төп сығанағы башлана.

**Бәҙри ӘХМӘТОВ тәржемәһе.**
**(Дауамы бар).**

ТАРИХЫҢДАН ДАН ТАП!



# "ПАРИЖДЫ ЛА КҮРҘЕК БЕҘ..."

Рәсәй яҙмышы өсөн хафаланған Ырымбур төбәге халҡы 1812 йылдың август урталарына тиклем ғәскәр иҫәбенә 500 мең һум аҡса күсерә. Бынан тыш, башҡорт халҡы 4 139 ат бирә.

Бер уҡ ваҡытта алайҙарҙы (полк) һуғышҡа әҙерләү ҙә башлана. Бына "Икенсе әрме" риүәйәтендә был турала нимә һөйләнелә: "Урыҫ еренә сит дошман килгәнлеген ишетеү менән, бөтә Урал халҡы йәшен һуҡҡандай һиҫкәнеп киткән, бөтәһе лә аяҡ өҫтө баҫҡан, ти. Урманда уҡ юнып, аласыҡта һаҙаҡ эшләп, тана-торпо, тәкә һуйып, ит ҡаҡлап, эркет ҡайнатып, ҡорот йәйеп, тире ыҫлап, турһыҡ, һаба, мәс тегеп, ҡаймаҡ яҙып, май таҫҡып, төн-көн ағытмай бейә һауып, турһыҡ, һаба тултырып ҡымыҙ йыйып, аҙыҡ-түлек, ат-тун, кейемһалым таярлап, халыҡ яуға әҙерләнгән ти. Бөтә бисәсәсә, әбей-һәбей, ҡыҙ-ҡырҡын, бишектән төшеп, түштән шыуған, аяҡҡа баҫҡан бала-саға береһе ҡалмай батырҙарҙы яуға оҙатырға йыйылған, ти.

Яуға оҙатҡанда әбей-һәбейҙәр, яуға китеүселәрҙең юлы ҡыҫҡа булһын тип, тегер еп биргәндәр. Бисәсәләр, күкрәктәрегеҙгә дошман уғы теймәһен, тип, яуға барыусыларҙың түштәренә тәңкә теккәндәр. Ҡыҙ-ҡырҡын, егеттәргә сер һаҡлаусы булығыҙ, тип, нағышлы янсыҡтар биргән..."

Ә "Абдрахман Аҡъегетов" тигән икенсе риүәйәттә былай тиелә: "Рәсәй батшаһы башҡорттарға ярҙам һорап мөрәжәғәт иткәс, был хәбәр-оран беҙҙең Үтәгәнгә лә килеп еткән. Ауыл ҡарттары-аҡһаҡалдар йыйылып кәңәш ҡорғандар. Илгә ауырлыҡ төшкәндә, яу килгәндә, башҡорттар бер ҡасан да ситтә ҡалмаған, ир-егеттәр иртән уҡ аттарын эйәрләһендәр, тигәндәр. Ауылдың бынамын тигән ир-егеттәрен ат атландырып, башлыҡ итеп Абдрахман батырҙы тәғәйенләп, яуға оҙатҡандар" (Абдрахман Аҡъегетов - реаль шәхес, 1816 йылда уға 29 йәш тулған. 1834 йылда уның 35 йәштәге улы Мырҙагилденең бишәр йәштәге игеҙәк Муллагилде һәм Абыҙгилде исемле улдары булған. 1858 йылда Мырҙагилденең Мостафа исемле өсөнсө улы тыуған. Абдрахмандың атаһы - 1746-1814 йылдарҙа ғүмер иткән Аҡъегет Һабаев. - **Авт.**)

2 башҡорт полкы һәм 1 типтәр полкы һуғыштың башынан алып ҡатнашалар, сөнки улар 1812 йылдың майында, йәғни һуғыш башланғанға тиклем уҡ, ил сигендә торған булалар. Майор Тимеровтың типтәр полкы торған ерҙә - Понемунь ауылы районында 11-енән 12 июнгә ҡараған төндә французҙарҙың алдынғы отрядтары Неман йылғаһы аша сыға башлайҙар. Һуғыш башлана һәм беренсе булып рус ғәскәрҙәре һуғыша-һуғыша сигенергә мәжбүр була. Ошо хәлдә лә улар бик ҡаты ҡаршылыҡ күрһәтәләр һәм үҙҙәрен батырҙарса тоталар.

15 июнда Гродно ҡалаһы эргәһендәге һуғыштарҙа 1-се башҡорт полкы яугирҙары Үзбәк Аҡмырҙин, Буранбай Сыуашбаев, хорунжа Ғилман Хоҙайбирҙин, ясаулы Иҡсан Әбүбәкиров һәм башҡалар ҡаһарманлыҡ күрһәтә. 16 июнда 1-се типтәр полкы Вильно эргәһендәге һуғыштарҙа ҡатнаша. III Ғәскәр составындағы 2-се башҡорт полкы 16 июль Брест-Литовскийҙан көнсығыштараҡ Кобрин ҡалаһы янында дошман менән алышҡа инә. Был һуғышта дошмандың 2 мең һалдаты үлтерелә, тағы 200 офицеры һәм 2 генералы менән 2 меңдән ашыу һалдаты ҡулға алына. Был рус ғәскәренең французҙар өҫтөнән тәүге ҙур еңеүе була. Ошо һуғышта күрһәткән батырлыҡтары өсөн башҡорттар - Бәләбәй өйәҙе Сәпәш ауылынан Әйүп Ҡәйепов һәм Стәрлетамаҡ өйәҙе Күсәрбай ауылынан полк старшинаһы Аралбай Аҡсулпанов 4-се дәрәжәлә Изге Анна ордены менән бүләкләнәләр.

Июль айында башҡорт атлылары атаман Платов корпусы менән разведкаға йөрөй. Себастиани дивизияһын ҡыйратыуҙа ҡатнаша.

1812 йылдың 26 августында Бородино һуғышында французҙар бик ҙур ауырлыҡтар менән Раевский батареяһын яулап ала. Генерал Ермолов, Өфө пехота полкының бер батальоны һәм Ырымбур драгун полкы менән ҡаршы сығып, батареяны ташлап ҡасып барған частарҙы туҡтата һәм кире бороп, дошманға ташланалар. Раевский батареяһы дошмандан азат ителә. Был алышта ҡатнашҡаны өсөн 9 офицер-драгун "За храбрость и неустрашимость" миҙалына лайыҡ була.

**Әнүәр ӘСФӘНДИЙӘРОВ.**
**(Дауамы бар).**

# ТАРИХЫҢДЫ ТАНЫТ,

## Ул карталарҙа Башкырд, Башгирд, Паскерти, Pascerty,

### Өфө-II ҡаласығы тураһындағы хәҡиҡәтте ғалимдарыбыҙ ҡаҙып сығарҙы

**Нияз МӘЖИТОВ, тарих фәндәре докторы, профессор, академик:**

- Өфө-II ҡаласығы кемдәр тарафынан төҙөлгән, кемдең мәҙәни ҡомартҡыһы тигән һорауға яуап өҫтә генә ята. IX быуаттан башлап табылған көньяҡ Урал, хәҙерге Башҡортостан, Уралтауҙың көнбайыш, көнсығыш битләүҙәре донъялағы барлыҡ тарихи документтарға нигеҙләнгәндә Башҡорт иле тигән исем менән йөрөтөлгән. Беҙ, археологтар, һуңғы егерме йыл эсендә боронғо яҙма документтар менән ҡыҙыҡһына башланыҡ. Был беҙҙе һығымталар яһарға мәжбүр итте.

Ул сығанаҡтарҙың береһе - XII быуатта Урта диңгеҙ буйында йәшәгән бөйөк ғәрәп ғалимы Иҙриси яҙмалары. Ул Сицилия короле ҡушыуы буйынса донъяла йәшәүсе бар халыҡтар тураһында тарих яҙа. Уның китабында башҡорттарға бағышланған урын да бар. Ул көньяҡ Уралды Башҡорт иле тип атай һәм унда бер нисә ҡаланы урынлаштыра.

Тағы бер сығанаҡ - Мәхмүт Ҡашғариныҡы. Ул да төрки халыҡтары тураһындағы китабында башҡорттар йәшәгән ерҙәрҙә бер нисә ҡала барлығын яҙып ҡалдырған. Бынан өс йыллап элек тағы бер нисә үтә ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәргә юлыҡтыҡ. Европа һәм ғәрәп ғалимдары Ҡариҙел йылғаһының Ағиҙелгә ҡойған ерендә, йәғни Өфө ҡалаһы урынында Башҡорт тигән ҡаланы урынлаштыра. Өфөнөң боронғо исеме Башҡорт булыуы айырыуса әһәмиәткә эйә. Был туранан-тура Өфөнөң башҡортҡа ҡарағанын һөйләй. Ул ҡала Башҡорт тип аталған икән, унда кемдәр йәшәүе хаҡында һүҙ ҙә булыуы мөмкин түгел. Ул ваҡытта Волга буйында Болғар, Субар, Биләр ҡаласыҡтары барлыҡҡа килә. Улар барыһы ла шунда йәшәүсе халыҡтарҙың исемдәре менән аталып йөрөтөлгән. Уларҙың рәтендә Башҡорт ҡалаһы ла бар һәм башҡорттар ул саҡтағы Башҡорт иленең баш ҡалаһын Башҡорт тип атаған. Шул уҡ ваҡытта XIV быуаттан XVII быуатҡа тиклем Европа ғалимдары үҙҙәренең карталарында Ҡариҙел һәм Ағиҙел йылғаларының ҡушылған ерендә урынлашҡан ҡаланы "Паскарти" тип билдәләп килгән. Ул карталар донъя тарихында асыҡ итеп яҙылған реаль документ, факт, һәм хәҙерге Өфө урынында беҙҙең эра башында Башҡорт тигән ҡала булғанмы-юҡмы, тигән һорау бөтөнләй ҡуйылырға тейеш түгел. Был - ысынбарлыҡ һәм беҙ үҙебеҙҙең тарихтан баш тартмайбыҙ икән, быны танырға ғына тейешбеҙ.

Боронғо ҡаласыҡта йәшәүселәрҙең социаль планда ниндәй ҡатлам кешеләре булыуы хаҡында уларҙың ҡәберҙәрендә табылған материалдар ҙа һөйләй. Крайҙы өйрәнеүсе Р.Г. Игнатьев 1786 йылда Өфөләге бер ҡәберҙә ике килограмдан ашыу алтын әйберҙәр сығыуы тураһында яҙа. Ошо әйберҙәр Екатерина II бүләк итеп ебәрелә. Ә 1836 йылда икенсе бер бай хандың ҡәберендә лә бик күп алтындар табыла. Улар араһында Византия императоры Феодосий II V быуатта ҡойолған алтын тәңкәһе табыла. Унда шулай уҡ алтындан ҡойолған (һеҙ уларҙы һүрәттәрҙә күрәһегеҙ) башҡа әйберҙәр ҙә табыла. Шундай ҡиммәтле әйберҙәр был ҡәбергә осраҡлы рәүештә генә килеп инмәгән һәм улар V-VIII быуаттарҙа Өфө территорияһында йәшәгән халыҡтың Урта Азия, Иран, Византия, Европа, Ҡытай дәүләттәре менән сәйәси, иҡтисади, мәҙәни бәйләнештә булыуы, ҡатнашып йәшәүе хаҡында ла һөйләй. Был факт инде Өфө-II ҡаласығының, ысынлап та, ҡала булғанлығын дәлилләй.

Өфө-II ҡаласығын тикшереүҙәрҙең башланыуы ғүмер буйы көттөм. Рәсәй, Башҡортостан закондары буйынса, тарихи, археологик ҡомартҡылар урынлашҡан территория берәй төҙөлөш эше башларҙан алда фәнни яҡтан тикшерелергә, ә бындай тикшеренеүҙәр өсөн сығым ошо төҙөлөштө башҡарасаҡ ойошма иҫәбенә ҡапланырға тейеш. Ысынбарлыҡта, Өфө-II ҡаласығында төҙөлөш эштәре күптән башланған, ләкин территория ғалимдар тарафынан тикшереүгә дусар ителмәгән. XVII-XVIII быуаттарҙа уҡ хәҙерге Өфө сиктәре ошо иҫке ҡаласыҡҡа тиклем киңәйтелә һәм бында торлаҡ, хужалыҡ йорттары төҙөлә. Археологик ҡаҙыныуҙар алып барырға ошо биналар ҡамасауланы ла инде. 1960 йылдарҙа ҡаласыҡ дәүләт һаҡлауы менән тәьмин ителә торған федераль әһәмиәттәге уникаль тарихи-археологик ҡомартҡылар реестрына индерелде индерелеүгә. Шуға ҡарамаҫтан, был ҡаласыҡ территорияһы 2002 йылда әүҙем төҙөлөш эштәре районы итеп билдәләнде. Йәғни ҡаласыҡтың йәнәшендәге йырында ҙур бетон гараж төҙөлдө, уға юл һалыу өсөн ҡаласыҡ ситенән 4-5 метр киңлектә һәм 200 метр оҙонлоҡта майҙан киҫеп алынды. Хәҙер бында 2-4 метрға еткән культура ҡатламдары ап-асыҡ булып күренеп ята. Ул ҡатламдар бөтөн килеш һаҡланған, кеше ҡулы теймәгән, емерелмәгән. Әммә йәнәшәлә алып барылған төҙөлөш эштәренең был ҡомартҡыны юҡҡа сығарыуы бик ихтимал.

Әле был майҙанда торлаҡ һәм хужалыҡ биналары урын алған. Ә ҡаласыҡтың буш майҙанында 1957-1958 һәм 1990 йылдарҙа ҡайһы бер разведка-ҡаҙыуҙар үткәрелгән булған. Ул саҡта был урында 4 метрға тиклем ҙур культура ҡатламдары барлығы асыҡланған. Уларҙың 2 метр тирәһендәге өҫкө ҡатламы XVII - XX быуаттарға ҡарай. Ә аҫҡы ҡатламында табылған бай табылдыҡтар - көршәк ватыҡтары, һөйәктән, быяла, тимерҙән эшләнгән әйберҙәр - беҙҙең эраның I быуатынан XIV-XV быуатҡа тиклемге осорға ҡарай. 129-131/1-се һәм 128-130/1-се торлаҡ йорттар араһында киң ур йәки соҡор һәм вал ҡалдыҡтары күренә, был үҙ ваҡытында ҡаласыҡтың тышҡы яҡтан һаҡлаусы нығытма менән уратып алынғанлығы тураһында һөйләй.

Беҙ, археологтар, БДУ-ның тарих факультеты студенттары менән бергәләп баш ҡаланың Пушкин, Ново-Мостовой урамдары һәм Салауат Юлаев проспекты араһындағы участкала өс йыл инде археологик ҡаҙыныу эштәре алып барабыҙ. Әле күптән түгел генә был эштәрҙең һөҙөмтәһе донъя масштабындағы асыш менән билдәләнде: ҡомартҡы урынында балсыҡ һәм саман формаларҙан төҙөлгән киң һәм бейек стена асылды. Культура ҡатламы бик яҡшы һаҡланған, уның ҡалынлығы урыны менән 4 метрға барып етә. Табылған керамиканан, бронза, тимер, көмөш һәм алтындан яһалған әйберҙәр ҙә бик бай, төрлө-төрлө, улар V-VII, VIII-X, XI-XV быуаттарға ҡарай. XIII-XIV быуатҡа ҡараған Алтын Урҙа аҡсалары бик күп. Алтын ювелир әйберҙәр етештереү буйынса бай оҫтахана табылыуы - иң мөһим табыш. Культура ҡатламдары һәм табылған әйберҙәр Урта быуаттарҙа был урында ысынлап та ҙур ҡаласыҡ булғанлығын раҫлай.

Өфө-II ҡаласығының айырыуса ҡиммәте тағы ла шунда: ул үҙе һымаҡ тағы ике ҡаласыҡ - Дуҫлыҡ монументы территорияһындағы Өфө-III ҡаласығы һәм Ағиҙел йылғаһының уң яҡ яры буйлап нығытылған крепость-стена янындағы күп һанлы ҡурғандарҙан торған ҙур некрополь уратыуында урынлашҡан була. Был ҡурғандар Өфөләге төҙөлөш эштәре ваҡытында тулыһынса емерелгән.

**Айбулат ПСӘНЧИН, Рәсәй Фәндәр Академияһы Өфө фәнни үҙәге рәйесе вазифаһын башҡарыусы, Рус география йәмғиәтенең ғәмәли ағзаһы, география фәндәре докторы, профессор:**

- Башҡортостан, Өфө боронғо карталарҙа ҡасан барлыҡҡа килгән, тиһәк, тәү сиратта, Италия сауҙагәрҙәре ағалы-ҡустылы Пициганолар 1367 йылда төҙөгән картаға күҙ һалырға кәрәк. Ул картала урта быуатта Италияның, Европа илдәренең Алтын Урҙа менән сауҙа иткән ваҡыты сағылдырылған. Шуға күрә унда Алтын Урҙаның 40-тан ашыу ҡалаһы, Иҙел, Кама буйҙары һүрәтләнгән. Шул иҫәптән бөгөнгө Башҡортостан ерендә Пашхарти ҡалаһы күрһәтелгән.Унан ары тағы бер "пашхарти" тигән яҙыу бар.Уныһы башҡорттар йәшәгән ер тигәнде аңлата. Пашхарти ҡалаһы иһә, гидрография яғынан ҡарағанда, Кама, Иҙел буйы тирәһендә урынлашыуы менән бөгөнгө Өфө еренә тура килә.

Европала эшләнгән карталарҙан да боронғораҡтары ғәрәп илдәрендә төҙөлгән. 1154 йылда әл-Иҙриси эшләгән ике карта бар. 70 биттән торған картала, ғәрәп географияһына хас булғанса, донъя ете иклимға (климатҡа) бүлеп ҡарала һәм Башҡортостан ере 6-7-се климатта күрһәтелә. Бында Урал тауҙары, Көньяҡ Урал, Атил, Волга йылғаларының башланған урындары, уларға ҡушылған Әй, Ағиҙел йылғалары күрһәтелгән. Шунда Ағиҙел буйында урынлашҡан Касра, Масра һәм Каракия ҡалаларын әл-Иҙриси башҡорт ҡалалары тип атай. Уларҙың өсөһөн дә башҡорт ҡалаһы тип раҫлау ауыр, сөнки яҙма сығанаҡтар етешмәй. Ләкин, минен уйымса, Касра йә Масрала башҡорттар йәшәгәндер, шул ҡалаларҙың береһе Өфө булғандыр тип раҫларға була. Был башҡорт ерендә борон-борондан ҡала булғанлығын да күрһәтә.

Археологик мәғлүмәттәрҙән тыш, яҙма ҡомартҡылар ҙа, шул иҫәптән боронғо карталар ҙа быға тик фараз тип кенә һаналған факттарҙы бермә-бер дәлилләй, ышандырырлыҡ итеп раҫлай.

Картограф Авраам Крескес Арагон короле Педро III ҡушыуы буйынса 1375-1377 йылдарҙа һигеҙ картанан торған атлас төҙөй. Һуңынан ул карталар донъяның Каталон атласы (Tabula Catalona, Catalon Atlas) тип атап йөрөтөлә башлай. Хәҙер ул Париждың Милли китапханаһында һаҡлана. Атластың бер өлөшө Рәсәйҙә тәүге тапҡыр Новороссийский университеты профессоры Ф.К. Брун тарафынан матбуғатта донъя күрә. Ул картала ла Кама йылғаһының һул яҡ ярында Pascherti (хәҙерге Өфө урынында) ҡалаһы күрһәтелгән.

Тарихсы-географ Матвей Меховский 1517 йылда Краковта сыҡҡан "Трактат о двух Сарматиях" тигән хеҙмәтендә башҡорттар йәшәгән ерҙәрҙе Башкирия тип атай һәм улар үҙ телендә һөйләшәләр, тип яҙа.

Карталар тураһындағы һүҙҙе дауам итеп, күренекле фламанд картографы Герард Меркаторҙың эштәрен атап китергә була. Ул 1554 йылда Рәсәйҙең картаһын төҙөй. Унда Волга, Кама, Һамар, Ырғыҙ йылғалары төшөрөлгән. Ағиҙел йылғаһы буйында Өфө урынында Pascherty тип яҙылған, Урал тауҙары руссаға тәржемәлә "Каменный пояс"тип аталған.

XVII быуат башында Рәсәйгә бер нисә тапҡыр Голландия картографы һәм сауҙагәр Исаак Масса килә һәм Рәсәйҙең бер нисә варианттан торған картаһын төҙөй. Уларҙың береһендә Ҡариҙел йылғаһының Ағиҙелгә ҡушылған урынындағы ҡала Өфө (Pascharti) тип билдәләнгән. Шулай итеп, Европа ғалимдары төҙөгән урта быуат карталарында хәҙерге Өфө ҡалаһы "Паскерти", "Паскатир", "Пашхерти" тип атала. Хатта XVII быуат аҙағы һәм XVIII быуат башы карталарында ла Өфө ҡалаһы "Башҡорт" тип күрһәтелә.

Шуныһы ҡыҙыҡлы, рустар төҙөгән һуңғы карталарҙа ла Өфө ҡалаһы "Башҡорт" тип билдәләнгән. 1737 йылда Санкт-Петербургтағы Фәндәр академияһы "Яңылыҡтар һәм тарихи китаптар уҡыусы үҫмерҙәргә һәм барлыҡ уҡыусыларға файҙаға һәм ҡулланыу өсөн тәғәйенләнгән атлас" баҫып сығара. Был атластың авторҙары билдәһеҙ. Атлас барлығы 22 картанан тора. Уларҙың 18-се һанлыһында Азия картаһы төшөрөлгән. Унда Өфө ҡалаһы урынында Баскирь тигән яҙыу тора. Тимәк, рус картографтары Европаның урта быуат картографтары традицияларын бында күсергән, тигән һығымта яһарға була.

Барлыҡ карталарҙы өйрәнгәндән һуң, шундай һығымта яһарға мөмкин: Өфө ҡалаһына 1574 йылда воевода Иван Нагой килгәс кенә нигеҙ һалына, тигән фекер төптө дөрөҫ түгел һәм ысынбарлыҡҡа тап килмәй.

**Салауат ХӘМИҘУЛЛИН, тарихсы, тележурналист:**

- Өфөгә нигеҙ һалыныу датаһы тураһындағы бәхәстәр боронғораҡ материалдарға нигеҙләнеп алып барылырға тейеш.

Драматик XIV быуат... Ҡазанды ла, Әстрханды ла баҫып алалар. Себергә Ермак һөжүм итә. Башҡортостан ул саҡта Нуғай урҙаһына ҡараған була. Нуғай кенәҙлеге хакимы Исмаил бей Мәскәү менән дуҫлыҡ тураһында килешеү төҙөй. Кремлдә быны уларҙың баш һалыуы тип ҡабул итәләр һәм Көнсығышҡа "һикергә" әҙерләнәләр. Исмаил бей үлгәс, Урыҫ бей хаким була һәм ул тәүҙән уҡ Рәсәйгә дошманлыҡ сәйәсәте алып бара. Ул үҙен бойондороҡһоҙ дәүләт башлығы

***✓ - Ну, Мөхтәр! Ну, Мөхтәр! Уҡыттың бит, былай булғас... - оя эргәһендә ятҡан Ялбыр ирҙең ихлас көлөүенә ҡарап ята торғас, үҙе лә ҡушылып көлдө шикелле. Шулай булмайса, Мөхтәр көсөкләгән…***






Төн ныҡлап ҡуйырған мәл ине. Ошо ҡараңғылыҡҡа ҡайҙандыр килеп ингән дәү ялбыр эт аҙға ғына туҡтап ҡалды. Бер кемгә лә баш бирмәҫ бойондороҡһоҙ ҡырағайлығы, сая ғәйрәте сағылған үткер күҙҙәре дөм- ҡара төн пәрҙәһен телеп, әллә ҡайҙарға үтә ҡараны. Шикләнерлек бер нәмә лә тапманы. Еҫкәнеп, үҙе яңы килеп ингән ихата уртаһындағы ыҡсым йорттоң күтәрмә тирәләрен урап сыҡты. Бында үҙен нисектәр хужаларса дәрәжәле тотоуына ҡарағанда, темеҫкенеп йөрөгән берәҙәк эткә оҡшамаған ул, үҙенә генә билдәле эҙҙәрҙе юллап, таныш ишек алдын инләгәндә аңғармаҫтан бәреп йығырлыҡ әйберҙәрҙе кейектәргә хас тойомлауы менән оҫта урап үтеме, әллә улар бөтөнләй булманымы, һәр хәлдә, эт бында йән эйәһе барлығын фашларҙай өн-тын сығарманы. Ҙур кәүҙәһен еңел генә йүгертеп, бер-ике әйләнгәндән һуң, ҡапҡа эргәһендәге еңелсә әтмәләнгән иҫке тар ояға йылт итеп инеп китте. Нисәмә йылдар ҡабатланғандан, инде аңына һеңеп, шымартып йышылған хәрәкәт-аҙымдарын йылдам сослоҡта теүәл үтәне. Тәүге ынтылғанда уҡ башы ояның төбөнә терәлде, ҡаҡ маңлайы шунда бәрелеп өлгөргәнсе, ул ҡырҡа артҡа боролоп, кәүҙәһен һындырыр сиккә еткереп, билдән урталай бөктө, мороно ҡойроғо менән тинләшеүгә артҡы тәпәйҙәрен эскә тартты. Шул ыңғайҙа бөтә кәүҙәһе ҡапыл ергә сүкте. Алғы тәпәйҙәре үҙҙәренән үҙҙәре бер-береһенә ҡатланып йәтешләнгәндән һуң, уларҙың өҫтөнә былай ҙа һалпы ҡолаҡтарын аҫҡа һалындырып, Ялбырҙың башы һалынды. Мороно аша кәүҙәһен еткән тиклем ҡойроғо менән ҡаплағас, хәрәкәттәр ҡырҡа туҡталды.

Ошолай әҙерәк кенә ятһа, Ялбыр, һәр ваҡыттағыса, үҙ йылыһына сумасаҡ. Тик бөгөн килеп сыҡманы, өшөүе көсәйҙе генә. Тимәк, әҙерәк кенә яңылышыраҡ ятты. Әммә нимәнелер төҙәтәм, тип, ҡыбырлап, йыйған ғына йылыһын юҡҡа сығарғыһы килмәнеме, ул ҡымшанманы ла, ята бирҙе. Йоҡларға йыйынмай ине булһа кәрәк, күҙҙәре асыҡ ҡалды.

Эттең кәүҙәһенә ҡарап самалағанда был оя бер нисек тә уныҡы була алмай кеүек - эт ныҡ ҙур, ә оя самаһыҙ бәләкәй. Ә бит эт тап ошо ояныҡы, юҡ, был оя ошо эттеке.

Ҡасандыр Ялбыр бында хужалар рәтендә йәшәне. Көсөк кенә көйөнсә алып ҡайтҡайнылар уны.

- Әйҙә, Мөхтәр, һөттән ауыҙ ит, - оҙон буйлы йәш ир шулай яратып һөйләнә-һөйләнә, төртһәң, ярылырҙай тумалаҡ эсле йөнтәҫ көсөк балаһы алдындағы бәләкәй туҫтаҡҡа һөт ҡойҙо. - Әҙерәк түҙһәң, мин һиңә хан һарайы эшләп бирермен, дуҫ. Ну, рәхәтләнеп йәшәйәсәкһең...

Ә көсөк ҡарһаланып һөткә йәбешһә лә, нимә менәндер риза түгел, йөндәрен тырпайтып, хужаһына асыулы ҡарап-ҡарап ала. Тегеһенең ҡулы яҡынлаша башлаһа, ырылдап, артҡа сигенә биреп үҙенә ҡағылдырмаҫҡа итә. Тилбер ҡулдар был ризаһыҙлыҡты һанға һуҡмай, барыбер уны тота, иркәләй. Был көсөктөң асыуын тағы ла арттыра, хужаны тешләр хәлгә еткерә. Ир быны эттең усал булмышына ауҙара ла, ҡыуанып, тағы һөйләнә:

- О, усал ғына булмаҡсыһың , шаш. Бара, бара... Бик шәп буласаҡ. Вәзирә күршенең теге ҡупырыш әтәсен аҡылға ултыртабыҙ бит, әй, былай булғас. Юғиһә, һуңғы ваҡытта бигерәк шашты. Үҙемдең ихатаға үҙемде индермәй, суҡынсыҡ...

Был ирҙән иркәнән башҡа зыян күрмәҫен аңлай башлаған көсөк әҙерәк тынысланғандай, артабан һөт сәпелдәтә. Үҙе шунда ырылдап-ырылдап һөйләнә: "Түгел мин Мөхтәр, түгел. Ялбыр мин, Ялбыррр..." Әлбиттә, хужа уны аңламай, тумалаҡ көсөктөң ҡәнәғәтһеҙ һөйләнеүен ябай ырылдау тип кенә ҡабул итә. Һыңар ҡулы менән йоморсаҡ эт балаһын төрткөләп-төрткөләп үҙ хәбәрен теҙә.

- Саҡ күндерҙем бит Маһикамал инәңде. Бер аҙна инәлтте. Шул ырҙынын һинән һаҡлатмаҡ була, үҙе һаҡлаһын. Мөхтәр, Мөхтәәәр... Исемең дә оҡшай. Шулай ҡалдырабыҙ, килештекме? Теге Никулиндың Мухтары бит инде, беҙҙеңсә Мөх-тәр. Никулин урыҫ бит, уныҡы Мухтар, ә һин беҙҙеке, шуға Мөх-тәр...

Көсөк уғата йөнөн тырпайта, ризалашҡыһы килмәй, тағы ырылдай: "Түгел мин Мөхтәр, Мухтар ҙа түгел... Ял-быр мин, Ял-быррр! Аңлайһыңмы, юҡмы, һин тиҫкәре әҙәм! Өсәү булдыҡ беҙ инәмдә - Йылғыр, Өлгөр, Ялбыр. Ялбыр мин... Ялбыррр... "

Яңы хужаһы, шайтан Хәмит кенә, уны аңламаны. Аңларға, ул бит әҙәм. Быны хәҙер Ялбыр асыҡ белә. Теге ваҡытта ул балалығы менән эттәр ҙә, кешеләр ҙә бер төрлө һөйләшә тип уйлағайны. Һөйләшмәй икән шул. Кешеләр, гөмүмән, хайуандарҙы аңламай, ә улар кешеләрҙе аңлай. Сәйер...

* * *

Хәмиттең вәғәҙә иткән хан һарайына - ҡапҡа төбөндәге ошо ояға килеп ултырғандан һуң бер көндә Ялбыр үҙенең Мөхтәр түгеллеген иҫбатланы. Йәйге иртәләрҙең береһендә оҙайлы командировканан төнләп кенә ҡайтып, күтәрмәлә юл сумкаһында ҡутарынып ултырған Хәмиттең ҡолағына ниндәйҙер сыйылдаҡ тауыштар салынып ҡалды. Ул һағайҙы. Тауыш Мөхтәрҙең ояһы яғынан сыҡҡан кеүек. Ир урынынан тороп баҫты. Ҡымшанмай ғына шул яҡҡа ҡолаҡ һалды. Сыйылдау тауышы тынып тора ла бер ни ваҡыттан һуң оя эсендә яңынан ҡуба. "Берәү генә түгел, бер нисәү булырға тейеш..." Хәмиттең ирен ситтәренә йылмайыу ҡунды, былай саҡта аруҡ ҡына аҙымлаған арауыҡты бер ынтылыуҙа үтеп, ояның ауыҙына күҙ һалды ла шаңҡылдата көлөп ебәрҙе:

- Ну, Мөхтәр! Ну, Мөхтәр! Уҡыттың бит, былай булғас... - оя эргәһендә ятҡан Ялбыр ирҙең ихлас көлөүенә ҡарап ята торғас, үҙе лә ҡушылып көлдө шикелле. Шулай булмайса, Мөхтәр көсөкләгән...

Ояның эсендә әле күҙҙәре асылмаған өс йоморсаҡ эй сыйылдашалар. Мәж киләләр. Хәмит шуларҙы донъяһын онотоп ҡарап ултырҙы ла, Ялбырҙы ояға этеңкерәп:

- Бар, имеҙ инде, артист, - тине.

Үҙе көлә-көлә урамға сығып юҡ булды. Күп тә үтмәй, йыуан бер ҡатынды, тышылдатып, эйәртеп алып килеп, оя ҡашына баҫтырҙы ла:

-Йә, Маһикамал апай, ни әйтерһең? -тине.

Тегеһе бот сапты, устары менән ауыҙын ҡапланы ла Хәмиткә ҡараны.

- Ә ни эшләп һин уны миңә Мөхтәр тип, алдап бирҙең? - тине Хәмит Ялбырға төртөп күрһәтеп.

- Бынағайыш, ни эшләп алдай ти инде, алдаманым мин һине. Минең, ни, бөтә эттәрем дә Мөхтәр була...

- Нисек?

- Эт булғас, минеңсә, ул мотлаҡ Мөхтәр булырға тейеш...

- Ә ни эшләп әле һинең эттәрең мотлаҡ Мөхтәр булырға тейеш? Сәбәбе барҙыр ҙа бит, Маһикамал апай...

- Ун етем дә тулмаған ине, Мөхтәр еҙнәңә кейәүгә сыҡҡанда.- Хәмит хәлдең былай боролош алырын көтмәгәнгә, Маһикамалға аптыраңҡырап ҡаранымы, ауылдашы тауышын күтәреберәк ризаһыҙлыҡ белдерҙе, - Нимә аптырайың? Был тиклем мискәгә кем өйләнде икән, тип, тораһыңмы? Мин, белгең килһә, йәш саҡта һинең Сәлихәңдән күпкә һылыуыраҡ инем. Бөтә донъяла бер Сәлихәгә генә матур булырға тимәгән бит, беҙ ҙә матур булдыҡ... Шул. Йәш саҡ, күңелдәр килеп тороп иләҫ. Бөтә донъяла ул да һин тип уйлайһың. Бәхеттең сик кенәһе юҡ кеүек. Тик бар икән сиктәр, бар. Ике йыл йәшәнек тигәндә, ауылға ҡунаҡҡа ғына килгән анау һары Рәйсәнең әхирәтенә әүрәп, икәүләп төндә ҡасып киттеләр. Йоҡларға ятҡанда бар ине Мөхтәрем, тороуыма тю-тю. Тю-тю, белдеңме? Мин уны кешегә һанап йәшәп ятҡан булғанмын, ә ул ошо эттәр шайы ла күрмәгән мине. Бына нимәһе ҡыйын... Йәш кенә көйөнсә ырҙынға төнгө ҡарауылсы булып эшкә барҙым. Шундағы игенде уңлы - һуллы ебәрмәйем тип, эт һымаҡ тороп, "эт Маһикамал" тигән данымды сығарҙым... Шулай булмаһаң, ҡарауылсы эше бармай ҙа, эт тә булынды... Этһеҙ ҙә булмай унда, эргәмдә ҙурыраҡтан, уҫалыраҡтан берәүе гел булды. Этһеҙ торманым. Бынан алдағы икәүһе лә Мөхтәр булғайны,- Маһикамал эйәге менән Ялбырға ымланы, - быныһын да шулай исемләгәйнем, тегеләре, ни, балаламағас, уйлағаным да булманы... Еҙнәңдең исеме ул Мөхтәр...

Тап шул мәлдә йорт ишеге асылды. Тупһаны ҡупшы ғына аша атлап күтәрмәгә ҡыпҡыҙыл туфлиҙар сығып баҫты. Өҫтә бер сама ҡылансыҡланғандан һуң, туфлиҙар береһенән береһе оҫтараҡ баҫырға тырышып, күтәрмә баҫҡыстары буйлап аҫҡа төштө. Йәшел үләнгә терәлгәс, улар йәнәш баҫтылар ҙа остарын күтәреп-күтәреп үксәләре ергә күпмерәк батҡанын самаланылар. Ослоҡай үксәләр ергә ҡаҙалып ингәнлектән, артабан ҡыҙыл туфлиҙар аяҡ остарында рәтһеҙерәк килделәр ҙә Маһикамал менән Хәмиттең уртаһына торҙолар. Шунда туфлиҙар, дөрөҫөрәге, уларҙың хужабикәһе күп көттөрмәй телгә килде:

- Хәмит, бәгерем, мин бөгөн һуңлабыраҡ ҡайтырмын инде. Раушанияның тамағын ҡайғыртырһың, бер нәмә лә өлгөртә алманым...

Ир булған кеше бер аҙым артҡа баҫып, ҡатынын баштанаяҡ күҙҙән үткәрҙе лә:

- Маһикамал апай менән һаулыҡ һорашһаңсы, Сәлихә туташ, - тине. Сибәр ҡатын был һүҙҙәрҙән һуң аптырау ишаратын матур йөҙөнә йыйған булды ла, күҙҙәрен ҙур асып:

- Әйтәм, эт еҫе килә. Ырҙын эте килгән дәһә. Кит, Хәмит, торма уның эргәһендә, һиңә еҫе күсер. Мин бит эт еҫен яратмайым... - тине, үҙе Маһикамалға артын ҡуйып, иренә һарылғандай яҡын килде. Был тиклем кәмһетеүҙе көтмәгән Маһикамал:

- Оялыр инең әҙерәк, Сәлихә килен. Хәмит кеүек түҙемле ирҙәрҙән дә түҙеме мәңге түгел, мынауындай йүнле ирең алдында йүнһеҙлегеңде күрһәтмәһәң... - тине. Сәлихә килештереп буялған керпектәрен матур асыпйомдо ла, уймаҡ ирендәрен ослайтып:

- Йүнле ирҙең Мөхтәре балаламай, - тине.

Ошо һүҙҙәрҙән һуң Сәлихәне ҡыҙыл туфлиҙары был тирәнән алып китте. Уларҙың артынан ҡапҡа шапылдап ябылғас, Хәмит телгә килде:

-Ишеттеңме, Маһикамал апай, нимә тине. "Йүнле ирҙең Мөхтәре балаламай" тине. Ә бит дөрөҫ әйтә киленең. Кеше теленә эләкһәң, күр ҙә тор, бына бер быуын онотҡансы һөйләйәсәк. Исмаһам, әйтһәң ни була, кәнтәй булыуы ихтимал, тип...

- Ә мин ҡайҙан беләйем. Нишурта ла белмәйем. Ҡойроҡтарын күтәреп күрһәтһәгеҙ ҙә мин уларҙың кәнтәйме, арланмы икәнен айыра аласағым юҡ, вәт...

Ялбыр талаштың сәбәпсеһе булараҡ, был икәүҙең ҡаршыһына баҫып, ҡойроғон болғап, ниҙер әйтергә теләгәндәй, алмаш-тилмәш әле береһенә, әле икенсеһенә ҡараны. Эттең был ҡыланышы тегеләрҙе әҙерәк тынысландырҙымы, улар тынып ҡалды. Маһикамал ауыр көрһөндө, Хәмит тубыҡланып, бармаҡтарын Ялбырҙың ҡуйы йөндәренә батырҙы, үҙе һөйләнеүен белде:

- Йә, ҡылыҡты ҡылғас, әйт инде, миңә һинең менән ни эшләргә? Хәҙер һиңә нисек өндәшергә? - Һәр ваҡыттағыса "Мөхтәр дуҫ" тигәнен әйтергә теле әйләнмәне, ҡыҙ бала икәнен белә-күрә ир исеме менән атап булмай ҙаһа, шуға ла: - Ялбыыр, эх, ялбыыыыр, - тип, тарамыш бармаҡтары менән эттең ҡуйы йөндәрен тараны.

Ялбыр тертләне. Әсәһе ҡушҡан исем менән өндәште уға хужаһы. Тәненән йылы тулҡындар йүгерҙе. Күңелен ҡыуаныс биләне. Хужаһына иркәләргә рөхсәт итеү генә түгел, үҙе лә ихлас иркәләнде. Эттәге был киҫкен үҙгәреште Хәмит шул минуттарҙа тойманы, ул бит күңеленән генә этенең енесенә ярашлы исемдәрҙе барлай ине. Үҙгәреште Маһикамал аңғарҙы:

- Ә һин, туғаным, Ялбыр тип ата уны. Ҡыҙҙарға ла, малайҙарға ла бара был исем. Ана, һин "Ялбыр" тип өндәшкәс, ҡайһылай оҡшатты бисараң.

Шул көндән башлап Ялбыр үҙ исемен ҡайтарҙы.

* * *

-Ялбыр, һеңлекәш, бер үтенесем бар, - тине бер көн Хәмит этенең ояһы эргәһенә сүгәләп. Үҙе устары менән ошо ояны һыпырҙы. - Ғәфү ит, ояны бәләкәйерәк эшләгәнмен. Мин бит һине ошо сама ғына булырһың, тип, уйлағайным, - ул һыңар ҡулы менән үҙе самалаған бейеклекте күрһәтте. - Ояңды яңыртырмын тигән уй бар ине, күрәһең, яҙмағандыр. Миңә күп ҡалманы. - Ошо урында Хәмит тәрән уйҙарына сумды. Күңелендә нимәләрҙер барланымы, йә ярым бышылдап, йә бөтөнләй тынып ҡалып, хәтһеҙ генә ултырҙы... Шунан, ниндәйҙер ҡарарға килдеме, әллә ышанып һөйләрлек башҡа

**✓ Эт үҙендә ике төрлө тойғо кисерҙе. Бер яҡтан, ырҙында ҡалған балалары алдында үҙен ғәйепле тойһа, икенсе яҡтан, ошо баланы ҡотҡара алыу ҡыуанысы күңелен кинәндерҙе. Сабыйҙы ташлап китә алманы Ялбыр.**



йән эйәһен тапманымы - Ялбырға ялбарыулы ҡарап һүҙен дауам итте. - Беләһеңме, Сәлихә менән йәшәүҙәре шәкәр түгел. Эйе, мин уға яратып өйләндем. Туғандарым бөтәһе лә ҡаршы булды. Шул ҡурсағыңды телевизор башына ғына ултыртып ҡуймаһаң, башҡаға эшкинмәс, тинеләр. Ә бына балаға әсәнең аҡылы кәрәк икән. Баламды йәлләйем, Раушаниямды. Мин китеп-нитеп барһам, Сәлихә уның башына ғына етәсәк. Эйе, эйе, етәсәк. Беләһеңме, нисек кенә итеп әрләмәй ул. Раушаниямдың күңеле ҡатып ҡуймаһын өсөн, Сәлихәнең булған эттелеген көлкөгә һабыштырам. Сәлихә туҙынһа, уны аҡылға ултыртам, тиеп, мин дә туҙынһам, ул бала йылмайырға ла онотор ине. Шуға әсәһе көлә торғанды ла, үҙем көлә торғанды ла көлгән булам. Мине, ни, шул шайтанлыҡ ҡына ҡотҡара. Ен эргәһендә шайтан булмай хәлең юҡ. Ен бит ул Сәлихә. Йәне юҡтыр, ене бар... Ярай, Ялбыр, улары һиңә кәрәкмәй ҙә. Бары бер үтенесемде тыңла. Ҡыҙыма атайҙың иң кәрәк сағында китәм, ҡалайтаһың, артығын йәшәргә Хоҙай ҡушмаған... Көндәремдең һанаулы ғына ҡалғанын бөгөн белдем. Сәлихәгә генә көс етер ине лә, ауырыуыма көсөм етмәс, яман шешкә әйләнгән... Ҡыҙымды ҡурсалап ҡына үҫтерәмен, тигән инем, ғүмерем етмәй икән. Раушания һиңә ҡала инде, һиңә тапшырам. Һинең ғүмерең етергә тейеш. Көндөҙ туҙынмай Сәлихә, төнөн ул ҡурҡыныс. Төнөн баламды башына етеп ҡуйыр, тием. Һин шуны ҡараңҡыра инде, ҡара. Төндә йоҡлап ятып, баламды аямаһаң, мәңге ризалығым булмаясаҡ... Ҡыҙ бала бит, йә үҙе ғәрләнер, ете төн уртаһында сығып китер, йә, тағы ла ҡурҡыныcыраҡ аҙымдар яһап ҡуйыр, тием. Иң ғәрсел мәле бит уның... - Шунда гел көлгән шалтаҡ хужаһының илағанын күрҙе Ялбыр. Иланы Шайтан Хәмит, "ҡыҙ баламды ҡыҙғынам" тип һамаҡлай-һамаҡлай оҙаҡ иланы...

* * *

Ҡупшы Сәлихә күп көттөрмәне, Ялбырға ла ысын йөҙөн күрһәтте.

Хәмитте ерләгәс, ул бигерәк килештерҙе. Уның уйлауынса, "заманса" йола, тимәк, мотлаҡ русса булырға тейеш ине, ай тирәһе урыҫ халҡына тартым итеп ҡап-ҡаранан кейенеп йөрөнө. Ауылдаштары ҡатындың бындай аңһыҙ ҡыланышын икеләтә ауыр кисерҙе, Хәмиттәренең яҡты иҫтәлегенән көләү бит был, диндән көләү, беҙҙекен дә, рус халҡыныҡын да ихтирам итмәү... Иманына килтерерҙәй һүҙҙәр менән дә Сәлихәне күндерә алмағас, ауылдаштары ҡул һелтәне. Сәлихәгә иғтибар итмәҫкә тырыштылар.

Бер Ялбыр ғына дин, йола төшөнсәләренән алыҫ торғас, хужабикәнен йәлләүҙән туҡтаманы. Әмәлгә ҡалғандай, шул көндәрҙә тағы көсөкләне. Иртәнсәк эшкә юлланған Сәлихәнең аяҡтарына һырылды. Балаларын күрһәтмәксе булды. "Көсөктәрҙе күрһә, әҙерәк ҡайғыһын онотасаҡ", тип уйланы. Тик өмөттәр аҡланманы. Боттарына ҡағылған этте тибеп ебәрҙе Сәлихә, күҙҙәрен шар асып сөрөлдәне:

- Ҡағылма минә, эт нәмәкәй, ҡағылма, йолҡош! Емтек еҫе килә һинән, эргәмә яҡын килмә, кәнтәй!

Ялбыр артҡа сигенде, тибелгәндән ауыртынманы, әшәке һүҙҙәрҙән ауыртынды шикелле. Ҡойроғон артҡы боттары араһына ҡыҫып, был тирәнән тиҙерәк китергә тырышты, Сәлихәнең күҙенә башҡа салынмаҫҡа ҡарар итте.

Бының менән генә бөтһә, ҡана һуң да, иң ҡурҡынысы шул көндө кис булды. Көсөктәрен имеҙеп ятҡан Ялбырҙың эргәһенә Сәлихә яртылаш һыулы биҙрә ултыртты. Ялбырҙың ҡуйынынан бер көсөктө ҡулына алды. Йылмайғанда нығыраҡ төҫһеҙләнгән нурһыҙ күҙҙәре менән эткә мыҫҡыллы ҡараны. Көсөктө тотҡан усын башынан юғарыраҡ күтәреп тантана менән биҙрә өҫтөнә күсерҙе. Шунда ус бармаҡтарын яҙҙы. Көсөк биҙрәләге һыуға осто...

Ялбыр йәшен тиҙлегендә тороп баҫты, биҙрәлә сараһыҙ сәбәләнгән балаһына ынтылды. Ҡот осҡос күренештән күҙҙәре томаланды, ҡанһыҙ ҡыланған ҡатынды өҙгөләр сиктә айбарланып, Сәлихәгә ташланды, уның яланғас беләгенә умырып тештәрен батырҙы. Йылғыр Сәлихә эттең тештәренән ысҡына алды. Алдан әҙерләп ҡуйғандыр, күсәктәй таяғы менән Ялбырҙы, үсе ҡанғансы, йәлләмәй оҙаҡ туҡманы...

Ҡалғанын Ялбыр белмәй, фараз ғына итә. Иҫенә килгәндә бөгөнгөләй ҡуйы ҡара төн ине. Ялбыр тормаҡ булды. Артҡы һанын бөтөнләй тойманы. Балаларын күреү теләге көслөрәк ине, шул теләк эттең ярым үлек кәүҙәһен һөйрәп ояһына алып килде. Оя буш ине. Тимәк, Сәлихә...

Ҡолай-ҡолай һөйрәлеп ошо ихатанан сығып киткәнендә "был тиклем ҡайғыларҙы күтәрә алмаҫмын" тип уйлағайны, күтәрҙе... Тәнендәге яралар ҙа уңалмаҫ кеүек ине, уңалды, күңелендәгеһе уңалманы... Ҡуйынындан тартып алып, гәзиз балаларыңды бәреү дөмөктөрһөн әле, йөрәген шартлар! Шундай ҡанһыҙҙарҙы ғүмере буйы ҡарғап ҡарғай әсә булған йән эйәһе. Ваҡыт үткәс тә баҫылмай әсә әрнеше, уның ихтыярынан тыш, ҡарғыштар булып яуа ла яуа...

* * *

Хәмиттең теге саҡтағы үтенесе булмаһа, Ялбыр был ихатаға дүрт тәпәйенең береһен дә баҫмаҫ ине. Хужаһы алдындағы өнһөҙ вәғәҙәһе хаҡына Раушанияны һаҡларға килә ул бында, төндә генә килә. Яҡлай алмай, һаҡлай ала, шуға ла килә. Таң атыуға, Сәлихә тороп сыҡҡанға тиклем Ялбыр был тирәнән китергә тырыша, Сәлихәнән ҡурҡҡанға түгел, уны күргеһе килмәгәнгә...

Тиҙ арала ете төн урталарында ла ишек алдынан Раушаниянең эҙҙәрен айырым уяулыҡта юллап табырға, һәм уларҙан ҡыҙҙың йөрөгән юлдарын ғына түгел, күңел торошон да һиҙемләргә өйрәнде Ялбыр. Һуңғы арала ниңәлер нығ бошона ҡыҙыҡай, шуға Ялбыр һағыраҡ ята, йорт яғынан килгән шылт иткән тауышҡа ла ныҡлап ҡолаҡ һала, тыңлай.

Төн яртылаш ауҙы инде. Күп ҡалманы. Ялбыр ырҙында ҡалған көсөктәрен уйланы. Ни эшләйҙәрҙер, имергә эҙләп, төрткөләшеп, бер-береһен уятып бөтөп, хәҙер эй сыйылдашаларҙыр, Маһикамал уны эт итеп әрләйҙер. Ҡайтып тиҙ имеҙеп килергә кәрәк, юҡһа, иртәнсәк Маһикамалдан ишетмәгәнен ишетәсәк. Ялбыр тормаҡ булды. Шул саҡ өйҙөң ишеге асылды, эт кире боҫто. Өйҙән Сәлихә сыҡты. Ҡулына нимәнелер төрөп тотоп, көртә яғына үтте. Атлағанда матур баҫманы. Бер аҙҙан кире өйгә инеп китте. Ингәндә ҡулы буш ине...

Ялбыр һағайҙы. "Төн уртаһында, тик торғандан, нимә мәшәҡәтләгән Сәлихәгә, нимәне сығарып ташланы?" Ул оянан сығып, шым ғына Сәлихә булашҡан яҡҡа ыңғайланы. Танауына сәйер бер еҫ салынды. Еҫ таныш та, таныш түгел дә һымаҡ. Шул еҫте юллап килә торғас, Ялбыр сепрәккә арлы-бирле генә төрөлгән баяғы төргәккә мороно менән төртөлдө... Шунда төргәк ҡыбырлағандай иткәс, нығ тертләне... Артабан һағыраҡ ҡапшанғас, төргәк эсендә йәш бала ятҡанын төшөндө. Йәш бала, кеше балаһы! Ялбыр албырғап ҡалды, мейеһен йөҙ уй, йөҙ һорау телеп үтеп, шуларҙың араһынан "Бала?.. Ниңә ташланы?.. Ни эшләтергә?.." тигәндәре йышыраҡ яңғыраны.

Шул саҡ сабый көсһөҙ генә тауыш бирҙе. Хәлһеҙ генә ҡыбырланы. Эттең инәлек булмышы тынысһыҙланып, баланы ҡурсалау сараларын барланы. "Маһикамалға алып барырға! Ул белер ни эшләтергә, Маһикамалға алып барырға..." Ялбыр, ҡабаланып, сепрәге менән ҡуша тешләп, баланы күтәрмәк булды, килеп сыҡманы. Сепрәк тағатылып һыпырылып сыҡты, бала сыр яланғас көйөнсә ерҙә ятып ҡалды... Эт аптыраны... Күпкә түгел, мороно менән төртөп, ерҙә ятҡан баланы әйләндерҙе лә елкә тирәһенән эләктермәк булды, тештәре йәш баланың тиреһенә үтә ҡаҙалды. Ысҡындырҙы. "Былай итһәң, тегендә барып еткәнсе, үләсәк бит был кеше балаһы, ул саҡта унда алып барыуҙан ни файҙа? Ни эшләргә?.. Маһикамалдың үҙен бында алып килергә!.. Эйе, Маһикамал төн уртаһында, ырҙынын ҡалдырып, һинең артыңдан эйәреп йөрөй, ти. Үҙен күреү менән көсөктәрендә ҡуйынына тығасаҡ та оҙаҡ ҡына һине ҡамап торасаҡ. Ул бит эт йөнлө, уға кеше ҡайғыһы төштән һуң... Ни эшләргә?.."

Ялбыр ни эшләргә белмәй ыуаланғансы, кескәй ныҙыраҡ тынғыһыҙлана башланы. "Өшөйҙәр, йәй түгел бит". Бындай саҡта януарҙар көсөнән килерлек бер генә нәмәне эшләй ала ине, ул да булһа баланың эргәһенә ятыу, үҙ йылыһында йылытыу... Ялбыр шулай итте лә. Баланы ҡосаҡлағандай итеп эргәһенә яҡын ятты, бер аҙ икеләнгәндән һуң тулыһынса ҡуйынына йәшерҙе. Тегеһе шуны ғына көткән тиерһең, Ялбырҙың һөт тиртеп торған имсәктәренең береһенә сат йәбеште. Имә баланы. Тымды. Эт үҙендә ике төрлө тойғо кисерҙе. Бер яҡтан, ырҙында ҡалған балалары алдында үҙен ғәйепле тойһа, икенсе яҡтан, ошо баланы ҡотҡара алыу ҡыуанысы күңелен кинәндерҙе. Сабыйҙы ташлап китә алманы Ялбыр. Ярай, уныҡылар тегендә Маһикамал ҡарамағында, ә бынһыһы бит Ялбыр ҡулында, юҡ, тәпәйендә... Хәйер, уныһы мөһим түгел, баланың инә ҡуйынында булыуы мөһим...

* * *

Үҙ ихатаһында боҫа-боҫа атлаған Сәлихәнән төн дә, көн дә берҙәй ғәрләнде, береһе был тирәнән ырғып тороп тиҙерәк китте, икенсеһе аяҡ та баҫманы. Төнһөҙ, көнһөҙ тороп ҡалған ер генә Ялбыр хаҡына, уның ҡуйынындағы бала хаҡына ауыр гонаһты күтәрҙе...

Һәрмәнеп тигәндәй килгән Сәлихә Ялбырҙы күргәс, ҡатып ҡалды. Тарҡау аңын туплай алмай бер булды. Эттең нәфрәт тулы үткер ҡараштары ҡатындың күҙәһен телеп, әллә ҡайҙарға үтә ҡарай ине. Тегеһе шөбһәле йүгерек күҙҙәре менән эт тирәһен байҡап өлгөрҙө... "Бала юҡ! Тимәк, уны Ялбыр..." тигән уй ҡатынды әҙерәк тынысландырҙы, хатта үҙенең әшәке булмышына кире ҡайтарҙы:

- Нимә, тамағың туйып ятамы? Тәмле булдымы? Ҡорһағың асҡаҡлап йөрөгәндә таман булғандыр. Темәҫкенеп емтек ашауға күстеңме? Кәнтәй! - үҙенең тәбиғәттән бирелгән кәнтәйлегенән кәмһенмәне, шул һүҙҙең кәмһетеп әйтелгәненән кәмһенде Ялбыр, ҡатындың күҙҙәренә сәнсеп ҡараны. Шул ҡараштан әҙерәк шөрләнеме, артабан Сәлихә йомшағыраҡ һөйләнде. - Минең арттан таҙалап ҡуйғанһың, бик ваҡытлы тап килгәнһең...

Тап шул мәл эт ҡуйынындағы сабый ярһып илап тауыш бирҙе, ул да бит әҙ генә булһа ла яҡшыраҡ мөнәсәбәтте тоя, шуғалыр, бәлки, үҙенең был донъяла барлығын аңғартҡыһы килгәндер ҡанһыҙ булһа ла ҡан ҡәрҙәш һаналған яҡын кешеһенә...

Сәлихә телһеҙ ҡалды. Ситай күҙҙәре улай-былай йүгергеләне, тантана иткән йөҙө ҡапыл хафаға ҡалды. Бер ағарҙы, бер күгәрҙе. Хәленең сараһыҙлығынан ни эшләргә лә белмәй, эттең ҡаршыһында тораташтай тора бирҙе.

Ялбырҙың ерҙән ярым ҡалҡынған дәү кәүҙәһе ҡымшанманы, уның теләһә ниндәй һөжүмгә лә әҙер аяуһыҙ ғәйрәтен Сәлихә бөтә тәне, йәне менән тойҙо. Эт һуңғы һулышына тиклем алышһа ла баланы бирмәйәсәген аңланы.

Сәлихә ваҡыт иҫәбен юғалтты...

* * *

-Сәлихә тим, Сәлихә! Нимә булды? Баянан бирле күҙ һалам, ошонда баҫып ҡаттың да ҡалдың. Йә, ҡымшанмайһың, йә, китмәйһең... Донъяңды онотҭоңмо әллә?

Күршеһе Вәзирәнең тауышына Сәлихә ҡорт саҡҡандай әйләнеп ҡараны, тиҙ генә үҙен ҡулға алды:

- Ә, күрше, һин икән! Абайламай ҙа торам. Бер нәмә лә булманысы, - үҙе шул арала ялт-йолт ҡаранды. Вәзирәнән башҡа бер кем дә юҡ икәнен күргәс, тегене был тирәнән алып китмәк булды, килеп сыҡманы. Ярһып илаған тауыш уларҙы туҡтатты... Вәзирә һағайҙы, башта тауыштың ысынлап та ишетелеүенә инанды, шунан тауыштың ҡайҙан килгәнен самаларға тырышты. Сәлихәнең еңенән тотоп:

- Тссс.... Туҡта әле, Сәлихә... Ишетәһеңме? Бала илаған һымаҡ ишетеләсе ҡолағыма, -тине.

Сәлихә Вәзирәнән ысҡынмаҡ булдымы, әллә уны ситкәрәк алып китмәксе иттеме, ененә йәбешкән Вәзирәне һөйрәй биреп ҡуйҙы ла туҡтаны. Ә күршеһе уның был ҡыланышынан сәйерһенмәй, бар иғтибарын туплап, һаман тыңлай бирә:

- Ииии, ҡайһылай тауыш ҡынаһы матур... Илағанда ла йырлаған кеүек итеп иларға белә тиңсәле...

Көйлә һөйләнгән Вәзирә шунда Сәлихәне ысҡындырҙы, Ялбырға тиклем килде. Был яғымлы тауышҡа эт тә ҡаршы тора алманы, ситкәрәк шылды. Уның урынында ятып ҡалған баланы күргәс, Вәзирә тейен етеҙлегендә эйелде. Ҡиҫкен хәрәкәттәр эшләмәҫкә тырышып, сабыйға иплә тотондо. Бәләкәс кенә тумарлаҡты ҡапшаны, рәтләп устарына ҡыҫты. Ерҙән күтәрҙе.

- Бәй, бала бит был, бала! - алабарманыраҡ Вәзирә баланы тәүләп ҡулға алған мәлдең илаһи кисерештәрен шулай ҙа бар нескәлегендә тәне аша үткәрҙе, ҡыуанды, - Собханалла, собханалла! Бәләкәс кенә. Ни саралар менән бында ерҙә ятаһың, бисараҡайым? Өшөп кенә бөткәнһеңдер, бит... Малай, малай бит... Әйҙә, төклө аяғың менән, тип, әйтергә кәрәкме әле, эй, ошондай саҡтарҙа еренә еткереп әйтә лә белмәйем шул... Телдәр тиҙәр, телдәр тиҙәр, бер йүнле хәбәр ҙә һөйләй белмәй иҫәр Вәзирә инәйең... - Вәзирә шунда һүҙҙәрен бутаны, әҙерәк иҫен йыйҙы, хәлдең айышына төшөнә башлағандай, диҡҡәт менән Сәлихәгә текәлде. -Һин нимә, Сәлихә? Был һинең эшеңме әллә? Нисек ҡулың барҙы? Кемдән таптың быны, оятһыҙ! Хәмит мәрхүмдеке тип әйт, телең барһа! Уның үлгәненә ҡасан... Кемдеке, тием? Кемдеке, кәнтәй... - арттан ишетелгән хәлһеҙ генә тауыш уны шунда уны һиҫкәндерҙе:

- Минеке ул, Вәзирә апай! Тереме әллә? Әсәйем бит "үле булып тыуҙы" тигәйне... Бирегеҙ миңә баламды, Вәзирә апай.

Вәзирә яй ғына артына боролдо. Унда аяҡтарына көскә баҫып Раушания тора ине. Шунда телдәр Вәзирә лә донъялағы барлыҡ һүҙҙәрҙе онотто шикелле, өндәшмәйенсә генә һонолоп йәш ҡыҙға баланы тоттороҙо...

Балаһы менән бергә Раушанияға бәхет ҡунды, уның күҙҙәрендәге һүнә башлаған осҡондарҙы тоҡандырып, битен яҡтыртты. Унан бәхетле нурҙар тәүҙә сабыйына, шунан Вәзирә менән Ялбырға һибелеп, уларҙың да йөҙөн матурайтты. Тик Сәлихәне генә урап үтте нурҙар. "Мин генә..." тигәндәрҙән бәхет тә ҡаса шул...

* * *

Бер аҙҙан Ялбыр ҡояшҡа ялбыр йөндәрен ялпылдатып, үҙе лә ҡояштай һары дәү эт менән ырҙын яғына йомолоп саба ине.

✓ *Мөхәммәт бәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм): "Рамаҙан айында башҡарылған изге эштәр ураҙа фитыр сәҙаҡаһы үтәлмәйенсә Аллаһы Тәғәләгә барып етмәйәсәк", - тигән.*



ИНТЕРНЕТТАН



# АШАҒЫҢ КИЛҺӘ...

## йоҡла

■ Коллективта ҡатын-ҡыҙҙар әҙерәк булһа, унда хеҙмәт итеүсе ир-егеттең ғүмере ҡыҫҡара, тип белдерә ғалимдар. Бәҡтиһәң, гендар балансы, ысынлап та, көслө заттың ғүмер оҙонлоғона тәьҫир итә ала икән. АҠШ-тың Гарвард университеты, Висконсина һәм Төньяҡ-көнбайыш университеты, Ҡытайҙың Гонконг университеты ғалимдары Америка студенттары араһында тәжрибә үткәреп ҡараған. Бөтә факторҙарҙы ла иҫәпкә алғандан һуң, белгестәр шундай һығымтаға килгән: тәркөмдә гүзәл заттар аҙыраҡ булыуы ир-егеттең һаулығына насар йоғонто яһай икән. Тикшеренеү материалдарында авторҙар Ҡытай һәм Һиндостан кеүек илдәрҙе лә миҫал итеп килтерә. Унда эске миграция һәм башҡа факторҙар һөҙөмтәһендә ҡатын-ҡыҙ һаны күпкә кәмегән һәм былар барыһы ла ғүмер оҙайлығының кәмеүенә килтерә. Был күренештең сәбәптәрен асыҡлағанда, эксперттар социаль һәм биологик факторҙарҙың комбинацияһы тураһында ла һүҙ алып бара. Ир-егеттәр гүзәл зат өсөн көрәшкән саҡта ярайһы уҡ стресс кисерә. Ә стресс, билдәле булыуынса, ғүмерҙе ҡыҫҡарта.

■ Фолий кислотаһы ҡандағы май күләмен нормала тотоу һәләтенә эйә, тип белдерә ғалимдар. Гомоцистеин аминокислотаһының юғары булыуы йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәренә килтерә. Ә фолий кислотаһы (B6 витамины) гомоцистеин концентрацияһын кәметеп, ҡан тамырҙары һәм йөрәк өсөн һаҡлаусы сара булып тора. Гомоцистеин һәм фолий кислотаһы араһындағы бәйләнеште Швецияның Цюрих ҡалаһы дауаханаһында тикшереп ҡарағандар. Тикшеренеүҙәрҙә 1750 пациент ҡатнашҡан. Анализдар күрһәтеүенсә, ҡанда ни тиклем фолий кислотаһы күберәк, унда ҡан тамырҙарына зыян килтереүсе "насар" холестерин да түбәнерәк, ә атеросклероз менән көрәшеүсе юғары тығыҙлыҡтағы һаҡлаусы липидтар юғарыраҡ.

■ Үҫмер саҡтан алкоголле эсемлектәр эсергә әүәҫләнеүселәр ологайғас остеопороз менән яфаланасаҡ, тип белдерә ғалимдар. Остеопороз ваҡытында һөйәк туҡымаһының тығыҙлығы һәм ныҡлығы түбәнәйә. Шуға ла үҫмер саҡта һөйәк туҡымаһы үҫешенә зыян килтереүсе процестар йылдар үткәс тә үҙен һиҙҙерергә һәләтле. Ғалимдар 12 грамм алкоголде 1 порцияға иҫәпләй, был 330 мл һыра, 120 мл шарап йәки 40 мл спиртҡа тигеҙ. Ҡатын-ҡыҙ бер юлы - 4, ә ир-ат 5 порция эсемлек эсһә, саманан тыш алкоголь ҡулланыусы, тип атала. Ғалимдар фекеренсә, 10-15 порция алкоголь ҡабул иткән кеше эскесе иҫәпләнә. Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, үҫмерҙәр алкоголде 13 йәштән ҡуллана башлай, 18-22 йәшлек йәштәр спиртлы эсемлектәрҙе иң күп ҡулланыусылар рәтенә инә. Ологая барған һайын, кеше алкоголде аҙыраҡ ҡуллана һәм бик һирәк иҫергәнсе эсә, ти белгестәр.

■ Йоҡлауҙың иң мөһим маҡсаты булып энергияны һаҡлау, ваҡытты һәм көстө дөрөҫ ҡулланыу тора, тип белдерә Лос-Анджелестың Калифорния университеты ғалимы Джером Сигель. Бәҡтиһәң, йоҡлаған саҡта организмдың иң күп энергия тотоноусы ағзалары һүнеп тора икән. Мәҫәлән, мейе дөйөм көүҙә массаһының 2 процентын ғына алып тора, әммә 20 процент энергия тотона. Шуға ла организмға көнөнә 6 тапҡыр туҡлыҡлы итеп ашағанса, уны 8-10 сәғәткә һүндереп тороу күпкә файҙалыраҡ. Ә ҡышҡыһын йоҡоға талыусы йәнлектәр һаҡлап ҡалған энергия уларға йылыраҡ яҡтарға барып етергә лә етә, имеш.

ДОНЪЯ - ҠУЛАСА

# ЕР АҪТЫНДА ҮТЕП КИТТЕ,

## минең ярты ғүмерем...



**Үҙешмәкәр рәссам, СССР-ҙың почетлы шахтеры Алламоратов Ғиниәт Ғибаҙулла улы 1934 йылдың 15 майында Күгәрсен районының Юлдыбай ауылында тыуған. Ул бала сағы һуғыш йылдарына тап килгән кешеләргә хас булғанса, еңел булмаған тормош юлы үткән. Аслыҡ-яланғаслыҡты ла татый, Донецк ҡалаһында өс тиҫтә йыл ер ҡуйынынан күмер сығара. Шул уҡ ваҡытта күмер менән мейескә тәүге рәсемдәрен дә төшөрә. Хаҡлы ялға сығып, әлеге көндә тыуған ауылында йәшәп ята. Рәссамдың төп эштәре әлеге ваҡытта Күгәрсен районы һәм Украинаның Донецк ҡалаһында "Трудовская" шахтаһы музейҙарында һаҡлана. Күргәҙмәләре Өфөлә, Бәләбәй, Стәрлетамаҡ, Мәләүез, Күмертау ҡалаларында ҡуйыла. Хаҡлы ялға сығып, тыуған яғына ҡайтҡас, ул саҡтағы республикабыҙ етәкселеге почетлы шахтерға, үҙенсәлекле рәссамға баш ҡалабыҙ Өфөлә фатир алып йәшәргә лә тәҡдим итеп ҡарай. Әммә Алламоратов бер мәл шахта эсендә ауыр хәлгә ҡалғандан һуң үҙ-үҙенә биргән һүҙенә тоғро ҡала һәм тыуған ауылында йәшәргә ҡарар итә. Әлбиттә, беҙ ауылда йәшәү тигәнде күп итеп мал тотоп, донъя көтөп йәшәү тип аңлайбыҙ һәм ауыл мөхите ижад менән йәшәүҙе үҙһенеп тә бөтмәй. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, 1985 йыл ауылына йәшәргә ҡайтҡан рәссам бына 25 йыл инде тыуған Юлдыбайында көн күрә һәм көнө-төнө ижади хыялдар менән яна. Булмаһа, әйҙә, уның үҙенә һүҙ бирәйек.**

### Яҙмыш шахтер итте

Атайым 1941 йыл һуғышҡа китеп хәбәрһеҙ юғалғас, мин Сәйетҡолдағы балалар йортона барып эләктем. Унда 1952 йылға тиклем йәшәгәс, тыуған ауылыбыҙға ҡайтып, мәктәптә ат ҡараусы булып эшләй башланым. Ул саҡта әле ике әсәйем дә (миңә ниңәлер атайымдың икенсе ҡатыны яҡыныраҡ булды) иҫән ине әле. Бер йылдан һуң Совет Армияһына саҡырылдым. Армияға алыныуым мине ас-яланғас үткән бала саҡ михнәттәренән ҡотҡарҙы кеүек. Шуға күрәлер ҙә, 1956 йылда армия хеҙмәтен тултырған саҡта Донбасс шахтаһына партия саҡырыуы буйынса эшкә барыуҙы яҙмыш бүләге итеп ҡабул иттем. Дөрөҫөн әйткәндә, ул саҡта миңә ас-яланғас үткән тыуған яғыма ҡайтыу үлемгә тиң кеүек ине. Армияла уҡ шахтаға барыусылар өсөн мул ғына аҡса бирҙеләр. Үҙем һымаҡ дембелдәр менән гөрләтеп байрам иттек. Байрам итеүебеҙ ҙә яҡшы булған. Ни өсөн тигәндә, һуңынан тыуған яҡҡа ҡайтырлыҡ аҡса ла ҡалманы һәм мин, ауылыма ҡайтып тормаҫтан, Украинаның Донецк ҡалаһына барып юлыҡтым. Шулай итеп, мине яҙмыш үҙе шахтер итте. Һүрәт төшөрөүгә килгәндә, мин атай йортонда йәшәгәндә үк, әсәйҙәрҙән әрләнә-әрләнә, күмер менән мейескә ат һүрәттәре төшөрә инем инде. Сәйетҡол балалар йортона бер мәл Леонид Сидельковский тигән рәссам уҡытыусы килде. Ҡылҡәләм тоторға, артабан ижад серҙәренә төшөнөргә башланғысты унан алдым. Армияла стена гәзите сығарһам, шахтала эшләгәндә инде үҙемдең шәхси күргәҙмәләремде ойоштора башланым.

Ул саҡта шахтерҙарҙың эш хаҡы юғары булды. Бер мәл "Жигули" машинаһы алып ебәрҙем. Машина йөрөтөүгә хоҡуҡ танытмаһы алыуы ла еңел булды. ГАИ хеҙмәткәрҙәре рәссам икәнемде белгәс, "ГАИ тәҙрәһе"стенды эшләтте. Отпускҡа сыҡҡас, карта һатып алдым да, Донецкиҙан Юлдыбайға машина менән ҡайттым. Украина менән Башҡортостан араһын машина менән бик күп тапҡырҙар үтергә тура килде.

### Сулпан Ғайсин менән осрашыуым

Тыуған яғыма йәшәргә ҡайтыуыма ул саҡта Үҙәк телевидениенан бөтә ил яратып ҡараған "Бөтә йөрәктән" ("От всей души") тапшырыуы ла булышлыҡ итте. Тапшырыуҙы алып барыусы Валентина Леонтьева сираттағы тапшырыуын әҙерләү өсөн Донецк ҡалаһына килә һәм геройҙар эҙләгәндә беҙҙең шахта музейындағы минең һүрәттәргә иғтибар итә, шунан биографиямды өйрәнә. Бер саҡ миңә, ниңәлер, шахтер кейеме тегергә булдылар. Бындай бәхет бик һирәктәргә генә эләгә ине. Башҡа шахтерҙар миңә, "урыҫ булмаған кешегә", шундай иғтибар бүленеүенә сәйерһенеп ҡараны. Һуңынан миңә махсус кейем тегеүҙәренең сәбәбен аңланым. 1983 йылдың 28 августа ҡаланың мәҙәниәт һарайына саҡырҙылар. Унда 24 йәшлек улым Салауатты ла эйәртеп барҙым. Залға тамашасылар йыйылған. Телевидение хеҙмәткәрҙәре йүгермәләп йөрөй. Араларында Валентина Леонтьева ла бар. Беҙҙе бер саҡ сәхнә түренә сығарып ултырттылар. Тапшырыу башланды. Иң тәүҙә минең картиналарҙы күрһәтә башланылар. Леонтьева тамашасыларға тормош юлым хаҡында һөйләне лә, миңә боролоп: "Һеҙ Сәйетҡол балалар йортонда бергә тәрбиәләнгән кемдәр менән осрашырға теләр инегеҙ?" - тип һораны. Мин бер нисә исем-фамилияны, шул иҫәптән бала

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# ФИТЫР САҘАҠАҺЫ БИРЕГЕҘ

**Рамаҙан айы тамамланғансы, фитыр сәҙаҡаһы биреп ҡуйырға онотмағыҙ. Һуңынан бирһәң, ул ябай хәйер булып ҡына һаналасаҡ. Ҡөрьән-Кәримдә был турала: "Ураҙа күк менән Ер араһында аҫылынып тора һәм фитыр зәкәтен түләү менән ул күтәрелә", - тиелгән.**

Хәйер-саҙаҡа менән бәндәләрҙең гонаһтары ғәфү ителә, уларға күп сауаптар яҙыла. Ай буйына ураҙа тотаһығыҙ икән, был ғибәҙәтте тулыһынса үтәү өсөн фитыр, зәкәт (байҙарға ҡағыла) сәҙаҡаларын бирергә онотмағыҙ. Был да Рамаҙанда мосолмандарға мотлаҡ ғәмәл булып иҫәпләнә.

Фитыр ата-әсәйенә, олатай-өләсәйенә, балаларына, ейәндәренә, ҡатынына, байҙарға бирелмәй.

**Фитыр саҙаҡаһын:** **1.** Ярлыларға - көс-ҡеүәте булып та, алған аҡсаһы үҙенә етмәгән кешеләргә. **2.** Бурыслыларға - бурыстарынан ҡотолоу өсөн мохтаж мосолмандарға, етемдәргә, ғәриптәргә, бәлә-ҡазаға эләккәндәргә. **3.** Дингә хеҙмәт иткәндәргә. **4.** Ватанынан йыраҡта, сит ерҙә йәшәгән кешегә. **5.** Зәкәт йыйыу һәм ҡатнашҡан кешеләргә бирергә кәрәк.

Балаларҙың фитырын - ата-әсәләре, бәлиғ булғандар үҙҙәре түләй.

Мөхәммәт бәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм): "Рамаҙан айында башҡарылған изге эштәр ураҙа фитыр сәҙаҡаһы үтәлмәйенсә Аллаһы Тәғәләгә барып етмәйәсәк", - тигән.

Фитыр саҙаҡаһы Ураҙа ғәйете алдынан 2 кг бойҙай хаҡы күләмендә бирелә. Һәр кем үҙ хәленән сығып, байлығына ҡарап, фитыр саҙаҡаһы менән хисаплашырға тейеш.

**Башҡортостан мосолмандары Диниә назаратының быйылғы йылға билдәләгән фитыр саҙаҡаһы түбәндәгесә:**

**1)** Урта хәлленән түбән мосолман өсөн - һәр ғаилә ағзаһы өсөн 20 һум.





Ғиниәт Алламоратовтың картиналары.

саҡ дуҫым Сулпан Ғайсиндың исемен атаным. Шунан һуң алып барыусы: "Беҙ һеҙгә дуҫығыҙ Сулпан Ғайсин менән осрашыу бүләк итәбеҙ", - тиеүгә сәхнә артынан ул саҡта район етәкселәренең береһе булған Сулпан Ғайсин үҙе килеп сыҡмаһынмы! Телһеҙ ҡалдым. Ҡосаҡлаштыҡ, илаштыҡ, мин бер ни ҙә әйтә алмайым, Сулпандың теле телгә йоҡмай. Дөрөҫөн әйткәндә, мин ошо рәүешле Сулпан менән осрашҡандан һуң сит яҡта оҙаҡ йәшәй алмаҫымды аңланым һәм ҡайтырға булдым. Ғаиләм Украинала тороп ҡалды.

### Урыҫтар улыма исем ҡушты

Ғүмеремдең иң аҫыл йылдары - утыҙ йылым ер аҫтында үтте, тиһәм дә хата булмаҫ. "Ер аҫтында үтеп китте минең ярты ғүмерем..." тип йырларлыҡ хатта. Төрлө мажараларға осрарға тура килде, хатта шахта емерелеп, тәүлеккә яҡын ер аҫтында ла ятылды. Ундай саҡтарҙа һәр ваҡыт Башҡортостан, тыуған ауылым хаҡында уйландым. "Ошонан тере ҡалып, ер өҫтөнә сыҡһам, бүтәнсә ер аҫтына төшмәйәсәкмен. Ер аҫтына ятырға ла иртәрәк. Ғүмеремдең ҡалған өлөшөн тыуған ауылымда үткәрәсәкмен", - тип әйткән мәлдәрем дә булды. 1963 йылда бер мәл шахтала саҡта ер аҫты һелкенеп киткәндәй тойолдо. Һәр хәлдә, сәбәпһеҙгә тәрән тулҡынланыу кисереп, тәнем ҡалтыранды. Ер тетрәнеме, шахта емерелдеме икән, тип, башҡаларға ҡараным. Улар бер ни булмағандай эшләп йөрөй. Ул саҡта үҙем менән ни булғанын тәки аңлай алманым. Бер аҙҙан һуң тыуған ауылыма отпускаға ҡайтҡас ҡына ни өсөн тулҡынланыу кисереүемдең сәбәбен аңлай алдым. Бәхтиһәң, мин нәҡ ер аҫтында тетрәнеү кисергән мәлдә ауылыбыҙҙың иман йорто - мәсетте емергәндәр икән. Был хәлде әле булһа аңлата алмайым. Аллаһы Тәғәләнең барлығына ышанһам да, намаҙ уҡығаным юҡ. Диндар түгелмен. Шулай ҙа был ваҡиға мине тетрәндерҙе. Әйткәндәй, мәсетте емереүҙә ҡатнашҡан кешеләр барыһы ла төрлө сәбәптәр менән ваҡытынан алда донъя ҡуйҙы.

Балаларымдың барыһына ла үҙебеҙсә исемдәр ҡуштым. Әсәләре Әлимә - мишәр ҡыҙы, ғаиләләре менән аслыҡтан ҡасып, 1922 йылда уҡ Донецкиға күсеп килгән булғандар. Ҡатыным тегенсе булып эшләне. Өлкән улым Салауат, кеселе - Ирфан, ҡыҙымдың исеме Нурия. Өлкән улымдың тыуыуы хаҡында лифтҡа ултырып, келит юлы буйлап шахтаға төшөп барғанда ишеттем. Диспетчер урындағы радио аша ҡысҡырып әйтте. Шунда минең менән бергә шахтаға төшөп барыусы урыҫтар бер тауыштан: "Улыңдың исеме Салауат булһын, Салауат тип ҡуш!" - тип, мине ҡотланылар. Протазановтың "Салауат Юлаев" фильмы илебеҙҙә иң популяр булған йылдар ине бит. Ул саҡтарҙа башҡалар һәр бер башҡорт кешеһендә Салауатты күрергә тырыша торғайны.

### Ике парадокс

Әле яныраҡ Украинаға барып, йәшләгем эҙҙәре буйлап йөрөп ҡайттым. Ҡатыным Әлимә: "Шул ике арала килеп тә еттеңме?" - тип мәрәкәләп ҡаршыланы. Балалары менән күрештем. Ирфан улымдың улы Дима ейәнем менән аралашып ҡыуандым. Ул үҙен башҡорт тип белә, Алламоратов фамилияһын оло ғорурлыҡ менән йөрөтә. Ғөмүмән, балаларымдың һәм Диманың паспорттарында милләт графаһында "башҡорт" тип яҙылған. Бына шундай парадокс. Бына мин, уның ҡартатаһы, Башҡортостанда йәшәп тә, паспортымда бындай яҙыу юҡ. Икенсе парадокс шунда: әсәһе украин милләтле Димала башҡорт рухы балаларыма ҡарағанда ла көслөрәк. Армияла саҡта һәм шахтала эшләгәндә лә украиндар мине яҡын күрә торғайны. Сәбәбен әле генә килеп аңлағандай булам. Тарихтан билдәле булыуынса, Дәште Ҡыпсаҡ империяһы тарҡалғас, ҡыпсаҡтар башҡорт, ҡаҙаҡ, төркмән, ҡырғыҙ, үзбәк, украин халыҡтарының бер өлөшө булып китә. Бына бит ҡайҙа ята ҡан тартыуы? Тимәк, минең армиянан ҡайтып та тормаҫтан, туп-тура Украинаға юлланыуым да буштан ғына булмаған. Һәр хәлдә, был осраҡлы тап килеү түгелдер, тип уйлайым.

**Әхмәр ҮТӘБАЙ яҙып алды.**

### ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП:

**Әлфир ҒАЙСИН, Рәми Ғарипов исемендәге Башҡорт республика гимназия-интернаты директоры:**

1983 йылда Ғиниәт ағай һүҙ алып барған "Бөтә йөрәктән" тапшырыуы булған саҡта мин армияла хеҙмәт итә инем. Тапшырыу хаҡында атайым миңә алдан хәбәр иткәйне. Командирыбыҙ бөтә ротабыҙҙы йыйып, хәрби часыбыҙҙың "Ҡыҙыл мөйөш"ендә ҡараныҡ беҙ был тапшырыуҙы. Шунан һуң ротала абруйым бермә-бер күтәрелеп китте. Һуңынан осрашып һөйләшкәс, шуны ла белдем: бәхтиһәң, атайымды Донецк ҡалаһына тапшырыу булырҙан ике аҙна алдараҡ саҡырып, үҙенә махсус машина биреп ҡуйғандар икән. Йәнәһе, урыҫ телен насар белгән башҡорт кешеһе алдан бында килеп, төрлө урында йөрөп, аралашып, телен шымарта торһон, тигәндәр. Атайым урыҫсаны һәр ваҡыт һыу кеүек эсте. Ҡыҙыҡ замандар булған шул.

**2)** Урта хәлле мосолмандарға - һәр ғаилә ағзаһы өсөн 100 һум.

**3)** Хәлле мосолман өсөн - һәр ғаилә ағзаһынан 200 һум.

**4)** Сәләмәтлеге арҡаһында ураҙа тота алмаған мосолмандар өсөн- Фидиә саҙаҡаһы (хаҡ биреп алынған саҙаҡа) - 100х30 көн = 3000 (өс мең) һум.

**5)** Зәкәттең нисәбе 60 000 (алтмыш мең) һум. Ошо сумманан зәкәт саҙаҡаһы - 1500 һум.

# ҠӘҘЕР КИСЕНДӘ...

## доғалар әйтәйек

**Ислам динендәге мөбәрәк кистәрҙең иң ҡиммәтлеһе - Ҡәҙер кисе. Ҡәҙер кисе Рамаҙан шәриф айында булған бер кис, Рамаҙандың ҡайһы кисендә булғаны аныҡ рәүештә билдәләнмәгән.**

Ҡөрьән-Кәрим Рәсүлебеҙгә нәҡ ошо кистә тапшырыла башлай. Хәҙис-шәрифтә: "Ҡәҙер кисенә инанып, сауабын өмөт итеп, ғибәҙәт ҡылғандарҙың бөтә гонаһтарын Аллаһы Тәғәлә ғәфү итер", - тиелә.

Ғибәҙәттә ҡаза намаҙын үтәү, Ҡөрьән-Кәримде уҡыу, доғалар ҡылыу, тәүбә итеү, саҙаҡа биреү, мосолмандарҙы һөйөндөрөү һәм башҡа сауаптар ҡаҙаныу - былар барыһы ла был кискә хөрмәт күрһәтеү.

Был кистең өҫтөнлөгән Аллаһы Тәғәлә Ҡөрьән-Кәримдә "Әл-Ҡәдр" (Ҡөҙрәт) сүрәһендә асыҡлай: "Ысынлап та, Беҙ Ҡөрьәнде Ҡәҙер кисендә күктән төшөрҙөк. Ҡәҙер кисенең нимә икәнен һиңә нимә белдерер? Ҡәҙер кисенең сауабы мең айҙан да хәйерлерәк, мең ай ҡылған ғибәҙәттән артығыраҡ. Ҡәҙер кисендә Раббыларының рөхсәте һәм төрлө бойороҡтар менән күктәрҙән фәрештәләр төшә. Ҡәҙер кисендә намаҙ, Ҡөрьән уҡып, ураҙа тотҡан мөьминдәргә фәрештәләр Аллаһтан сәләм әйтер. Ҡәҙер кисенең дауамы ҡояш байығандан башлап таң атҡанға саҡлы".

Ҡәҙер кисе Мөхәммәт (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) өммәтенә бирелгән махсус бер кис. Башҡа бәйғәмбәрҙәргә бындай кис бирелмәгән. "Ҡәҙер кисе" бик ҡәҙерле кис булғанға күрә, Аллаһы Тәғәлә уны ҡолдарына, һәр ваҡыт ғибәҙәттә, итәғәттә булһындар өсөн, ҡайһы көн икәнен ҡәтғи рәүештә белдермәгән. Тимәк, был кисте эҙләгәндәргә рамаҙандың күп кистәрендә ғибәҙәт ҡылыу фарыҙ.

### УҢЫШ ҠАҘАН

# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Уй-фекерегеҙҙе үҙгәртеүгә ике аҙым

**Көсһөҙләндереүҙең ике ысулы бар, тигәйнек: оҙайлы һәм ҡыҫҡа. Әгәр тормошоғоҙ ығы-зығынан тора йәки һеҙ көслө стресс йоғонтоһонда булһағыҙ, һеҙгә оҙайлы процедура кәрәк. Ә ҡайһы бер кешеләр үҙҙәренең мейе компьютерын бер нисә секундта тоҡандыра ала. Уларға ҡыҫҡа ысул да ярай. Оҙайлы ысулдың өс төрө була.**

**Күпселеккә тура килгән ҡыҫҡа ысул:**

Яҡшылап ултырығыҙ. Күҙҙәрегеҙҙе йомоғоҙ. Тәрән итеп тын алығыҙ һәм йайлап ҡына сығарығыҙ. Тағы бер тапҡыр ҡабатлағыҙ. Тағы бер тапҡыр. Хәҙер тормошоғоҙҙағы тыныс күренештәрҙең береһен күҙ алдығыҙға килтерегеҙ. Уларҙың һәр береһенә үтеп инегеҙ, әйтерһең дә һеҙ әлеге мәлдә унда ҡатнашаһығыҙ. Төҫтәрҙе элек нисек күргәнһегеҙ, шулай күҙаллағыҙ (аҫта миҫал килтерелә). Хәҙер һеҙ мейе компьютерын программалаштырыуға әҙер.

Көсһөҙләнеү - бер нәмә лә эшләмәү сәнғәте. Әммә беҙ һәр ваҡыт нимәлер эшләргә күнеккәнбеҙ, шуға ла көсһөҙләнеү өсөн дә нимәлер эшләргә кәрәк. Иғтибар итегеҙ, ҡыҫҡа йәки оҙон процедура булһынмы, барыбер физик күнекмә ҡатнаша. Улар тәнде көсһөҙләндереү өсөн тәғәйенләнә. Шулай уҡ һәр ерҙә визуалләштереү, хыял булыуы ла иғтибарға лайыҡ. Был аңды көсһөҙләндерә. Әгәр тән ниндәйҙер уңайһыҙлыҡ тойоп, уйҙар ағышына ҡыҫылһа, аңды көсһөҙләндереү мөмкин түгел.

Шуға ла аңығыҙҙа тыуған образдар мөһим. Уларға етди ҡарарға кәрәк. Бына ҡыҫҡа ысулда ҡулланырға мөмкин булған бер нисә картина:

Сылтырап аҡҡан шишмә.
Зәңгәр күктә йөҙгән болоттар.
Диңгеҙ яры, тулҡын.
Симфоник музыка тыңлау.
Төрлө төҫтәге сәскәләрҙән төрлө еҫтәр аңҡытҡан түтәл.
Төрлө төҫтәге раузалар булған түтәл.
Аквариумда йөҙөүсе тропик балыҡ.
Тымыҡ күл, ә һеҙ ярҙан уҙ шәүләгеҙгә һоҡланып баҡҡанһығыҙ.

Әлбиттә, һеҙ Дантеның Туғыҙынсы күге йәки ожмах баҡсаһы кеүек уйлап сығарылған урындарҙың һәҙәмтәһе булмауын аңлайһығыҙҙыр. Һеҙҙең тәнегеҙ һәм аңығыҙ ҡасандыр күргән картинаға, тағы ла унда булыуын күҙ алдына килтереп, нығыраҡ яуап бирер.

Теге йәки был процедураның физик һәм аң өлөшөн тормошҡа ашырып, һеҙ тормошоғоҙҙо үҙгәртергә тәғәйенләнгән инструкцияларға, мейе компьютерын программалаштырырға әҙер.

**Роберт СТОУН.**



## 6 СЕНТЯБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Жить здорово!"
10.10 "Малахов+"
11.20 "Контрольная закупка"
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "След". Сериал
19.00 "Давай поженимся!"
20.00 "Жди меня"
21.00 "Время"
21.30 "Семейный дом", 5-я и 6-я серии. Драма
23.30 "Ночные новости"
23.50 "На ночь глядя"
00.50 "Срочное фото". Триллер
02.30, 03.05 "Множественность"
03.00 Новости

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "В огнедышащей лаве любви. Светлана Светличная"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Маршрут милосердия". Сериал
12.45 "Формула любви"
13.45 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.25 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.45 "Настоящая жизнь". Док. драма
15.35 "Каменская"
16.30 "Кулагин и партнеры". Сериал
17.00 "Вести"
17.15 "Местное время. Вести-Башкортостан"
17.35 "Дворик", 132-я серия
18.05 "Ефросинья", 141-я серия
19.00 "Слово женщине". Сериал
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши"
21.00 "Судьбы загадочное завтра". Сериал
23.40 "Дежурный по стране"
00.40 "Вести+"
01.00 "Честный детектив"
01.45 "Золото на улицах". Драма
03.40 "Комната смеха"

### НТВ

05.55 "НТВ утром"
08.30 "Кулинарный поединок"
09.30 "Чистосердечное признание"
10.00 "Сегодня"
10.20 "Обзор. Чрезвычайное происшествие. Обзор за неделю"
11.00 "Следствие вели..."
12.00 "Суд присяжных"
13.00 "Сегодня"
13.30 "Закон и порядок". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Возвращение Мухтара". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Морские дьяволы". Сериал
21.30 "Глухарь". Сериал
23.15 "Сегодня"
23.35 "Город соблазнов"
01.10 "Авиаторы"
01.45 "Излечить гориллу"
03.55 "Господа присяжные". Сериал

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**09.00 "Новости" (на русск. яз.)**
**09.10 "Полезные новости"**
**09.25 "Виктория"**
**10.20 "Фильм - детям"**
**12.00 Новости (на башк. яз.)**
**12.15 "Родословная малой родины"**
**12.35 "Семь чудес Башкортостана". Кумыс**
**13.00 "Ностальгия". Ретро-концерт**
**14.00 Дневной канал "Хорошее настроение"**
**15.00 Новости (на русск. яз.)**
**15.10 Художественный фильм**
**16.50 "Наруто". Мультсериал для подростков**
**17.15 "Виктория"**
**18.00 "От Ика до Яика"**
**18.30 Новости (на башк. яз.)**
**19.00 "Книжный дом"**
**19.30 "Историческая среда"**
**20.00 "Легенды спорта"**
**20.30 "Сэнгелдэк"**
**20.45 "Полезные новости"**
**21.00 "Свои деньги"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Неслучайные люди"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.00 Российское кино на канале БСТ. Прогноз погоды**

## 7 СЕНТЯБРЯ ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Жить здорово!"
10.10 "Малахов+"
11.20 "Контрольная закупка"
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "След". Сериал
19.00 "Давай поженимся!"
19.40 "Пусть говорят"
20.30 "Время"
21.00 "Футбол. Отборочный матч Чемпионата Европы 2012. Сборная России - сборная Словакии. Прямой эфир
23.00 "Первая любовь"
00.00 "Ночные новости"
00.20 "На ночь глядя"
01.20, 03.05 "Знакомьтесь, Джо Блэк". Драма
03.00 "Новости"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Маршрут милосердия". Сериал
12.45 "Формула любви"
13.45 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.25 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.45 "Настоящая жизнь"
15.35 "Каменская". Сериал
16.30 "Кулагин и партнеры". Сериал
17.00 "Вести"
17.15 "Местное время. Вести-Башкортостан"
17.35 "Дворик", 133-я серия
18.05 "Ефросинья", 142-я серия
19.00 "Слово женщине". Сериал
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши"
21.00 "Судьбы загадочное завтра", 14-я, 15-я и 16-я, закл. серии
23.35 "Вести+"
23.55 "Король оружия"
01.50 "Горячая десятка"
03.00 "Большая любовь-3"
04.05 "Люди в деревьях-2"

### НТВ

05.55 "НТВ утром"
08.30 "Квартирный вопрос"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Чрезвычайное происшествие. Расследование"
11.00 "УГРО". Сериал
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Закон и порядок". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Возвращение Мухтара". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Морские дьяволы". Сериал
21.30 "Глухарь". Сериал
23.15 "Сегодня"
23.35 "Город соблазнов". Сериал
01.25 "Главная дорога"
02.00 "Вилли Вонка и шоколадная фабрика". Фэнтези
03.55 "Господа присяжные"

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**09.00 "Новости" (на русск. яз.)**
**09.10 "Полезные новости"**
**09.25 "Виктория"**
**10.20 Детский фильм**
**12.00 Новости (на башк. яз.)**
**12.15 "Родословная малой родины"**
**12.35 "Семь чудес Башкортостана". Курай**
**13.00 "Волшебный курай". Концерт**
**14.00 Дневной канал "Хорошее настроение"**
**15.00 Новости (на русск. яз.)**
**15.10 Художественный фильм**
**16.50 "Наруто". Мультсериал для подростков**
**17.15 "Виктория"**
**18.00 "От Ика до Яика"**
**18.30 Новости (на башк. яз.)**
**19.00 "Каменная мозаика"**
**19.30 "Криминальный спектр"**
**20.00 "Паблисити" с А. Саитовым"**
**20.30 "Сэнгелдэк"**
**20.45 "Полезные новости"**
**21.00 "Судьбы радужные нити"**
**21.30 Новости (на русск.яз.)**
**22.00 "Неслучайные люди"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.00 Художественный фильм. Прогноз погоды**

## 8 СЕНТЯБРЯ СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Жить здорово!"
10.10 "Малахов+"
11.20 "Контрольная закупка"
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "След". Сериал
19.00 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Семейный дом", 7-я серия
22.30 "Среда обитания"
23.30 "Ночные новости"
23.50 "На ночь глядя"
00.50 "Никогда не сдавайся"
02.50, 03.05 "Тайный мир"
03.00 Новости

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Кто убил Котовского?"
10.00 "О самом главном"
11.00, 14.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Маршрут милосердия". Сериал
12.45 "Формула любви"
13.45 "Вести. Дежурная часть"
14.25, 17.15 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.45 "Настоящая жизнь"
15.35 "Каменская". Сериал
16.30 "Кулагин и партнеры". Сериал
17.00 "Вести"
17.35 "Дворик". Сериал
18.05 "Ефросинья", 143-я серия
19.00 "Слово женщине". Сериал
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши"
21.00 "Сердце матери", 1-я, 2-я и 3-я серии
23.45 "Вести+"
00.05 "Тайна Чингисхана"
02.40 "Большая любовь-3"
03.45 "Люди в деревьях-2"

### НТВ

05.55 "НТВ утром"
08.30 "Дачный ответ"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00, 16.00, 19.00 "Сегодня"
10.20 "Чистосердечное признание"
11.00 "УГРО". Сериал
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Закон и порядок". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.30 "Возвращение Мухтара". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Морские дьяволы". Сериал
21.30 "Глухарь". Сериал
23.15 "Сегодня"
23.35 "Город соблазнов". Сериал
01.25 "Большой вальс". Мелодрама
03.55 "Господа присяжные"

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**09.00 "Новости" (на русск. яз.)**
**09.10 "Полезные новости"**
**09.25 "Виктория"**
**10.20 "Фильм - детям"**
**12.00 Новости (на башк. яз.)**
**12.15 "Родословная малой родины"**
**12.35 "Семь чудес Башкортостана". Мед**
**13.00 "Любимые мелодии"**
**14.00 Дневной канал "Хорошее настроение"**
**15.00 Новости (на русск. яз.)**
**15.10 Художественный фильм**
**16.50 "Наруто".Мультсериал для подростков**
**17.15 "Виктория"**
**18.00 "Тай-тулак"**
**18.30 Новости (на башк. яз.)**
**19.00 "Действующие лица"**
**19.30 "Историческая среда"**
**20.00 "Победить себя"**
**20.30 "Сэнгелдек"**
**20.45 "Полезные новости"**
**21.00 "В центре внимания"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Неслучайные люди"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.00 Художественный фильм. Прогноз погоды**

## 9 СЕНТЯБРЯ ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 "Новости"
09.10 "Жить здорово!"
10.10 "Малахов+"
11.20 "Детективы"
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Ураза-байрам". Трансляция из Уфимской соборной мечети
14.00 Другие новости
14.20 "Понять, простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "След". Сериал
19.00 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят" с Андреем Малаховым"
21.00 Время
21.30 "Семейный дом", 8-я серия
22.30 "Человек и закон"
23.30 "Ночные новости"
23.50 "На ночь глядя"
00.50, 03.05 "Игра"
03.00 Новости
03.15 "Улицы в огне"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "О самом главном"
11.00, 14.00, 17.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Маршрут милосердия"
12.45 "Формула любви"
13.45 "Вести. Дежурная часть"
14.25, 17.15 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.45 "Настоящая жизнь"
15.35 "Каменская". Сериал
16.30 "Кулагин и партнеры"
17.35 "Дворик", 135-я серия
18.05 "Ефросинья", 144-я серия. Сериал
19.00 "Слово женщине". Сериал
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Сердце матери", 4-я и 5-я серии
22.50 "Поединок"
23.45 "Вести+"
00.05 "Однажды в Голливуде". Комедия
02.10 "Большая любовь-3"
03.20 "Люди в деревьях-2"
04.05 "Комната смеха"

### НТВ

05.55 "НТВ утром"
08.30 "И снова здравствуйте!"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00, 16.00, 19.00 "Сегодня"
10.20 "Особо опасен!"
11.00 "УГРО"
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Закон и порядок". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.30 "Возвращение Мухтара". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Морские дьяволы". Сериал
21.30 "Глухарь". Сериал
23.15 "Сегодня"
23.35 "Город соблазнов"
01.25 "Фрост против Никсона". Историческая драма
03.55 "Господа присяжные", 7-я и 8-я серии

### БСТ

**08.00 Новости (на русск. яз.)**
**08.10 "Праздник веры и добра". Концерт**
**09.00 "Ураза-байрам". Прямая трансляция из Уфимской соборной мечети "Ляля-Тюльпан"**
**10.00 "Любимые мелодии"**
**10.30 Мультфильм**
**11.45 "Кукушкин чай"**
**12.10 "Долгое-долгое детство"**
**13.15 "Дарю песню"**
**14.15 "На северной периферии ислама"**
**15.00 Художественный фильм**
**17.05 На соискание премии им. С. Юлаева "Долгий путь домой". А.-З. Валиди**
**18.30 Новости (на башк. яз.)**
**18.55 Открытый чемпионат России по хоккею - Чемпионат КХЛ. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Трактор" (Челябинск). Прямая трансляция**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Неслучайные люди" (на баш. яз.)**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.00 "Шедевры мирового кинематографа". Прогноз погоды**

## 10 СЕНТЯБРЯ ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 "Новости"
09.10 "Жить здорово!"
10.10 "Малахов+"
11.20 "Контрольная закупка"
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять, простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "Поле чудес"
19.10 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 Время
21.30 "Клуб Веселых и Находчивых"
23.50 "Подальше от тебя". Мелодрама
02.20 "Путь в тысячу миль". Драма
04.20 "Спасите Грейс"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Утро России"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Мусульмане"
09.15 "Прерванное молчание. Муслим Магомаев"
10.00 "О самом главном"
11.00, 14.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Маршрут милосердия"
12.45 "Формула любви"
13.45 "Вести. Дежурная часть"
14.25 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.45 "Настоящая жизнь"
15.35 "Каменская"
16.30 "Кулагин и партнеры". Сериал
17.00 "Вести"
17.15 "Местное время. Вести-Башкортостан"
17.35 "Дворик", 136-я серия
18.05 "Ефросинья", 145-я серия
19.00 "Слово женщине". Сериал
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Сердце матери", 6-я, 7-я и 8-я, закл. серии
23.50 "Девчата"
00.40 "15 минут славы". Боевик
03.05 "Путешествия выпускников"

### НТВ

05.55 "НТВ утром"
08.30 "Мама в большом городе"
09.00 "Чудо-люди"
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00, 16.00 "Сегодня"
10.20 "Спасатели"
11.00 "УГРО". Сериал
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Закон и порядок". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.30 "Возвращение Мухтара". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.00 "Сегодня"
19.30 "Следствие вели..."
20.30 "Чрезвычайное происшествие. Расследование"
20.55 "НТВшники"
22.00 "Гражданка начальница". Драма
00.00 "Женский взгляд"
00.45 "Про любовь". Драма
02.40 "Тарзан и дьяволица". Приключения
04.05 "Господа присяжные"

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**09.00 Новости (на русск. яз.)**
**09.10 "Полезные новости"**
**09.25 "Виктория"**
**10.20 "Фильм - детям"**
**12.00 Новости (на башк. яз.)**
**12.15 "Родословная малой Родины" (на башк. яз.)**
**12.35 "Семь чудес Башкортостана". "Урал-батыр"**
**13.00 "Любимые мелодии"**
**14.00 Дневной канал "Хорошее настроение"**
**15.00 Новости (на русск. яз.)**
**15.10 Художественный фильм**
**16.50 "Наруто". Мультсериал для подростков**
**17.15 "Виктория"**
**18.00 "Йома"**
**18.30 Новости (на башк. яз.)**
**19.00 "Райхан" (на тат. яз.)**
**19.30 "Криминальный спектр"**
**20.00 "Куласа"**
**20.30 "Сэнгелдек"**
**20.45 "Полезные новости"**
**21.00 "Формула успеха"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Неслучайные люди"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.00 "Киноколлекция Оскар". Прогноз погоды**

## 11 СЕНТЯБРЯ СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости
06.10 "Подвиг разведчика"
08.10 "Дисней-клуб"
09.00 "Играй, гармонь любимая!"
09.40 "Слово пастыря"
10.00, 12.00 Новости (с субтитрами)
10.10 "Смак"
10.50 "Лариса Долина. Мне надоело быть железной"
12.15 "Герман Титов. Первый после Гагарина"
13.20 "9/11. Америка под ударом"
15.10 "Солдат Иван Бровкин"
16.50 "Кто хочеть стать миллионером?"
18.00 "Большие гонки"
19.20 "Минута славы"
21.00 "Время"
21.15 "Детектор лжи"
22.15 "Прожекторперисхилтон"
22.50 "Через Вселенную". Мелодрама
01.20 "Проклятый путь"
03.30 "Анастасия"
05.30 "Детективы"

### РОССИЯ 1

04.55 "Гусарская баллада"
06.45 "Вся Россия"
06.55 "Сельское утро"
07.25 "Диалоги о животных"
08.00 "Вести"
08.10 "Местное время. Вести-Башкортостан"
08.20 "Военная программа"
08.45 "Бабушка Удава"
08.50 "Волшебный лес"
10.20 "Субботник"
11.00 "Вести"
11.10 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.20 "Качество жизни"
11.40 "Дела и люди"
11.50 "Рецепты здоровья"
12.05 "Формула совершенства"
12.15 "Комната смеха"
13.10 "Сто к одному"
14.00 "Вести"
14.20 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.30 "Приговор". Мелодрама
16.20 "Субботний вечер"
18.15 "Богатая Маша". Мелодрама
20.00 "Вести в субботу"
20.40 "Богатая Маша". Продолжение
21.30 "Смертный приговор". Боевик
22.40 "Десять миллионов" с Максимом Галкиным"
01.40 "Любовь по правилам... и без". Романтическая комедия
04.10 "Зубастики-2: основное блюдо"

### НТВ

06.05 "Люди Икс: эволюция"
06.55 "Сказки Баженова"
07.25 "Смотр"
08.00, 10.00, 13.00 "Сегодня"
08.20 "Золотой ключ". Лотерея
08.45 "Авиаторы"
09.20 "Живут же люди!"
10.20 "Главная дорога"
11.00 "Кулинарный поединок"
12.00 "Квартирный вопрос"
13.25 "Особо опасен!"
14.00 "Лучший город Земли"
15.05 "Своя игра"
16.00 "Сегодня"
16.25 "Преступление будет раскрыто". Детективный сериал
17.20 "Очная ставка"
18.20 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.00 "Сегодня"
19.25 "Профессия - репортер"
19.55 "Программа Максимум. Расследования, которые касаются каждого"
21.00 "Русские сенсации"
21.55 "Ты не поверишь!"
22.50 "Властелин колец: две крепости". Фэнтези
02.20 "Бэтмен". Фантастический боевик
05.05 "Господа присяжные"

### БСТ

**08.00 Новости (на русск. яз.)**
**08.10 "Сельский час"**
**08.35 "Ребятам о зверятах"**
**09.00 Мультфильм**
**09.50 Впервые на ТВ. М. Карим. "В ночь лунного затмения". Спектакль Салаватского башкирского государственного театра драмы**
**12.00 "Противостояние"**
**12.30 "Автолегенды"**
**13.00 "Дарю песню"**
**14.00 "Сердце". Р. Назаров**
**14.55 Художественный фильм**
**16.45 "Вода". Док. фильм**
**17.35 "Дарю песню"**
**18.40 "Вестник Газпромтрансгаз Уфа"**
**19.00 Новости (на башк. яз.)**
**19.25 "Полюс времени". З. Расулев**
**20.30 "Сэнгелдэк"**
**20.50 "Семь жемчужин". Сарвинские легенды**
**21.00 "На своей земле"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 Хит-парад "Етеган"**
**22.45 "Семейная комедия на БСТ". Прогноз погоды**

## 12 СЕНТЯБРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости
06.10 "Опекун"
07.50 "Служу Отчизне!"
08.20 "Дисней-клуб"
09.10 "Здоровье"
10.00, 12.00 Новости
10.10 "Непутевые заметки"
10.30 "Пока все дома"
11.20 "Фазенда"
12.10 "Моя родословная. Игорь Бутман"
13.00 "Тур де Франс"
14.00 "Вся правда о еде"
15.00 "Ералаш"
15.20 "Грех"
17.00 "Московское дело"
18.00 "Москва слезам не верит", 2 серии. Мелодрама
21.00 "Воскресное "Время"
22.00 "Yesterday live"
23.00 "Познер"
00.10 Футбол. Чемпионат России. XX тур. "Локомотив" - ЦСКА
02.10 "Тихий дом" на Венецианском фестивале
02.40 "В долине Эла". Триллер

### РОССИЯ 1

05.40 "Увольнение на берег". Мелодрама
07.20 "Смехопанорама Евгения Петросяна"
07.50 "Сам себе режиссер"
08.40 "Это мы не проходили". Фильм для детей
10.25 "Утренняя почта"
11.00 "Вести"
11.10 "Местное время. Вести-Башкортостан". Неделя в городе"
11.50 "Городок"
12.20 "С Дона выдачи нет". Боевик
14.00 "Вести"
14.20 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.30 "Вести. Дежурная часть"
15.00 "Честный детектив"
15.40 "Смеяться разрешается"
17.50 "По следу Феникса". Мелодрама
20.00 "Вести недели"
21.05 "Если бы я тебя любил..." Мелодрама
23.10 "Специальный корреспондент"
00.10 "33 веселых буквы"
00.40 "Путь войны". Боевик
02.25 "Холодная добыча-2". Мистический триллер
04.15 "Городок"

### НТВ

06.05 "Люди Икс: эволюция"
06.55 "Сказки Баженова"
07.25 "Дикий мир"
08.00, 10.00, 13.00, 16.00 "Сегодня"
08.20 "Русское лото"
08.45 "Их нравы"
09.25 "Едим дома!"
10.20 "Первая передача"
11.00 "Кремлевские жены. Виктория Брежнева. Домашняя жена застоя"
12.00 "Дачный ответ"
13.00 "Сегодня"
13.25 "Суд присяжных: главное дело"
15.05 "Своя игра"
16.00 "Сегодня"
16.25 "Преступление будет раскрыто"
17.20 "И снова здравствуйте!"
18.20 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.00 "Сегодня"
20.00 "Чистосердечное признание"
20.50 "Центральное телевидение"
21.50 "Дорожный патруль". Детективный сериал
23.45 "Авиаторы"
00.20 "Матрица: перезагрузка". Фантастический боевик
02.50 "Журавль в небе". Романтическая комедия
04.55 "Господа присяжные"

### БСТ

**08.00 Новости (на русск. яз.)**
**08.10 Мультфильм**
**09.25 "Сулпылар"**
**09.40 "Семер"**
**10.00 "Байтус"**
**10.15 "Артылыш"**
**10.45 "Учим башкирский язык"**
**11.05 "Телекомпас"**
**11.30 "Бабушкин сундучок"**
**12.00 "Тэмле"**
**12.30 "Автолегенды"**
**13.00 "Дарю песню"**
**14.00 Мультфильм**
**14.30 Художественный фильм**
**16.40 "Лица времени"**
**17.10 "Дарю песню!"**
**18.10 "Байык"**
**18.50 На соискание премии им. С. Юлаева. "Шаги по облакам". Р. Сабитов**
**19.20 "Хрустальный соловей-2010"**
**20.05 "Новое кино"**
**20.35 "В центре внимания"**
**21.10 "Урал Лото 6 из 40"**
**21.30 "Ватан". События недели**
**22.05 "Вечер.com"**
**22.50 "Приключенческое кино". Прогноз погоды**

ГӘЗИТТӘН КҮСЕРЕП...

# БЕР СЫЛБЫРҘЫҢ ҠУЛСАЛАРЫ...

## "Мәскәүлеләр кодексы" һәм скинхедтар бер йүнәлештә эшләй

**Мәскәү ҡала думаһы депутаттары "Мәскәүлеләр кодексы"н, йәғни баш ҡалала үҙ-үҙеңде тотоу нормаларын эшләгән һәм тәҡдим иткән. Ысынбарлыҡта һүҙ Мәскәүҙе "рус ҡалаһы" тип иғлан итеп, рус булмаған рәсәйлеләргә, БДБ илдәренән килгән ватандаштарыбыҙға баш ҡалала сит телдә һөйләшеүҙе һәм милли кейемдә йөрөүҙе тыйыу тураһында бара.**

Ошо унайҙан тыуған ярһыу фекер алышыуҙарға Владимир Путин нөктә ҡуйҙы кеүек. Мәскәү янындағы Усово ауылында ҡорам комплексын асыу ваҡытында Премьер, Рәсәй күп конфессиялы, шуға ла унда йәшәүсе барлыҡ халыҡтар ҙа тигеҙ хоҡуҡтарға эйә, "уртаҡ йорт" уларҙың барыһыныҡы ла, тип билдәрҙе.

Шулай итеп, Путин Конституцияны, "Рәсәй Федерацияһын ойошторосы булып уның күп милләтле халҡы тора", тигән һүҙҙәр яҙылған тәүге статьяһын барыһының да хәтеренә төшөрҙө. Әммә проблема нимәлә: ауыр ҡабул ителгән этник үҙаң "Мәскәүлеләр кодексы"нда сағылыш тапҡан һәм РФ-ның 80 процентын тәшкил иткән рустар араһында киң тарала. Ни өсөн ауыр, сөнки тап шул аң рустарҙы рус булмаған башҡа милләттәрҙән айырылырға, рус булмаған башҡа илдәрҙән һаҡланыусы ҡәлгә психологияһын нығытырға этәрә. Һөҙөмтәлә - Рәсәйҙең тарҡалыуының яңы юлы барлыҡҡа килә.

### Ҡан анализы

Беҙҙең яңы "ватансыл" элитабыҙ, шулай уҡ депутаттарыбыҙ Берлиндың - этник немец халҡының, ә Мәскәү менән Санкт-Петербургтың - күп милләтле империяның баш ҡалаһы булараҡ төҙәлөүен белмәй. Татарҙар Мәскәү йылғаһының арьяғындағы Ордынкала XVI быуатта уҡ йәшәй башлай. Шуға ла күпселектең хоҡуғы һәм мәнфәғәте, йәғни рустарҙың мәнфәғәте рус булмаған халыҡтарҙың мәнфәғәтенә ҡаршы ҡуйылырға тейеш түгел, юҡһа, Рәсәй емереләсәк. Иртәгә Мәскәү рус ҡалаһы тип иғлан ителһә, Ҡаҙанды - татар, Владикавказды осетин ҡалаһы тип иғлан итеп, уларҙан рустарҙы ҡыҫырыҡлап сығара башлаясаҡтар.

Рәсәйҙең баш ҡалаһын руслаштырырға тырышыу "РСФСР-ҙы суверенлаштырыу"ҙың идеологик дауамы булып тора. Һөҙөмтәлә нимәгә өлгәштек - СССР тарҡалды, Мәскәү менән Киев, Минск, Севастополь айырылды, РСФСР-ҙан ситтә ҡалған һәм үҙ ереңдә икенсе сортлыға әүерелгән 20 млн. рус гражданлыҡ хоҡуғынан мәхрүм ителде.

Шуныһы ҡыҙыҡлы, 1918 йылда уҡ, СССР ойошторолғанға тиклем, илдең аҡыллы кешеләре (мәҫәлән, Николай Бердяев) рустарҙың империясылыҡ һәм рухи үҙаңының этник, ҡәбилә үҙаңына, ҡан буйынса ҡәрҙәшлек тойғоһона әүерелеүендә хәүеф күрә. Улар, "бөйөк рус сепаратизмы", Германия йәки Польша өлгөһө буйынса рус милли дәүләте төҙөргә ынтылыш Рәсәйҙе бөтөрәсәк, тип иҫәптә. Сөнки Рәсәй IX быуаттан - славян һәм фин-уғыр халыҡтарының, ә XVI быуаттан, Иван Грозный Ҡаҙанды алғандан һәм Себерҙе буйһондорғандан алып дәүләт ойоштороусы өсөнсө этносты - төркиҙәрҙе лә индереп, өс яҡлы берләшмә булараҡ төҙөлгән.

Бөйөк рус сепаратизмы (1991 йылда уны "суверенлаштырыу" тип атанылар), Великороссияның (РСФСР) Малороссиянан (УССР) һәм Белоруссиянан (БССР) айырылыуы, тип иҫәптә Бердяев, "мең йыллыҡ рус батшалығын" юҡҡа сығарыуға, бөйөк рус мәҙәниәтен юғалтыуға килтерәсәк. Сөнки мәҙәниәт батша Рәсәйендәге барлыҡ халыҡтар - великоростар, малоростар, поляктар, татарҙар, немецтар, йәһүдтәр тарафынан булдырыла. Әйткәндәй, уның бары тик этник немецтар тарафынан булдырылған бөйөк немец мәҙәниәтенән айырмаһы ла шунда.

### Бысаҡ һәм тәре

Эмигранттарҙы күҙ уйымы икенсе булған өсөн генә үлтергән скинхедтарҙың енәйәттәре лә, Мәскәүҙе "рус ҡалаһы" тип иғлан итергә тырышыу ҙа - бер үк ҡурҡыныс сирҙең симптомы. Был сир артында Совет заманында уҡ башланған Рәсәйҙе артыҡ христианлаштырыу тора. Бөгөн беҙгә телевидение ҡапма-ҡаршы картина күрһәтә: кеше үлтереүҙә ғәйепләнгән скинхед суд залында Изге Ана ("Божья Матерь") тәреһен тотоп тора. Бихисап йәштәр үҙҙәренең "таҙа", "славян" Рәсәйе өсөн көрәшенең Тыуған илде үлемгә этәреүен аңламай. Рәсәйҙең күп милләтле дәүләт булараҡ барлыҡҡа килеүе һәм шулай ғына йәшәй алыуын аңламау тарихи хәтерҙең, тарихи белемдең юғала барыуын күрһәтә, бөгөнгө мәҙәниһеҙлектең һөҙөмтәһе булып тора. Рәсәйҙәрҙең бер өлөшөнөң башҡа республикаларҙан килеүселәргә дошмандарса мөнәсәбәте - уларҙың рухи үҫешмәүе күрһәткесе. Кешеләр гастарбайтерҙарҙың ҡасандыр рустар менән бергә 1941 -1945 йылдарҙа Еңеү яулаған, СССР-ҙың ҡеүәтен булдырған кешеләрҙең балалары һәм ейәндәре булыуын аңламай.

ШУЛАЙ ИТЕП...

**Рус яҙмышы шуның менән дә ҡатмарлы - беҙ немецтар, поляктар, шведтар кеүек, ҡан ҡәрҙәшлегенә нигеҙләнгән этник оҡшашлыҡты үҙебеҙгә ҡарата ҡуллана алмайбыҙ. Әлбиттә, власть рустарҙың мәнфәғәтенә, йолаларына, инаныуҙарына күҙ йома икән, был насар. Үҙған быуаттың 90-сы йылдарында рустар үҙҙәрен тыуған ерҙәрендә етем итеп тойған хәл-торош барлыҡҡа килгәйне - быныһы хәүефле, әлбиттә. Әммә рустарҙы башҡа халыҡтарҙан айһалма айырыу, илебеҙҙең күп милләтле тәбиғәтен онотоу - тағы ла хәүефлерәк. Бындай "рус марш"тары упҡынға алып бара.**

**Александр ЦИПКО,**
**философ, политолог.**
**"Аргументы и факты"**
**гәзитенән.**

БАҠСА

# ДӨРӨҪ ҺЫУ ҺИБЕҮҘӘ -

## бар уңыш нигеҙе

**Үҫемлектәр өсөн һыуҙың мөһимлеге билдәләп бөткөһөҙ, сөнки уларҙың күҙәнәктәрендәге бөтә биологик процестар тап һыу ярҙамында бара. Һәр баҡсала емеш биреүсе ағас һәм ҡыуаҡлыҡтар була һәм шуға ла бөгөн уларға нисек дөрөҫ һыу ҡойоу тураһында һөйләшәсәкбеҙ, сөнки дым етерлек булғанда ғына яҡшы уңыш алырға мөмкин.**

Баҡса культуралары үҫешенең төрлө этаптарында һыу төрлө күләмдә кәрәк. Иртә яҙ уларға ҡар ирегән һыу ҙа етә. Яҙ аҙағында, йәй башында буласаҡ уңышҡа нигеҙ һалына, ботаҡтар һәм тамыр системаһы әүҙем үҫешә, шуға ла был ваҡытта көндәр ҡоро тора икән, ағас һәм ҡыуаҡтарға мул итеп һыу ҡойоу фарыҙ. Ағастарҙы һыу менән туйындырыуҙың икенсе этабы саҡ ҡына һуңыраҡ, емештәр барлыҡҡа килгәс башҡарыла. Ошонан һуң һыу ҡойоуҙы туҡтатырға ла була, тик йәй ҡоро булған осраҡта август аҙағында өсөнсө тапҡыр ағастарҙы дым менән туйындырыу мөһим.

Ҡара һәм ҡыҙыл ҡарағат дым ярата, шуға ла уға кәм тигәндә өс тапҡыр һыу ҡойорға кәңәш ителә. Бер оло ҡыуаҡҡа 20-25 литр һыу етә.

Крыжовникҡа ла йәйге миҙгелдә өс тапҡыр һыу ҡойоу етә, тик емештәр эре булһын тиһәгеҙ, иң мөһим - емештәр төймәләнә башлаған мәлдә һыуҙы күберәк һибергә кәрәк.

Ҡурай еләгенә һыуҙы һауа шарттарына, ямғырҙар яуыуына йәки яумауына ҡарап, йышыраҡ һибергә кәрәк, сөнки был ҡыуаҡлыҡ тупраҡтың артыҡ дымлы булыуын ярата. Сәскә атҡан осорҙа көндәр ҡоро торһа, аҙнаһына бер тапҡыр ҡыуаҡлыҡтар араһына 1 кв. метрға 20-35 литр иҫәбенән һыу һибергә кәрәк. Ҡыуаҡ емеш биреүҙән туҡтағас, ҡарт ботаҡтарҙы ҡырҡып, ҡалған йәш ботаҡтарҙы тағы ла бер тапҡыр туйындырып алырға ярай. Көҙ ҡоро килһә, япраҡтар ҡойолған мәлдә тағы ла 1 кв. метрға 50 литр һыу ҡойоу киләһе йылдың уңышын бермә-бер яҡшыртасаҡ.

Ағастарға һыу ҡойғанда тупраҡтың өҫкө өлөшөн генә еүешләү бер ниндәй файҙа килтермәйәсәк. Дым 80-100 см тәрәнлеккә үтеп инергә тейеш. Йәш, емеш бирә башламаған ағасҡа яҡынса 5-10 биҙрә, емеш биргәненә 15 биҙрә һәм унан да күберәк һыу китә. Ағастың төбөн 1-1,5 метр киңлектә йомшартып, бер аҙ тәрәнәйтҡәс кенә һыу ҡойорға була. Ағастың төрөнә ҡарап, һыу күләме һәм һыу һибеү ваҡыты төрләсә булыуы ихтимал. Мәҫәлән, сейәгә сәскә атҡан, йәш үҫентеләр барлыҡҡа килгән, көҙөн ағастарҙан япраҡтар ҡойолған ваҡытта, сливаға - сәскә атыр алдынан һәм сәскә атып бөткәс, бер ағасҡа 3-6 биҙрә һыу иҫәбенән ҡоялар.

Алмағас һәм грушаны йәшенә ҡарап дымға туйындыралар. Йәш ағасҡа яҙ - 2-4 биҙрә, йәй - 5-6 биҙрә һыу етә. Емеш биреүсе ағастарға сәскә атҡанға тиклем, сәскә атып бөткәс, был осорҙан өс аҙна ваҡыт үткәс һәм емештәр өлгәрә башлаған мәлдә ҡойорға. Әгәр ҙә көҙ ҡоро килә икән, октябрҙә ағастарға мотлаҡ рәүештә ҡыу ҡойорға кәңәш ителә, сөнки был осраҡта улар ҡышҡы һалҡындарға бирешмәйәсәк.

Әйткәндәй, емеш биреүсе ағастар һәм ҡыуаҡлыҡтарҙан слива, алмағас, ҡарағат, ҡурай еләге һыу ярата. Мәҫәлән, 1 кг алма биреү өсөн алмағасҡа 50 литр тирәһе һыу кәрәк, дым етешмәһә, емеш биреү кәмейәсәк. Дым етешмәүен груша, сейә, крыжовник еңелерәк кисерә.

Ағастарға ҡояшта йылынған һыу ҡойорға кәңәш итә тәжрибәле баҡсасылар. Һыуҙы кисен ҡойһағыҙ, ул тупраҡҡа яҡшыраҡ һеңәсәк. Ҡоро йәйҙә һыу етешмәһә, ағастың иртә ҡартайыуына һәм емеш биреү осороноң ҡыҫҡарыуына килтерә. Шуға ла ағастар емеште аҙыраҡ бирә, ҡышын өшөй. Уларҙы ваҡытында дым менән туйындырыу бик мөһим сара икәнен онотмаһағыҙ ине.


ИНФОРМАЦИОННОЕ СООБЩЕНИЕ

Казенное предприятие Республики Башкортостан Редакция журнала "Башкортостан укытыусыхы" (далее - продавец) сообщает о проведении открытого аукциона по продаже государственного имущества - автомобиля DAEWOO NEXIA, находящегося в его оперативном упралении (далее - Имущество).

Собственник Имущества - Республика Башкортостан.

Организатор торгов (Продавец) - Казенное предприятие Республики Башкортостан Редакция журнала "Башкортостан укытыусыхы".

Решение о продаже принято Министерством земельных и имущественных отношений Республики Башкортостан (приказ Минземимущества Республики Башкортостан от 17.08. 2010 года№ 1249).

На продажу на открытом по составу участников и открытом по форме подачи предложений по цене Имущества аукционе выставляется Имущество - автомобиль DAEWOO NEXIA, 2005 года выпуска, государственный регистрационный номер С 969 ЕР 02. идентификационный номер XWB3D31UD5A053260, цвет кузова - бордовый, кузов № 053260, двигатель №464794В.

Начальная цена Имущества с НДС - 104600 (сто четыре тысячи шестьсот) рублей.

Задаток для участия в аукционе - 10% от начальной цены, что составляет - 10460 (десять тысяч четыреста шестьдесят) рублей.

Шаг аукциона - 1% от начальной цены Имущества, что составляет 1046 (одна тысяча сорок шесть) рублей.

Форма, сроки и порядок платежа - в наличной или безналичной форме единовременно в течение 10 календарных дней с момента заключения договора купли-продажи Имущества в валюте РФ (рубль).

Вид обременения Имущества: отсутствует.

К участию допускаются юридические и физические лица, своевременно подавшие заявку на участие в аукционе и представившие документы в соответствии с перечнем, объявленном в информационном сообщении, обеспечившие поступление на счет Продавца, указанный в настоящем информационном сообщении, установленной суммы задатка в установленный срок.

**Прием заявок для участия в аукционе** осуществляется Продавцом в срок со дня публикации информационного сообщения в печати по 1.10. 2010 года включительно с 9.00 часов по 17.00 часов по местному времени ежедневно (кроме выходных и праздничных дней) по адресу: Республика Башкортостан, г.Уфа, ул. Гоголя, 34, кабинет №3, редакция журнала "Башкортостан укытыусыхы".

**Документы, представляемые для участия в аукционе:**

а) заявка на участие в аукционе в 2-х экземплярах (форма заявки представлена на сайте редакции http://www.uchbash.ru, либо можно получить по адресу г.Уфа, ул. Гоголя, 34, кабинет №3, редакция журнала "Башкортостан укытыусыхы");

б) платежное поручение с отметкой банка об исполнении, подтверждающее внесение задатка;

в) подписанная претендентом опись представленных документов;

г) в случае подачи заявки представителем претендента предъявляется надлежащим образом оформленная доверенность.

Физические лица предъявляют документ, удостоверяющий личность. Юридические лица дополнительно представляют следующие документы:

а) нотариально заверенные копии учредительных документов;

б) решение в письменной форме соответствующего органа управления о приобретении Имущества (если это необходимо в соответствии с учредительными документами претендента).

До подачи заявки претенденту необходимо перечислить задаток на расчетный счет Продавца - Казенное предприятие Республики Башкортостан Редакция журнала "Башкортостан укытыусыхы", ИНН 0274109874 р/с 40602810700000000266, в банке Филиал ОАО "УралСиб" г.Уфы, к/с 30101810600000000770, БИК 048073770 на основании заключенного с ним договора о задатке.

От одного претендента для участия в аукционе принимается только одна заявка.

Аукцион, в котором принял участие только один участник, признается несостоявшимся.

Аукцион состоится 8.10.2010 года в 10.00 часов (по местному времени) по адресу: Республика Башкортостан, г.Уфа, ул. Гоголя, 34, кабинет №8, редакция журнала "Башкортостан укытыусыхы". Подведение итогов аукциона состоится 12.10.2010 года по адресу Республика Башкортостан, г.Уфа, ул. Гоголя, 34, кабинет №8, редакция журнала "Башкортостан укытыусыхы".

Рассмотрение заявок состоится 5.10.2010 года.

Задаток должен поступить на расчетный счет Продавца не позднее 4.10.2010 года.

Предложение о цене Имущества заявляются участниками открыто в ходе проведения аукциона (открытая форма подачи предложений о цене).

Победителем аукциона признается покупатель, предложивший в ходе торгов наибольшую цену.

Уведомление о признании участника аукциона победителем выдается победителю или его полномочному представителю под расписку либо высылается ему по почте (заказным письмом) в течение 5 дней после подведения итогов аукциона.

В течение пяти дней после подведения итогов аукциона с победителем заключается договор купли-продажи Имущества.

Оплата производится на счет Продавца. Задаток, внесенный покупателем на счет Продавца, засчитывается в счет оплаты приобретаемого имущества.

Право собственности на Имущество переходит к покупателю в порядке, установленном действующим законодательством. Расходы на оформление права собственности относятся на покупателя.

После завершения торгов участникам, не ставшим победителями, денежный задаток возвращается в течение 5 дней после подведения итогов аукциона.

Оформить заявки, получить дополнительную информацию об условиях проводимого аукциона и ознакомиться с иными материалами (в том числе с условиями договора купли-продажи) Вы можете в редакции журнала "Башкортостан укытыусыхы" по адресу: **Республика Башкортостан, г.Уфа, ул. Гоголя, 34, каб. №3 или по телефону (347) 272-75-88.**

ӘСӘЙЕМ ЛӨҒӘТЕ

# "КИСКЕ ӨФӨ" БАШЛАП ЕБӘРҘЕ,

## ә беҙ дауам итәйек

**"Шойҡаны"**. Был һүҙҙе күберәк минә әйтә өләсәйем. "Ни шойҡаны тейҙе һинә, тик ултыр". "Шойҡаны юк бит уның, йөрәһен". Шойҡаны - "ни зыяны"тигәнде аңлата.

**"Шардауай, шардыуан"** тигән лөғәт тә бар. Эсе-тышы бер, шарылдап, уйнап-көлөп йөрөгән, алсаҡ, ихлас кешегә ҡарата әйтелә был һүҙ. Мәҫәлән, өләсәйемдең шундай мәҡәле бар: "Шардыуан һүҙ күтәрә, аҫтыртын ҡул күтәрә".

**"Шыпа"**. "Мин уны шыпа был арала абайлағаным юк", "һуңғы арала шыпа беҙгә килгәнең юк, әллә берәй эшең сығып торамы?" Тимәк, шыпа - бөтөнләй, тигәнде аңлата.

**"Тәзәл"** - еңмеш һүҙенә синоним. "Апайыңды әйтәм, торғаны менән тәзәл бит инде, үҙ һүҙен һүҙ итмәйенсә ҡуймай", - был өләсәйем телмәренән. Миңә күп осраҡта: "Ярай инде, тәзәлләнмә", - ти.

**"Бирән"** - күп ашаусы кешегә ҡарата әйтелә. "Бер туктауһыҙ ашайһың, бирән булдыңмы әллә?" "Туйғанын, туймағанын белмәй ашай, бирән булыр инде", - былар ололар ауыҙынан. Тимәк, минеңсә, бирән - күп ашаусы тигәнде аңлата.

**"Мукшы"** - һыҡмыр, һаран, иҫәпсел кешегә ҡарата әйтелә. "Ул мукшынан йомош алыуҙары - ай-һай", "Еҙнәм торғаны менән мукшы бит инде" һ. б.

**"Биғлыйланма"** - "бик нык ҡыланма" мәғәнәһендә. "Биғлыйланып ултырғансы, ашағыҙ ҙа, тора һалығыҙ", - ти өләсәйем, ашаған ваҡытта шаяраҡ.

**"Ылаңҡы"** - бәлә һүҙенә синоним. "Ылаңҡыны һалмай ғына тор әле", "Шул ылаңҡы үҙегенә үткәрҙе бит инде", тимәк, һәр ваҡыт ҡамасау булып, йә бәләһен һалып йөрөгән кешегә әйтелә был һүҙ.

**"Еккүремсе"** - артыҡ мәғәнәһендә. "Унда барып, еккүремсе булып йөрөгәнсе, бармауың хәйерле", "Мине еккүремсе итеп алдылар бит инде". Яратып етмәгәнде ошо һүҙ менән аңлаталарҙыр тип уйлайым. Өләсәйем үҙенә ҡарата кемдәндер йылы мөнәсәбәт ала алмағанда ошо һүҙҙе ҡуллана.

**"Изнәгәм"** - ихлас һүҙенә синоним. "Минең менән изнәгәм ултырып һөйләшкәнең бармы?" - өләсәйем телмәренән.

**"Мыймыс"** - эшен ерена еткереп үтәмәгән, әкрен ҡуҙғалып йөрөүсе кешегә әйтәләр. "Мыймысланып торма", "Мыймысың әйләнмәһен" тиҙәр был осраҡта.

**"Шылғаяҡ"** - хәйләкәр һүҙенә синоним. "Ул шылғаяҡтан булыр ул", "Шылғаяҡланып үтте бит ғүмере" - өләсәйем телмәренән.

**"Сәкегән"** - урлаған, сәлдергән һүҙенә синоним. "Минең бүректе сәкегәндәрме әллә?", "Ул бит сәкергә оҫта".

**"Ҡыштыҡлаған"** - үтә нык бысраҡ, керле һүҙенә синоним. "Ҡулың ҡыштыҡлап китмәһен, һабынлап йыу", "Ағайыңдың өҫтө ҡыштыҡлап киткән"- былар өләсәйем телмәренән.

**Лиза ЮНЫСБАЕВА.**
**(Дауамы бар).**

АЛДАР МЕНӘН ЕРӘНСӘ ҠОРО




## "Һауа дауыт вагоны..."

Әтейем беҙ бәләкәй саҡта ҡыҙыҡлы бер хәлде һөйләй торғайны.

Бер инәй ауыл советына илап килеп ингән.

- Ни булды? - тип һорайҙар икән унан, хафаланып.

- Балам бәләгә тарыған, ярҙам итегеҙ, - ти икән инәй үкһеп.

- Ҡайҙа? Нисек? - тип төпсөшә башлағас:

- Һауа дауыт вагондарында ултырып осҡанда деүәкәмиттәрен юғалтҡан балаҡайым, - тип түгелеп илай ти был.

"Самолетка ултырып осҡанда документтарын юғалтҡан", тип әйтергә теләгән икән.

Хәҙер атай-әсәйҙәр балаларын оҙатҡанда" "һауа дауыт (завод) вагондарына ултырғанда деүәкәмиттәренде ҡара", - тип мәрәкәләйҙәр.

## "Һеперткеләр ашарлыҡ булып килә..."

Шаян ағайым бар. Үҙе шундай алсаҡ, телгә бай, һәр бер һүҙен йөтөрҙәй булып тыңлайым уның. Еңгәйебеҙ ҙә бик уңған, ир эшеме, ҡатын эшеме - ҡарап тормай, дөрөп алып бара. Бер уларға ҡунаҡҡа килдек. Еңгәйебеҙҙең ҡулы теймәгәнме, йылы шулай килгәнме инде, баҡсала элеп ҡабырлыҡ йәшелсә күренмәй. Ағайым беҙҙең ҡараштарҙы һиҙеп ҡалды ла:

- Аллаға шөкөр, еңгәгеҙҙең һеперткеләре ашарлыҡ булып килә, - тип көлөп ебәрҙе.

Рәхәтләнеп көлөштөк тә, барыһы ла онотолдо. "Ошо үҙе ғаиләһе бәхетенең бер асҡысылыр инде, бер-берендең етешһеҙлеген күрмәү йәки уйын-көлкө менән үткәреп ебәреү", - тип уйлап ҡуйҙым шунда.

## "Аванстан бер ярты..."

Ауылыбыҙҙа эскегә әүәҫ бер кеше йәшәне. Өнәп етмәүҙәрен, ғаиләһе ошо арҡала йонсоуын аңлап, эсеүен ташларға ла итеп ҡарай, әммә ҡулынан килмәй.

Бер көндө магазин янынан үтеп барғанда: "Түҙ, йөрәгем, түҙ. Әйҙә, үтеп китәйек. Тыңлаһаң, аванстан - бер ярты, получканан - бер ярты", - тип һөйләнә икән.

Йөрәген усына тотоп, көс-хәл менән магазинды үтеп киткән был. Шунан:

- Эй, рәхмәт, йөрәгем, түҙҙең, хәҙер рәхәтен күр, - тип, кире боролоп, ике ярты алған.

## "Әйҙүк, Хәсән, кәпәсенде үҙем элермен"

Ауылдағы "һуктырырға" яратҡан бер ағай, ҡайҙа ҡунаҡ барғанын белеп ҡалһа, һин дә мин инеп ултыра ине шул өйгә.Бер ваҡыт шулай ҡор барған өйгә килеп ингән дә, башҡаларҙың аптыраулы ла, һынаулы ла ҡарашына иғтибар итмәй:

- Әйҙүк, Хәсән, әйҙүк, кәпәсенде үҙем элермен, - тигән.

Хәҙер ауылдаштар ҡунаҡҡа барһалар: "Кәпәсемде эләһегеҙме, әллә үҙем эләйемме?" - тип шаярта.

## "Булмай икәнде үҙең беләһең..."

Беҙҙең яҡта бер рәйес булды. Йомош менән килгән һәр кемгә "булмай" тип сығара икән был. Шуға "булмай" тигән ҡушамат та таҡҡандар быға.

Бер ваҡыт уға йомош менән бер ир ингән. Йомошон әйткәс, тура быға нисек итеп ярҙам итергә, тип баш ватып ултыра икән. Ҡушамат тарихын ишетмәгән, уны-быны белмәгән ир:

-Йә, буламы, юҡмы?- тип һораған, сабырһыҙланып.

- Булмай икәнде үҙең беләһең икән, булмай инде, - тип әрләп сығарып ебәргән быны рәйес бүлмәһенән.

**Нурия ҠУНЫСБАЕВА.**
**Ейәнсура районы**
**Иҫәнғол ауылы.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# САБЫЙЛЫҠ СИФАТЫ -

## керһеҙ күңел билдәһе

Уҡығандар ҡүктә осор, һыуҙа йөҙөр, Юҡтыр унда әүлиәлек, кирәмәттәр.

**(Аҡмулла).**

Үҙегеҙҙең уйҙарығыҙға иғтибарлы булығыҙ, улар ҡылыҡтарығыҙҙың башы.

**(Лао Цзы).**

Ваҡыты-ваҡыты менән нимәгәлер инаныуыңды икеләнеүҙәргә дусар итеп алырға ла кәрәк.

**(Ричард Бах).**

Беҙ тыуыу менән үлә лә башлайбыҙ, ғүмер ахыры уның нисек башланыуына бәйле.

**(Манилий).**

Үҙегеҙҙә балалыҡты үлтермәгеҙ: ул һеҙгә кеше булып ҡалырға ярҙам итер.

**(Энтони Веббстер).**

Кешеләр өҫтөнән хаким итеүсе үҙ иркен дә юғалта.

**(Уильям Шекспир).**

Иректе һөйөү - ул кешеләргә булған һөйөү, власть һөйөү - үҙеңде һөйөү.

**(Уильям Хэзлитт).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер ауылда бик аҡыллы ҡарт йәшәгән, ти. Ул балаларҙы бик нык яратҡан һәм улар менән күп ваҡытын үткәргән. Ҡарт кеше гелән генә балаларға үҙ ҡулдары менән яһалған үтә нескә, тиҙ ватылыусан әйберҙәр бүләк итер булған. Бабай өйрәткәнсә, нисек кенә һаҡ ҡыланмаһын, балалар ул уйынсыҡтарҙы вата ла ҡуя һәм илап ебәрә икән, ти. Шунан бабай ул балаға тағы ла нескәрәк уйынсыҡ бүләк итә икән. Бер көн ата-әсәләр ҡартҡа мөрәжәғәт итеп, былай тигән:**

**- Һин аҡыллы кеше һәм беҙҙең балаларҙы яратаһың, уларға изгелек кенә теләйһең. Ләкин ни өсөн һин уларға шундай тиҙ ватыла торған нескә әйберҙәр бүләк итәһең? Улар, һин өйрәткәнсә, уларҙы һаҡларға тырыша, тик уйынсыҡтар барыбер ватыла, шуға улар илай...**

**- Йылдар үтер, - тигән ҡарт, - кемдер уларға үҙенең йөрәген бүләк итер. Бәлки, минең был ҡылығым уларҙы кеше йөрәге менән иплерәк булырға өйрәтер..."**

ИҒЛАН

Халыҡ-ара кимәлдәге **(Cambridge, ICELT)** тәжрибәле уҡытыусы, РФ дөйөм белем биреү алдынғыһы, инглиз теле уҡытыусыларының Рәсәй-Америка конкурсы **(TEA, 2001)** еңеүсеһе **инглиз телен** өйрәнергә теләүселәрҙән төркөм (6-9 кеше) йыя. Дәрестәр автор программалары буйынса үткәрелә.

**Тел.: 8-917-43-47-270, 256-98-04.**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:**
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Таһир ИШКИНИН,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

**Беҙҙең адрес:**
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru
E-mail: info@kiskeufa.ru
kiskeufa@ufacom.ru

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| Баш мөхәррир | 253-25-44 |
| Баш мөхәррир урынбаҫары | 246-03-24 |
| Бухгалтерия | 246-03-23 |
| Хәбәрселәр | 252-39-99 |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә. Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – 50665, 50673

Тиражы - 6035
Заказ 3514